ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискә Өфө

8-14 ноябрь (ҡырпағай) 2024

№44 (1137)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Мин дә алдана яҙҙым...



6

Аҫаба халыҡтың...

мәҙәни кодына тоғролоҡ һаҡлайыҡ



8-9

Яҙмыш тамырҙары бик тәрән



11

Ул йырларға яратты...



12-13

***Һәр көнөң - бәләкәй генә ғүмер: һәр иртән йоҡонан уяныуың - бәләкәй тыуыуың, һәр иртәң - бәләкәй йәшлегең, һәр кисең һәм йоҡларға ятыуың - бәләкәй генә үлемең.***

***(А. Шопенгауэр).***

АФАРИН!

# ҠУРҠМАЙЫНСА...

## маҡсатыңа ынтыл икән!




**Ошо көндәрҙә Башҡортостандан өс уҡыусы Беренселәр хәрәкәтенең алдынғы проекты - "Ҙур тәнәфес" Бөтә Рәсәй конкурсында еңеү яуланы һәм һәр береһе 1-әр миллион һум аҡса алдылар. Бына улар: Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатынан Әлиә Исҡаҡова, 124-се лицейҙан Аделина Ишбулатова һәм Р. Бикбаев исемендәге 102-се Башҡорт гимназияһынан Елизавета Белова. Еңеүселәрҙе "Артек" халыҡ-ара балалар үҙәгендә тәбрикләнеләр, улар шунда ял итте. Уңайҙан файҙаланып, ҡыҙҙарҙың береһе - Әлиә ИСҠАҠОВА менән әңгәмәләштек.**

➔ **Шатлығыңды уртаҡлашабыҙ, Әлиә, һәм һөйләшеүҙе үҙең тураһында, "Ҙур тәнәфес" конкурсының асылы хаҡында башлайыҡ.**

- Мин Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының 11-се класс уҡыусыһы. Бында уҡыуыма дүрт йыл. Үҙем Өфө ҡыҙы, ә тамырҙарым Баймаҡ районынан була. Уҡыуым һәм гимназиям тураһында һөйләгәндә, тәү сиратта, нәҡ ошонда белем алыуыма шул тиклем шатмын. Сөнки бында мин тәрән белемле һәм изге күңелле уҡытыусылар, яҡшы дуҫтар һәм бик күп таныштар таптым, туған башҡорт телемде өйрәндем. Әле физика-математика йүнәлешендәге класта уҡыйым, информатика һәм программалау өлкәһе менән ныҡлап ҡыҙыҡһынам, рус теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиадаларҙа ҡатнашам һәм еңеүҙәрем дә бар. Халыҡ бейеүҙәре менән шөғөлләнәм, блогерлыҡ менән дә мауығам.

**(Дауамы 5-се биттә).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Халҡыбыҙ бер ниндәй ауырлыҡтарға ҡарамай, рухын төшөрмәй, МХО-ла ҡатнашыусыларға ла һуңғы тинен биреп ярҙам итә, үҙ донъяһын, ғаиләһен дә хәстәрләй. Ә шулай ҙа бөгөн һеҙ ҡышты бесәнле-һуғымлы, һөтлө-майлы ҡаршыларға әҙерме?***

***Эльвира СӘЛИХОВА, хужабикә, Мәләүез районы:*** Ауырлыҡтар, һынауҙар кешене сыныҡтыра, тигәндәре бик тә дөрөҫ. Илебеҙ именлегенә хәүеф янаған һуңғы йылдарҙағы ваҡиғалар, һәр төрлө санкциялар борсолдормай ҡалманы, әлбиттә. Әммә һәр күренештең ыңғай яғын табып йәшәргә тырышырға кәрәк.

Бөгөн бөтә республика буйынса Махсус хәрби операциялағыларға ярҙам эше киң ойошторолған. Ауыл клубтарында, китапханаларҙа, ҡайһы бер мәктәптәрҙә маскировкалау селтәре үреү яйға һалынған. Унда һәр теләгән кеше ҡатнаша. Материалдар менән "Йөрәк йылыһы" ирекмәндәр хәрәкәте ярҙам итә. Һәр кем ҡулынан килгәнсә яугирҙар өсөн кәрәкле әйберҙәр йыйып, гуманитар ярҙам ойоштороған ойошмаларға илтә, ялға ҡайтҡан яҡташтарыбыҙға биреп ебәрә. Хатта ҡартлыҡ көнөнә тип йыйған аҡсаларын да илтеп биргән кешеләрҙе беләм. Ошо изге эштә әүҙем ҡатнашҡан, ихлас күңелдән ҡушылған, өлөш индергән ихлас халҡыма ҙур рәхмәт.

Ҡыш матур килһен, донъялар тынысланып, илгә-көнгә именлек килһен берүк. Шәхси хужалығында етештергән ризығы, мал-тыуары һәр кемдең үҙенә насип булһын тип теләге килә. Ниндәй генә ҡатмарлы осор булмаһын, халҡым барыбер тырышып донъя көтә. Киләсәккә яҡты өмөт менән ҡарай. Ауырлыҡтар беҙҙе сыныҡтырып ҡына ҡалманы, берләштерҙе лә кеүек. Былтырлы-быйыллы ауыл халҡы ныҡлап баҡса үҫтерә, мал һанын арттыра, ҡош-ҡортон күбәйтә башланы. Бында, әлбиттә, санкцияларҙың да йоғонтоһо бар. Ҡала халҡы ла байтаҡ йылдар ташлаған баҡсаларын төҙөкләндереп, яңынан һуҡмаҡ һалды. Бер күршем бына ике йыл рәттән үҙенә һәм балаларына етерлек йәшелсә-емеш йыйып алды. Насармы ни? Бер ҙә насар түгел! Ауылдарҙа ла хәҙер картуф баҡсаларын яңынан һөрөп, картуфын, ҡабағын, сөгөлдөрөн ултырта башланылар.

Әле бына ауылдарҙа гөрләп ҡош-ҡорт өмәләре уҙа. Элекке кеүек, көндөң тунғаҙығанын көтмәйҙәр хәҙер беҙҙә. Һәр кемдең тундырғыс һандығы бар. Беҙҙең үҙебеҙҙең ике һыйыҡтыстан башҡа өс тундырғыс та ҡаҙ, өйрәк, бройлер менән шыпа тулды. Егермеләгәне ҡалаға "осто". 17 ҡаҙ - бер һуғымлыҡ, тиһәләр ҙә, беҙ йыл һайын эре мал да һуябыҙ. Уныһының яртыһын һатабыҙ йә туғандар менән бүлешеп алабыҙ. Туған-тыумасаны йыйып, һуғым ашына саҡырып, айыҡ табын ҡороп, йола үтәйбеҙ. Борондан килгән ғөрөф-ғәҙәт бит инде был, уны оноторға ярамай. Йола тотҡан хур булмаҫ, тигән бит халҡыбыҙ.

Шөкөр, ҡышҡа етерлек майы ла, ите лә бар. Ҡалала йәшәгән балаларға ла етә, туғандарға ла өлөш сығарҙыҡ. Быйылғы ямғырлы йылда үлән матур булғас, һыйырҙар ҙа һөтлө булды. Теге өс тундырғыстың береһе эремсек, май, ҡорот менән тулды. Быйыл ҡуйыртылған һөт эшләргә өйрәнеп алдым. Уныһы һыйыр һыу алып, быҙаулағанға тиклем етәсәк тип торам әле бына. Хатта эремсек, ҡороттан һуң эркет һыуын да түкмәй, тундырып ҡуйҙым. Ҡышын иретеп, ҡоймаҡ болғарға бик тә ярап ҡала ул.

Бына шулай йәшәп ятҡан булабыҙ. Минең бер бикәм онотҡанда бер ауылға ҡайтҡан була ла, "Эй, ауылда шул тиклем рәхәт, бөтә ризыҡ үҙеңдеке", тигән була. Рәхәтме-ҡыйынмы икәнен ауылда йәшәгән кеше үҙе генә белә инде. Аяғың тыпылдамаһа - ауыҙың шапылдамай, тип әйтеп булмай бит инде үҙеңдән оло кешегә.

12+

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

✓ Бары тик 2021 йылда ғына Рәсәй ҡатын-ҡыҙҙары фуралар, үҙ бушатҡыс һәм ауыр йөк машиналары, трактор, комбайндар, баржалар һәм метро поездары һ.б. транспорт төрҙәрен йөрөтөргә хоҡуҡ ала.



БЫНАҒАЙЫШ!

**Бөгөн беҙ ҡалала ла, ауылда ла еңел автомашиналар руле артында елдереүсе гүзәл заттарға күптән битарафбыҙ, ә бына шул уҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙың пассажирҙар автобусы, йөк машинаһы йә булмаһа трактор йә комбайн йөрөтөп барыуына беҙ барыбер ҙә ғәжәпләнеберәк ҡарайбыҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, бындай һөнәргә эйә ҡатын-ҡыҙҙарҙы беҙгә осратырға ла тура килгәне юҡтыр әле, сөнки еңел автолар менән сағыштырыуы ҡыйыныраҡ булған был ауыр техника төрҙәрен йөрөтөргә дәрт һәм теләк кенә түгел, көс тә, уның төҙөлөшө буйынса махсус белем дә, сыҙамлыҡ һәм әрһеҙлек тә кәрәк бит.**

# ҒАИЛӘ УСАҒЫН КЕМ ҺАҠЛАР?

Элегерәк, айырыуса Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында, ҡатын-ҡыҙ эшләмәгән бер генә хеҙмәт төрө лә ҡалмағандыр. Трактор булһа, бик шәп әле, булмаһа, үгеҙ егеп ер ҙә һөргән, ауыр станоктар артында ҡорал, хәрби машиналарға деталдәр ҙә етештергән, самолеттарҙа осоп, дошман позицияларына бомбалар яуҙырған; хатта һуғыштан һуң да яуҙа ятып ҡалған ирҙәре урынына ауыр эштәр башҡарыуын дауам иткән ҡатын-ҡыҙ.

Ниһайәт, 1978 йылда СССР хөкүмәте тарафынан ауыр, зарарлы һәм хәүефле шарттарҙағы эшмәкәрлек төрҙәрендә ҡатын-ҡыҙ хеҙмәтен файҙаланыуҙы тыйған ҡарар ҡабул ителә. Табиптар һәм хеҙмәт хәүефһеҙлеге буйынса белгестәр буласаҡ әсәләр өсөн ауыр, зыянлы булған 456 төр һөнәр исемлеген төҙөгән һәм ҡатын-ҡыҙҙарға был эштәрҙә эшләү рөхсәт ителмәгән. Әммә заманалар үҙгәреп, кәрәк-кәрәкмәгәнгә юл асыусы, йәнәһе, демократияға ышыҡланып, күп нәмәләргә ирек ҡуйылған хәлдә лә әле, әүҙемсе ҡатын-ҡыҙҙар ҡыҫымына ҡарамаҫтан, әлеге 456 төр һөнәр исемлеге һаҡланып ҡала ала. Бары тик 2021 йылда ғына Рәсәй ҡатын-ҡыҙҙары фуралар, үҙ бушатҡыс һәм ауыр йөк машиналары, трактор, комбайндар, баржалар һәм метро поездары һ.б. транспорт төрҙәрен йөрөтөргә хоҡуҡ ала һәм тыйылған һөнәрҙәр иҫәбе 100-гә тороп ҡала.

Бөгөн иһә Рәсәй Хеҙмәт министрлығы илебеҙ ҡатын-ҡыҙҙарына көтөлмәгән "бүләк" эшләргә ҡарар иткән: 2000 йылда төҙөлгән гүзәл енес вәкилдәренең һаулығы һәм бала табыу һәләтенә кире йоғонто яһауы ихтимал булған һәм улар өсөн тыйылған хәүефле эшмәкәрлек төрҙәре исемлеген... тағы ла кәметергә тигән тәҡдим менән сығыш яһай икән, тип яҙа интернет мәғлүмәт сығанаҡтары. Дөрөҫөн әйткәндә, РФ Хеҙмәт кодексындағы "Ҡайһы бер эштәрҙә ҡатын-ҡыҙҙар һаулығын һаҡлауҙы тәьмин итеү" тураһындағы 253-сө статьяны алып ташлау буйынса закон проекты бынан бер нисә йыл элегерәк үк әле Дәүләт Думаһы ҡарауына индерелгән булған. Был мәсьәләнең тап бөгөн, дәүләт кимәлендә бала табыуҙы дәртләндереү саралары осоронда ҡуҙғатылыуы аңлашылып етмәй. Икенсенән, нисек кенә феминистар хәрәкәтенә һылтанма, барыбер шул ауыр һәм хәүефле һөнәрҙе үҙләштереп, эшләп йөрөгән гүзәл заттарҙы йыш осратырға тура килмәй, тимәк, был һөнәрҙәргә күпләп эйә булырға талпыныусылар юҡ, тип әйтерлек. Булған хәлдә лә, уларҙа "ирҙәр һөнәре" романтикаһы бик тиҙ юҡҡа сыға, күрәһең. "Ир-ат эше" тигән төшөнсә юҡҡа ғына йәшәп килмәйҙер.

Ә шулай ҙа Хеҙмәт министрлығын ҡатын-ҡыҙ өсөн тыйылған был ҡарарҙы юҡҡа сығарырға нимә мәжбүр итә һуң? Юғары телмәр менән әйткәндә, тыйылған исемлек, бер яҡтан, ҡатын-ҡыҙҙарҙы һөнәри һәм иҡтисади дискриминациялауға дусар итә, имеш. Икенсенән, шул арҡала был гүзәл заттарға күберәк хеҙмәт хаҡы алып эшләргә ҡамасаулай, тип әйтеүселәр ҙә бар. Әәә, тағы ла өсөнсө сәбәп тә килеп сыҡҡан икән, бына ул: дәүләт тарафынан ҡатын-ҡыҙҙар һаулығын ғына ҡайғыртыу ир-егеттәрҙе ситнәтеү була икән. Бәлки... Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

Министр урынбаҫары Алексей Вовченко белдереүенсә иһә, "алдынғы технологиялар индереү, етештереү эштәрен һәм хеҙмәтте ойоштороуҙы камиллаштырыу шарттары ҡатын-ҡыҙ организмына зыян килтермәйәсәк" икән. Урынбаҫар тағы ла тыйылған исемлектең ҡыҫҡартылыуын "йәмәғәтселек, эш биреүселәр һәм белгестәр" тәҡдимен иҫәпкә алып эшләнеүен дә дәлил итеп килтерә. Эш биреүселәр, тигәндән, хеҙ-

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Халҡыбыҙ бер ниндәй ауырлыҡтарға ҡарамай, рухын төшөрмәй, МХО-ла ҡатнашыусыларға ла һуңғы тинен биреп ярҙам итә, үҙ донъяһын, ғаиләһен дә хәстәрләй. Ә шулай ҙа бөгөн һеҙ ҡышты бесәнле-һуғымлы, һөтлө-майлы ҡаршыларға әҙерме?***

***Фәннүр СОЛТАНҒОЛОВА, хеҙмәт ветераны, Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылы:*** Бөгөн республикабыҙҙың ҡайһы ғына районын, ауылын алма, халыҡ Махсус хәрби операция ваҡиғаларын, уландарыбыҙҙың унда ил хәүефһеҙлеген һаҡлап, фиҙаҡәрлек өлгөләре күрһәтеүен бөтөн йөрәге менән яҡын ҡабул итә, үҙегеҙ әйтмешләй, һуңғы тиндәренә тиклем МХО-ға гуманитар ярҙам фондына бирә. Беҙ МХО башланғандан алып яуҙа йөрөгән уландарға ойоҡбаш һәм бейәләй-бирсәткәләр бәйләп, эске кейем, башҡа кәрәк-яраҡ, аҙыҡ-түлек әҙерләп ебәрәбеҙ. Ошо көндәрҙә генә бер төркөм ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ сәк-сәк бешереп, башҡа төр кеҫтәнәстәр, кәрәк-яраҡ әҙерләп, госпиталгә оҙатҡайныҡ, күп тә үтмәне, шунда яраларынан дауаланып ятыусы яугирҙарҙан рәхмәт хаты алдыҡ : бөтәһе лә тәмле, шифалы булды, айырыуса сәк-сәк оҡшаны, тип яҙғандар. Ә инде хәрби машиналар һәм башҡа объекттарға маскировка селтәрҙәрен үреп ебәреп торабыҙ. Уның ярайһы ҡатмарлы, оҙайлы ғына эш икәнен, бәлки, ҡайһы берәүҙәр белмәйҙер ҙә. Эште тиҙләтеү өсөн ауылыбыҙ уҙаманы Морат Юнысов туҡыманы таҫмаларға ҡырҡыусы станок эшләп бирҙе, рәхмәт яуғыры. Ә беҙҙең селтәр үреүсе ҡыҙҙарыбыҙҙың тилбер бармаҡтарына күҙ эйәрмәй. МХО, бер яҡтан, халыҡты уртаҡ маҡсаттарҙа берләштерҙе, кеше ҡайғыһын уртаҡлашырға, изгелек, мәрхәмәтлек кеүек әхлаҡи ҡиммәттәрҙе баһаларға өйрәтте.

Эйе, илгә хәүеф янаған мәлдәрҙә тыл һәр ваҡыт армияның ышаныслы терәге булған. Бөйөк Ватан һуғышы осорон ғына алып ҡарайыҡ: әсәй-өләсәйҙәребеҙҙең, үҫмер балалар һәм хатта ҡарт-ҡороноң бөтөн ил менән бер ҡатарҙан ҡанлы яу ғәрәсәтен бергәләп еңеп сығыуҙарын онотор-лоҡмо ни! Әле бына беҙҙең быуынға ла төштө бындай һынау. Беҙҙең бәләкәй генә Ишбирҙе ауыл советынан ғына ла 25 ир-егет ҡатнаша унда, шуларҙың яртыһынан күберәге, үкенескә, цинк табуттарҙа ҡайтарылды. Уларҙың ата-әсәләре, ҡатындары, балалары өсөн генә түгел, бөтөн ауыл халҡы өсөн ҙур юғалтыу был.

...Ҡар һыуығы төштө еребеҙгә, ләкин ауылдаштарым унан ҡурҡмай: ҡышты улар, үҙегеҙ әйткәнсә, бесәнле-һуғымлы, итле-майлы-һөтлө ҡаршыларға күптән әҙерҙәр. Быйылғы йәй ямғыр бесән эшләргә форсат бирмәгәйне лә, уның ҡарауы сентябрҙә "һә" тигәнсә мал аҙығы әҙерләп тә алдылар. Эшләгәндәй ҙә булманы, тейеште бесәнселәр. Эйе, Аллаһы Тәғәлә донъя көтөргә тырышып торғандарға көнөн дә, йүнен дә биреп тора, шөкөр. Әле ауылыбыҙға "зәңгәр яғыулыҡ" килеүен дә көтәбеҙ. Шулай итеп, ауылдаштарым үҙ хәстәрҙәрен күреп, ғаиләләрен аҫрарға ла булдыра: кәртә тулы мал-тыуар, ишек алды тулы ҡош-ҡорт. Мал һуйып һатыусылар күп, ләкин ауыл төпкөлдә ятҡанлыҡтан, ҡала баҙарына барыусы әҙ, өҫтәүенә, уның ҡағыҙ йүнәтеү мәшәҡәттәре лә ҡурҡыта. Ситтән, айырыуса Ырымбур, Татарстан яҡтарынан килеп, башмаҡ-быҙау һатып алыусылар ҙа байтаҡ, тик улар нисек тә арзан хаҡҡа эләктереү яғын ҡарай. Бынауындай еңел булмаған осорҙа ауыл халҡының да хәлен аңлау кәрәк ине алыпһатарҙарға, тик улар үҙҙәре ҡуйған хаҡтан бер тингә лә сигенә белмәй. Кешегә ни, аҡса кәрәк, балалар уҡыуға төштө - ҡара тирен һыпырып үҫтергән малын арзанға биреп ебәрергә мәжбүр булалар инде. Үҙебеҙҙең республикала, хатта яҡыныраҡ Баймаҡ, Сибайҙа ла бар бит эшкәртеүсе предприятиелар, дөйөм туҡланыу ойошмалары - ниңә улар килмәй ауылға, аңлашылмай. Ә былай, дөйөм алғанда, ауыл кешеһенең күңеле көр был осор: һуғым осоро ла килеп етте, хеҙмәтеңдең игелеген, төмөн, файҙаһын татыу үҙе ҙур ҡыуаныс түгелме ни? Тик бына айырым шатлыҡ - шатлыҡ түгеллеген дә белә кеше, уландар ҡан ҡойғанда, күңелдәр нисек тыныс булһын? Намаҙым һайын илебеҙгә тиҙерәк именлек килеүен ялбарам...

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Евразия күсмә цивилизациялар музейын төҙөлөшөн киләһе йылда башлауҙары тураһында хәбәр итте. Башҡортостан Башлығы Турахан кәшәнәһе эргәһендә, музей урынында интернет булмауына айырым туҡталды. Башҡортостан Республикаһы дәүләт идаралығының һанлы үҫеш министры вазифаһын башҡарыусы Геннадий Разумикин әйтеүенсә, яҡындағы ауылда кәрәҙле элемтә вышкаһы ҡуйылған. Быйыл уны файҙаланыуға тапшырыу планлаштырыла.

✓Башҡортостанда йыл башынан һыу объекттарында һәләк булыусылар һаны 37 кешегә кәмегән. Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыусы Кирилл Первов хәбәр итеүенсә, 1 ноябрҙән "Йоҡа боҙ" ведомство-ара иҫкәртеү операцияһы башланды. "Был көҙгө-ҡышҡы осорҙа һыу объекттарында граждандарҙың именлеген тәьмин итеү өсөн кәрәк", - тип асыҡлыҡ индерҙе ведомство етәксеһе.

✓БР Башлығы Радий Хәбиров бер төркөм хеҙмәт алдынғыларына дәүләт наградалары тапшырҙы. Фән һәм техника өлкәһендәге дәүләт премияһына "Гуманитар фәндәр" номинацияһында "Зәбих Иҫҡужин: Иҙел ярында Һаҡмар егете" монографияһы өсөн ғалимә, филология фәндәре кандидаты Гөлсәсәк Саламатова лайыҡ булды. Ул премияның бер өлөшөн МХО яугирҙарына ебәрергә ҡарар иткән.

✓Ғафури районы хакимиәтенә яңы башлыҡ тәғәйенләнде. Муниципаль район Советы депутаттары бер тауыштан Башҡортостан урман хужалығы министрының элекке урынбаҫары Венер Вәхитов кандидатураһы өсөн тауыш бирҙе. Венер Фәнир улы Вәхитов 1982 йылдың 2 июлендә Ишембайҙа тыуған. Башҡорт дәүләт университетын, Башҡорт дәүләт аграр университетын тамамлаған.

✓Башҡортостандың мәҙәниәт министры вазифаһын башҡарыусы Әминә Шафиҡова генерал-майор Миңлеғәле Шайморатовтың ҡәберендә булды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының легендар командиры, Рәсәй Геройы 1943 йылда Донбасста һәләк булған. "Генерал-майор Миңлеғәле Шайморатов батырҙарса һәләк булған урынға барҙыҡ. Еңеү хаҡына яугирҙарыбыҙҙың ҡаны түгелгән ерҙә бөтөнләй икенсе хис-тойғолар кисерәһең. Урындағы халыҡ уларҙы хөрмәтләп иҫкә ала, шул көндәрҙәге хәлваҡиғаларҙы быуындан-быуынға һөйләп ҡалдыра", - тип яҙа Шафиҡова үҙенең телеграм-каналында.



мәт баҙары яуҙа йөрөүсе һәм шунда баш һалғандар иҫәбенән бер аҙ бушай биреп тә ҡалғандыр, кем белә...

Икенсенән, ҡатын-ҡыҙ, ни тиһәң дә, эшкә яуаплы ҡарашы, теүәллеге һәм бөхтәлеге менән айырылып тора һәм был эш биреүсегә оҡшай, әлбиттә. Ләкин, әгәр ҙә был 253-сө статья юҡҡа сығарыла ҡалһа, гүзәл заттар ирҙәр менән бер ҡатарҙан ауыр йөктәр күтәрергә, хәүефле һәм зыянлы эштәр башҡарырға тейеш буласаҡ. Ләкин ҡатын-ҡыҙ, әйтеүебеҙсә, буласаҡ һәм ғәмәлдәге әсәләр. Улар ауыр, ҡатмарлы, ҡара эштә йөрөһә, кем бала табыр ҙа, кем уларҙы тәрбиәләр, кем эштән ҡайтҡан ирен ҡайнар аш менән ҡаршылар, ғаилә усағын кем һаҡлар?..

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Халҡыбыҙ бер ниндәй ауырлыҡтарға ҡарамай, рухын төшөрмәй, МХО-ла ҡатнашыусыларға ла һуңғы тинен биреп ярҙам итә, үҙ донъяһын, ғаиләһен дә хәстәрләй. Ә шулай ҙа бөгөн һеҙ ҡышты бесәнле-һуғымлы, һөтлө-майлы ҡаршыларға әҙерме?***

*Зөлфиә МУСИНА, Хәйбулла районы Атингән ауыл мәҙәниәт йорто хеҙмәткәре:*

МХО-ға даими ярҙам итеп, беҙ, район халҡы, "Тыуған тыл - Хәйбулла" тигән девиз менән маҡсатлы программа буйынса эшләйбеҙ. Шуныһы һөҡландыра: ил һаҡлаусы уландарға ярҙам мәсьәләһенә бөтөн ауылдар ҙа берҙәм ҡушылды, был йәһәттән ситтә битараф тороп ҡалған бер генә кеше лә юҡтыр, тип уйлайым. Яугирҙарға ярҙам итеү төркөмөнә райондың ғаилә хеҙмәте бүлеге хеҙмәткәре Филүзә Ишемғолова етәкселек итә. Ул көнө-төнө ошо эш хәстәрлектәре һәм ойоштороу саралары менән булып, ысын мәғәнәһендә фиҙаҡәрлек өлгөһө күрһәтә. Уның быйыл хәрби частан рәхмәт хаты алыуы, шулай уҡ "Тыл - фронтҡа" миҙалы менән наградланыуы беҙҙең, хәйбуллаларҙың да, башҡарған дөйөм эшебеҙгә ҙур баһа булды, тип ғорурлыҡ менән әйтә алабыҙ. Ғөмүмән, беҙ Махсус хәрби операция башланған көндән алып яугирҙарыбыҙға ярҙам башланғысына беренселәрҙән булып ҡушылдыҡ. Әлеге ваҡытта беҙ дронға күренмәй торған махсус материалдан 3 ҡат синтепон менән ҙур одеялдар, маскхалаттар теғәбеҙ, шул уҡ ваҡытта маскировка селтәрҙәр үреүҙән дә туҡтағаныбыҙ юҡ. Бынан тыш, башҡарылған эштәребеҙ ҙә күп: аҡса йыйыу тиһеңме, кәрәк-яраҡ төйнәү, оҙаҡ һаҡлана торған ризыҡтар, айырыуса ҡорот киптереп ебәреүме... Әйткәндәй, балаларҙың атаһы хәрби хәрәкәттәр башланғас та ҡорбан салды, яугирҙар һаулығына һәм уларға еңеллек, илебеҙгә именлек теләп, аят уҡыттыҡ. Итен шул МХО-ла ҡатнашыусыларға ебәрҙек. Беҙҙең ауылдан ғына 15 һалдат китте бит. Үҙебеҙҙең улыбыҙ ҙа тәүге көндән уҡ ил һағына беренселәрҙән булып үҙ теләге менән барып яҙылды. Бында саҡта МЧС-та янғын һүндереү машинаһы йөрөтә ине, армияла ла яғыулыҡ ташыуҙа хеҙмәт итә, 19-сы танк полкына электе. Әле бына сентябрҙә генә офицер званиеһына лайыҡ булды һәм радиоэлектрон көрәш взводына командалыҡ итә, Суворов миҙалы менән наградланды.

Үҙебеҙҙең тормош хәлдәренә килгәндә, Аллаға шөкөр, бер ҙә бирешеп торған юҡ. Иптәшем Наил хәстәрлекле , унған ғаилә башлығы, 5 бала үҫтерәбеҙ. Ауылда йәшәп, мал-тыуарһыҙ булмай инде ул, кәртә тулы мал, һарыҡтар һимертеп һатабыҙ, сөнки ҡорбан салып, аят бағышлатыуҙар күп, уларға еңеллек, ярҙам булһын, тигән теләктәбеҙ. Бөгөн ҡаҙ өмәһе үткәрҙек, 50 баш ҡаҙ һуйып алдыҡ. Һуғымға башмаҡ һимертәбеҙ, ҡар яткас, Алла бирһә, ул эште лә башҡарып ҡуйырбыҙ, тик Хоҙай Тәғәлә һаулыҡ бирһен, илгә именлек килһен - бөтөн теләгебеҙ шул.

**Фирүзә ИШБИРҘИНА яҙып алды.**

## ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# СИТ ТАУЫШТАР ЯРҘАМЫНДА...

**Үткән аҙнала Рәсәйҙең Украинала Махсус хәрби операция алып барыуына 985 көн тулды. Әлеге ваҡытта "Көнбайыш" гәскәр төркөмөнөң командующий урынбаҫары Роман Греков әйтеүенсә, һуғыш барған территорияларҙа ямғырҙар башланды һәм бының хәрби хәрәкәттәрҙе тотҡарлауы бар.**

Ләкин һауа торошо - Рәсәй ғәскәрҙәре әүҙемлегенә ҡамасаулауы ихтимал булған берҙән-бер сәбәп. Әлбиттә, ҡарлы-ямғырлы көйһөҙ көҙгө көндәрҙең ауырлығы ябай яугирҙар иненә төшә. Блиндаждарҙа булһа, ярай ҙа, ә бына тәүге йылдарҙағы кеүек, окоптарҙа өшөп-туңып ултырырға тура килмәнен инде уларға. Ошо айҡанлы үҙебеҙҙең Башҡортостан халҡының арымай-талмай туҡтауһыҙ МХО-ға гуманитар ярҙам оҙатыуҙы дауам итеүҙәрен күреп, тылдағы һәр кемдең һуғышта йөрөгәндәрҙе үҙ балаһылай, атаһылай, ағаһы йә ҡустыһылай яҡын күреүенә, уларҙың йәнен-тәнен йылытыу өсөн, күңелдәрен күтәрмәләү хаҡына ысын мәғәнәһендә көндәлек батырлыҡ һәм берҙәмлек өлгөһө ҡылыуҙарына тағы ла бер хайран ҡалаһың...

Аңлылыҡтар таҫмаһына килгән хәбәрҙәр араһынан шуға ла МХО-ға ҡағылышлыларын иң тәүҙә уҡырға тырышаһың: унда нисек хәлдәр, эштәр алға барамы? Бына, мәҫәлән, 4 ноябрҙә РФ Оборона министрлығынан алынған мәғлүмәт: "ВСУ-ны (Украина Ҡораллы көстәре) тәьмин итеүсе энергетика объекттары һәм нефть эшкәртеү заводы һәм хәрби аэродромдар инфраструктураһы утҡа тотолдо". Шул уҡ ваҡытта Рәсәй көстәре тарафынан ВСУ-ның экипажһыҙ катерҙар етештереү цехтары һәм уларҙы һаҡлау урындары ҡыйратылды, тип хәбәр ителә. Үткән бер тәүлек эсендә Рәсәй һауа һөжүме оборонаһы Америкала эшләп сығарылған 4 HIMARS ракета системаһын һәм 42 пилотһыҙ аппаратты бәреп төшөргән. Ә шулай ҙа, хәбәрҙәргә ҡарағанда, фронтта ғына түгел, тылда ла күберәк әлеге ошо пилотһыҙ шартлатҡыстар - йәнһеҙ дрондарға ҡаршы алышырға тура килә. Улар бит хәҙер хатта Башҡортостанға ла килеп етте! Дөрөҫөрәге, хәрби эксперттар фекеренсә, шартлатҡыс аппараттарҙы Рәсәй территорияһынан ВСУ агенттары ебәрә, әлбиттә. Тик улар, бәхеткә күрә, Өфө предприятиеларына зыян килтерә алманы, сөнки, белгестәр баһалауынса, Башҡортостан яғыулыҡ-энергетика объекттары пилотһыҙҙар һөжүменән ышаныслы һаҡлана.

Халыҡ-ара хәлдәрҙең башҡа өлкәләренә килгәндә, шундай бер мәғлүмәт аптырауға ҡалдырҙы. Территорияһы буйынса Ҡытай Халыҡ Республикаһына ҡараған, әммә бар көсөнә Ҡытай составына инеүҙән баш тартып ҡырталашҡан һәм БМО тарафынан да танылыу ала алмаған бәләкәй генә Тайвань тигән дәүләт-утрау хаҡында ишеткәнегеҙ барҙыр. Бик башлы халыҡ йәшәй, ахырыны, унда, сөнки тап ошо ил ярымүткәргестәр етештереү буйынса донъя лидеры булып таныһан. Чиптар етештереү өсөн "сеймал"ды Тайвань Рәсәйҙән ала. Шуға ҡарамаҫтан, бынан ике йыл элек Тайвань властары Рәсәй менән Белоруссияға чиптар ебәреүҙе тыйғайны, бөгөн килеп улар Рәсәй менән Белоруссияға 77 атамала сығарылыусы станоктар ебәреүҙе лә туктатырға ҡарар итте.

Тағы бер ҙур булмаған, ләкин Европалағы ил - Молдавияла президент һайлауҙары булып үтте. Ил эсендәге тауыштар һөҙөмтәһе буйынса элекке генераль прокурор Александр Стояногло алға сыҡҡан булһа ла, ғәмәлдәге президент Майя Санду ситтә йәшәүсе диаспора иҫәбенә һәм Евросоюз ҡурсалауы арҡаһында үҙ вазифаһын һаҡлап ҡалды. Төртмә теллеләр әйтеүенсә, был үҙ илендә еңелеп, сит тауыштар иҫәбенә президент булған тәүге кандидатура. Уның үткәрган сәйәсәте билдәле: Санду Рәсәйгә ҡаршы эшләүҙе һәм Украинаға ярҙамды дауам итәсәк. Илдәге оппозиция иҫке яңы президенттың Молдавияны Румыния менән берләшеүгә килтереүенән хәүефләнә, сөнки Санду Румыния гражданы ла булып тора. "Киләсәк образы" телеграм-канал белдереүенсә, властарҙың элекке президент файҙаһына күрәләтә закон боҙоуҙарға юл ҡуйыуы ла һайлауҙар һөҙөмтәһен хәл итте. Был да күп нәмә хаҡында һөйләй...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә Ю.М. Лопухин исемендәге Федераль физик-химик медицина ғилми-клиник үҙәге генераль директорының үҫеш буйынса урынбаҫары, Рәсәй Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты, медицина фәндәре докторы Елена Загайнова Евразия ғилми-тикшеренеү үҙәге ғалимдары һәм студенттары менән осрашты. Федераль эксперт Башҡортостан фәнни инфраструктураһына юғары баһа бирҙе.

✓"Башҡортостан" мотоуҡсылар полкы дошман менән агитация эшен дә алып бара. Беҙҙекеләр Украина һалдаттарына, офицерҙарына ҡорал һалырға һәм бирелергә саҡыра. Был хаҡта "Башҡорт батальоны" телеграм-каналы хәбәр итә. Тауыш көсәйткес аша Украина һалдаттарына бына шундай һүҙҙәр яңғырай: "Эвакуация юҡ. Фронтта хәлдәр хәрт. Кешеләр ҡаса, улар үлемдең ҡотолғоһоҙ икәнен һәм Украинаға тамсы ла файҙа килтермәйәсәген аңлай. Бирел йәки мәңгелеккә һыуыҡ ерҙә ятып ҡалырһың. Бирел йәки һине бер генә яҙмыш - үлем көтә".

✓Архангел районында яғыулыҡ ҡойоу станцияны һәм юл яны сервисы объекты төҙөлә. Инвесторы - "Уралнефтепродукт" компанияһы. Инвестиция проектын тормошҡа ашырыу өсөн компанияға майҙаны 3 мең һәм 4 мең квадрат метрлыҡ ике ер участкаһы ҡуртымға бирелә. Башҡортостанда юл яны сервисы әүҙем үҫешә. Һуңғы 4 йылда республикала 794 ошондай объект төҙөлгән, йәмғеһе 1800 юл яны сервисы объекты иҫәпләнә.

✓Ошо көндәрҙә Бөрйән үҙәк район дауаханаһы пациенттарын яңы хирург ҡабул итте. Нигерия гражданы, табип-ординатор Әхмәт Овал Башҡорт дәүләт медицина университетынан Бөрйән районына стажировка үтергә килгән. БДМУ ординаторы Әхмәт Овалдың һәм уның коллегаһы Оеделе Абдулазиздың Бөрйән районында стажировка үтеүе тураһында үҙәк район дауаханаһының медицина бүлеге мөдире вазифаһын башҡарыусы Илнур Иманғолов хәбәр итте.

✓Башҡортостанда "Рекрут" программаһы 31 декабргә тиклем оҙайтылды. Был программа 2024 йылдың 31 октябрендә тамамланырға тейеш ине. Билдәле булыуынса, ДОСААФ тәҡдиме менән башланған программа сиктәрендә граждандарға Рәсәйҙең Оборона министрлығы менән килешеү төҙөргә ярҙам иткән ирекмәндәргә 50 мең һум түләнә. "Рекрут" программаһында ҡатнашыу өсөн 18 йәше тулған ирекмән контракт буйынса хеҙмәт итергә теләгән хәрби менән ДОСААФ бүлексәһенә мөрәжәғәт итергә, документтар тултырырға, һунынан хәрби комиссариатҡа килергә тейеш.

*✓ Баймаҡ районы алғы һыҙыҡҡа 26 ҙур гуманитар ылау, атап әйткәндә, 14 машина (УАЗ, "Нива"), 7 "Урал" мотоциклы, 9 күсмә мунса, запас частар, дронға ҡаршы саралар, буржуйка-мейестәр, йылы кейем һәм башҡа кәрәк-яраҡтар ебәрҙе.*



*ҠЫҪҠАСА*

# ҠАЙҘА ҠАР ТАҘАРТЫЛМАЙ?

**Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте авария-диспетчер хеҙмәттәренең телефон һандары яҙылған уңайлы карточкалар төҙөгән.** Уларҙы телефонда һаҡларға мөмкин. Карточкаларҙа - хеҙмәттәрҙең телефон номерҙары: күп фатирлы йортта инженер коммуникациялары мәсьәләләре буйынса (әгәр уны райондың Торлаҡ хужалығы идаралығы хеҙмәтләндерһә); юлдарҙы, күперҙәрҙе һәм юл үткәргестәрен таҙартыу, тәртиптә тотоу мәсьәләләре буйынса; торлаҡ-коммуналь хужалыҡ мәсьәләләре, шул иҫәптән йылылыҡ биреү буйынса. Шулай уҡ бында һыу, йылылыҡ, ут һәм газ биреүҙе туҡтатыу, йәки кешеләрҙең һаулығына һәм ғүмеренә хәүеф менән янаған осраҡтар, авариялар тураһында хәбәр иткән номерҙар бар. Йылытыу мәсьәләләре буйынса Уфа Теплая сервисында ғариза ҡалдырырға мөмкин. Ҡыш миҙгеле башланыу менән Уфа снежная интерактив картаһы эшләй, унда урамдарҙы, ихаталарҙы ҡарҙан таҙартыуға ғариза ҡалдырырға була.

✓ **Өфөлә 291-се автобуста юл хаҡы үҙгәрә. Ул Шаҡша биҫтәһе, Базилевка, Федоровка, Йылҡыбай ауылдары, "Өфө-Арена" боҙ һарайы маршруты буйынса пассажирҙарҙы хеҙмәтләндерә.** Мэрияның матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 1 ноябрҙән ҡулаҡса, ҡулаҡсаһыҙ һәм "Алға" картаһы буйынса хаҡ түбәндәгесә була: 40 һум - ҡала һәм Шаҡша биҫтәһе буйлап, шулай уҡ Федоровка - Карпов юлында; 50 һум - Шаҡша биҫтәһе - Базилевка, Базилевка - Федоровка; 60 һум - Шаҡша биҫтәһе - "Ромашка" баҡсалары, "Ағиҙел" баҡсалары - Өфө, Базилевка - Жилин, Карпов - Базилевка; 70 һум - Шаҡша биҫтәһе - Йылҡыбай - Өфө, Шаҡша - Федоровка - Өфө, Шаҡша - Карпов - Өфө, Шаҡша - Жилин - Өфө; 80 һум - Шаҡша - Өфө һәм Өфө - Базилевка. Йәмәғәт транспортында юл хаҡының ҡиммәтләнеүе запас частарға, яғыулыҡ-майлау материалдарына, автосервис һәм техник үҙәктәр хеҙмәттәренә, шулай уҡ лизинг түләүҙәренә хаҡтарҙың артыуына бәйле.

✓ **Рәсәй Хөкүмәте "Ғаилә ипотекаһы", "Алыҫ Көнсығыш һәм Арктика ипотекаһы", шулай уҡ "Льготалы ипотека" программалары буйынса процент ставкаһын субсидиялау өсөн резерв фондтан өҫтәмә рәүештә 446,9 миллиард һум йүнәлтә. Был турала бойороҡҡа Хөкүмәт рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйған.** Бүленгән сумманан 142 миллиард һумы "Ғаилә ипотекаһы"н субсидиялау өсөн тәғәйенләнә. Был балалы граждандар өсөн 6 процент ставка менән льготалы ипотека программаһын һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә. Тағы 35,1 миллиард һумы 2 процент ставка менән "Алыҫ Көнсығыш һәм Арктика ипотекаһы" программаһын бойомға ашырыу өсөн ҡаралған. Бынан тыш, 269,8 миллиард һумы "Льготалы ипотека" программаһы сиктәрендә элек бирелгән кредиттар буйынса процент ставкаһын субсидиялау өсөн йүнәлтелә. Өҫтәмә финанслау шул иҫәптән Рәсәй банкының төп ставканы күтәреүенә бәйле, тиелә Министрҙар Кабинеты белдереүендә.

✓ **Баш ҡала аэропортының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Air Arabia авиакомпанияһы ҡышҡы миҙгелдә Өфөнән Шарджаға рейстарҙы арттыра.** Көҙгө каникулдар һәм яңы йыл байрамдары осоронда Airbus A320 авиалайнерҙары аҙнаһына 7 рейс башҡара. Осош көндәре буйынса мәғлүмәтте авиакомпания сайтында асыҡларға мөмкин. Бынан тыш, Air Arabia күп кенә транзит йүнәлештәре тәҡдим итә. Өфөнән, икенсе самолетҡа күсеп ултырып, түбәндәге илдәргә һәм ҡалаларға осорға мөмкин: Азияға - Шри-Ланка, Мальдив; Таиландҡа - Бангкок һәм Пхукет; Малайзияның баш ҡалаһына - Куала-Лумпур; Яҡын Көнсығыш илдәренә - Бахрейн, Катар, Сәғүд Ғәрәбстаны, Һиндостандың 14 ҡалаһы һәм Европаның бер нисә ҡалаһы, мәҫәлән, Афина (Греция), Бергамо (Италия).

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# УЯУЛЫҠ ТАШЛАМАҺЫН!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың Терроризмға ҡаршы комиссия һәм оператив штабы ултырышын үткәрҙе.**

Көн тәртибендә республиканың сәнәғәт объекттарын террористик, шул иҫәптән пилотһыҙ осоу аппараттары һөжүмдәренән һаҡлау мәсьәләһе торҙо. Ултырышта республиканың көс структуралары, министрлыҡтар һәм ведомстволар вәкилдәре, сәнәғәт объекттары етәкселәре ҡатнашты. Төбәк етәксеһе 31 октябрҙә Өфөнөң яғыулыҡ-энергетика комплексы предприятиеларына дошмандың өс пилотһыҙ осоу аппараты һөжүме тураһында хәбәр итте.

"Ҡорбандар һәм емереклектәр юҡ, предприятиелар штат режимында эшләй, - тине Радий Хәбиров. - Оборонаның ҡатнаш системаһын формалаштырыу, күҙәтеү һәм һаҡлау сараларын йәлеп итеү буйынса күрелгән саралар һөҙөмтәле булып сыҡты. Артабан да предприятиеларҙы һәм ойошмаларҙы тотороҡло һәм ышаныслы һаҡлау мөһим. Сәнәғәтебеҙҙе һаҡлау кимәлен күтәреү буйынса өҫтәмә сараларҙы тикшерергә кәрәк".

"Пилотһыҙ осоу аппараттары һөжүм иткән ваҡытта республиканың оператив хеҙмәттәре үҙ бурысын яуаплы башҡарҙы, - тип билдәләне Радий Хәбиров.- "Күп көс һалыуыбыҙ, ошо предприятиеларҙың етәкселәре менән терроризмға ҡаршы комиссия ултырышын үткәреүебеҙ, оҙаҡ әҙерләнеүебеҙ дөрөҫ булды. Пассив һаҡлау системаһын, шулай уҡ асыҡлау, күҙәтеү, баҫтырыу һәм юҡ итеү системаһын үҙ эсенә алған ҡатнаш система булдырҙыҡ. Был эште дауам итербеҙ", - тип билдәләне республика етәксеһе һәм предприятие етәкселәренә мөһим сәнәғәт объекттарын террористик һөжүмдәрҙән һаҡлауҙы ойошторғандары өсөн рәхмәт белдерҙе. "Һеҙҙең бурысығыҙ - бының өсөн тейешле саралар күреү. Республика, һис шикһеҙ, ошо йәһәттән ярҙам күрһәтергә әҙер", - тине Башҡортостан Башлығы.

Ултырышта ҡатнашыусылар шулай уҡ Башҡортостан сәнәғәт предприятиеларының хәүефһеҙлеген арттырыу тәҡдимдәрен тикшерҙе.

# ӘБЙӘЛИЛ, БАЙМАҠТАР...



**Әбйәлил районының Амангилде ауыл биләмәһе халҡы махсус операцияла ҡатнашҡан яҡташтарына әүҙем ярҙам күрһәтә. Былтыр Ҡаҙмаш ауылында яугирҙарҙың үтенесе буйынса күсмә мунсалар төҙөүгә тотонғандар. Төҙөлөштө башлап ебәргән инициатив төркөмгә бөтә ауыл ир-егеттәре ҡушылған.**

Изге эштә Амангилде ауылы биләмәһе башлығы үҙе әүҙем ҡатнаша. "Былтыр алғы һыҙыҡҡа ике күсмә мунса ебәрҙек. Күптән түгел тағы ла берәүһен тамамланыҡ. Ошо арала ауылдаштар дүрт машина гуманитар ярҙам менән МХО зонаһына юлланды. Яугирҙарға күсмә мунса ғына түгел, йылы кейем, дарыуҙар, аҙыҡ-түлек һәм башҡа кәрәк-яраҡтар ебәрҙек. Ауыл халҡы менән 100 мең һумдан ашыу аҡса йыйҙыҡ. Һәр кемгә хеҙмәте, ярҙамы өсөн ҙур рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ", - тип һөйләне Ҡаҙмаш мәктәбе директоры Зариф Атауллин.

Илгә килгән һынауға Ишкилде ауылында йәшәүселәр ҙә битараф түгел. Бында ҡатын-ҡыҙҙар яугирҙарға йөн ойоҡбаштар һәм бейәләйҙәр бәйләй. "Ял көндәрендә ҡатын-ҡыҙҙар менән клубта йыйылабыҙ, өйҙә лә бәйләйбеҙ. Яҡташтарыбыҙға ғына түгел, барлыҡ Махсус операция яугирҙарына ярҙам итәбеҙ. Күптән түгел сифатлы итектәр һәм башҡа кәрәк-яраҡтар һатып алып ебәрҙек", - ти Нурия Усманова.

Башҡортостандың Урал арьяғы халҡы МХО-ла ҡатнашыусыларға айырыуса әүҙем ярҙам күрһәтә. Әйтәйек, Баймаҡ районы алғы һыҙыҡҡа 26 ҙур гуманитар ылау, атап әйткәндә, 14 машина (УАЗ, "Нива"), 7 "Урал" мотоциклы, 9 күсмә мунса, запас частар, дронға ҡаршы саралар, буржуйка-мейестәр, эш ҡоралдары, бысҡылар, тепловизор, йылы кейем һәм башҡа кәрәк-яраҡтар ебәрҙе.

Ошо көндәрҙә Баймаҡ уҙаманы Миңлеғәле Шайморатов исемендәге Башҡортостан батальонының элемтә взводы яугирҙарына яңы "питбайк" ебәргән. Хәрби хәбәрсе Илдар Юлдыбаев белдереүенсә, яҡташыбыҙ үҙенең исемен әйтмәүҙәрен үтенгән. "Пенсионерға 66 йәш. Ул ысын күңелдән яугирҙарға ярҙам итергә, еңеүҙе яҡынайтыуға үҙ өлөшөн индерергә теләй, - тине Илдар. - Бындай мотоциклдар хәрби бурыстарҙы башҡарыу өсөн бик кәрәк. Юлһыҙ урындарҙан мотоцикл елдереп кенә үтеп китә.

**Инсаф ХУЖАБИРГӘНОВ.**

# ИГЛИНДӘ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Иглин районына эш сәфәре барышында Иглин ауылында 1 225 уҡыусыға иҫәпләнгән яңы дөйөм белем биреү мәктәбен асыу тантанаһында ҡатнашты.**

- Иглин районы - тиҙ үҫеүсе муниципалитет. Яңы мәктәптең көтөп алынған объект булыуын яҡшы аңлайбыҙ. Тиҙ арала, йыл ярым эсендә, 18 мең квадрат метр майҙанлы ҙур бина төҙөлдө. Бик матур һәм ҙур биләмәһе, заманса ашханаһы, спорт залдары булған мәктәп үҫеп сыҡты. Иглин районы хакимиәте башлығы әйтеүенсә, ул флагман учреждениеһы буласаҡ. Әммә иң ҡыҙыҡлыһы шул - киләһе уҡыу йылында уҡ бында, мәктәптең мөмкинлектәре менән сағыштырғанда, ике тапҡырға күберәк бала уҡыясаҡ. Был нимә тураһында һөйләй? Миграция ағымдарын иҫәпкә алып, Өфөгә һәм республиканың башҡа ҙур ҡалаларына яҡыныраҡ булған райондарҙа мәктәптәрҙе күберәк төҙөргә кәрәк. Балаларҙың күп булыуы ҡыуандыра, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Радий Хәбиров.

Эш сәфәре барышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Олимп" физкультура-һауыҡтырыу комплексын төҙөү барышы менән танышты. Яңы объект "Демография" милли проектының "Бизнес-спринт (Мин спортты һайлайым)" федераль проекты сиктәрендә төҙөлә. Билдәләнеүенсә, яңы физкультура-һауыҡтырыу комплексы урындағы балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбенең структур бүлексәһе булараҡ эшләйәсәк. Уны төҙөү халыҡты спорттың күмәк төрҙәре менән тәьмин итеүҙе арттырыу, уйын дисциплиналарын һәм көрәш төрҙәрен үҫтереү мөмкинлеген бирә. Өҫтәмә программаларҙы тормошҡа ашырыу маҡсатында тренер-уҡытыусыларҙың 10 штат берәмеге планлаштырыла. Комплексты 2024 йылдың аҙағына тиклем тапшырырға ниәтләйҙәр.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфө мэрияһының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 2024 йылдың 1 ноябренән 31 декабренә тиклем контрактсылар ҡалала торлаҡты 500 мең һум ташлама менән һатып алыу мөмкинлегенә эйә. Бының өсөн акцияла ҡатнашҡан төҙөүсегә мөрәжәғәт итергә һәм контрактты раҫлаған документ, шулай уҡ ташламаға купон килтерергә кәрәк. Уны Өфө райондары хакимиәттәрендә алырға мөмкин. Ярҙам сараһы килешеү 2024 йылдың 1 ноябренән 31 декабренә тиклем Өфө хәрби комиссариаттарының береһендә төҙөлгән осраҡта күрһәтелә.

✓ Өфө районының Бурцево ауылы эргәһендә Куйбышев тимер юлында 22 вагон юлдан төшкән. 74 вагонлы тауар составҡа ташкүмер тейәлгән булған. Һәләк булыусылар һәм яраланыусылар юҡ. Өс электр бағанаһы ҡолаған. Был урында тауар составтары өсөн бер яҡлы ғына юл бар. Шуға күрә пассажирҙар поездарының йөрөүенә авария йоғонто яһамаған. Состав Ҡурған - Һарытау маршруты менән барған. Авария урынында Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының оператив төркөмө эшләй. Аварияның сәбәбе асыҡлана.

✓ Баш ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, "Альянс СКД" һәм "Арбат+" шәхси ташыусылары йәмәғәт транспортының ҡайһы бер маршруттарында юл хаҡын арттыра. Түбәндәге маршруттарҙа ҡулаҡса, ҡулаҡсаһыҙ һәм "Алға" картаһы менән иҫәпләшеү хаҡы 45 һум була: 22 ноябрҙән 218-се "Дим биҫтәһе (Гилев урамы) - 18-се дауахана" маршрутында; 23 ноябрҙән 221-се "Шаҡша биҫтәһе - Колхоз баҙары" һәм 225-се "Шаҡша-2 - Өфө моторҙар эшләү берекмәһе мәҙәниәт һарайы - "Планета" сауҙа-күңел асыу үҙәге" маршруттарында.

✓ Өфөнөң Беренсе май урамын төҙөкләндерергә йыйыналар. Был хаҡта үҙенең телеграм-каналында Өфөнөң Калинин районы хакимиәте башлығы Ғәзизйән Әхмәтйәнов хәбәр итте. "Алдыбыҙға Черниковканың төп урамын райондың визит карточкаһына һәм халыҡты йәлеп итеү урынына әйләндерергә тигән маҡсат ҡуябыҙ", - тип яҙҙы ул район хакимиәтендә үткән оператив кәңәшмәнән һуң. Ғәзизйән Әхмәтйәнов һүҙҙәренсә, бының өсөн районда ойоштороу комитеты төҙөлә. Уға профилле структуралар, шул иҫәптән административ комиссия һәм йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәге индерелә.

✓ Өфө прокуратураһы төрлө элемтә операторҙарының SIM-карталарын һатып алыу буйынса рөхсәтһеҙ хеҙмәттәр тәҡдим иткән 20-нән ашыу сайтты һәм каналдың эшен туҡтатты. Был хаҡта күҙәтеү ведомствоһының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иттеләр. Прокуратура материалдарҙы таратырға ярамай тип таныу һәм сайттарға инеүҙе сикләү тураһында дәғүә менән судҡа мөрәжәғәт итте. Суд прокуратураның талаптарын тулыһынса ҡәнәғәтләндерҙе.

*АФАРИН!*

# ҠУРҠМАЙЫНСА...

## маҡсатыңа ынтыл икән!




**(Башы 1-се биттә).**

"Ҙур тәнәфес" Бөтә Рәсәй конкурсында мин икенсе йыл рәттән ҡатнашам, былтыр финалға үтергә саҡ ҡына мәрәйҙәр етмәй ҡалғайны, быйыл нығыраҡ әҙерләндем һәм бик теләгән еңеүгә өлгәштем! Был конкурс дүрт этаптан тора: тәүгеһендә үҙең тураһында һөйләргә, икенсеһендә конкурстың һынауы - саҡырыуҙарға яуап бирергә кәрәк, шунан ярым финал һәм финал этаптары була. Мин был юлы "Иң мөһиме тураһында һөйлә" тигән саҡырыуға яуап бирҙем һәм партнерҙар биргән темаға - "Балалар өсөн хәүефһеҙ интернет селтәре" төҙөнөм. Конкурс тағы ла "Киләсәкте төҙө", "Рәсәйҙе өйрән", "Тәбиғәтте һаҡла" кеүек 12 тема тәҡдим итә.

Бөгөнгө көндә балалар өсөн генә эшләнгән, уларҙың хәүефһеҙлеген тәьмин иткән социаль селтәр юҡ. Шуға мин үҙем күҙ алдыма килтергәнсә шул ҡушымтаны төҙөнөм. Унда бөтә донъя балалары үҙ идеялары менән бүлешә, аралаша, ҡыҙыҡһыныуҙары буйынса берләшә, шулай уҡ дәрестәр теҙмәһе һәм көндәлеге лә, белем алыу мөмкинлеге лә шунда уҡ буласаҡ, ғөмүмән, файҙалы контент тупланасаҡ, тип фараз итеп, проектымды күңел биреп эшләнем.

Һәр хәлдә, баһалама комиссияһы бына ошо эшемде юғары баһаланы һәм мин ярым финалға үттем - уны Пермь ҡалаһында ойоштorҙолар. Унда командаларға бүленеп, ойоштороусылар тәҡдим иткән төрлө темалар буйынса проекттар эшләнек, мәсьәләләр систек. Бында командала эшләй белеү, альтруизм, һөҙөмтәгә ирешергә теләк кеүек сифаттарыбыҙ баһаланды.

Ошо этаптарҙа туплаған мәрәйҙәр ҡушылып, финалға үтеүселәр билдәләнде һәм беҙҙе "Артек" халыҡ-ара балалар үҙәгенә йыйҙылар, бында ла командаларҙа кейстар буйынса эшләнек, һәр кемебеҙҙе когнитив һығылмалыҡ һәм һөҙөмтәгә йүнәлешлек сифаттары буйынса баһаланылар. 24-28 октябрь көндәрендә үтте конкурстың финалы, уның сиктәрендә төрлө эскперттар, билдәле кешеләр менән осрашыуҙар, фәһемле лекциялар ойошторолдо, үҙ-ара танышыуға ҡоролған уйындарҙа ҡатнаштыҡ. "Ҙур тәнәфес"тең беренсе этабында 3,5 миллион бала ҡатнашҡан тиҙәр, 11-се класс уҡыусылары араһынан ни бары 150 кеше генә финалға үттек һәм мин еңеүселәр исемлегенә инә алдым. Бик тулҡынландырғыс минуттар кисерҙем.

**➔ Киләсәккә ниндәй хыял-теләктәр менән йәшәйһең?**

- Әле сығарылыш класында уҡығас, бар уйым Берҙәм дәүләт имтихандарын уңышлы тапшырыуҙа. Имтихандарҙы профилле математика һәм профилле информатика буйынса тапшырырға йыйынам, Өфө фән һәм технологиялар университетының программистар әҙерләүсе факультетын һайларға ниәт иткәнмен. Был бөгөн йәмғиәттә бик кәрәкле һөнәрҙәрҙең береһе генә түгел, киләсәктә башҡорт телен үҫтереүгә, башҡорт балалары өсөн файҙалы, мөһим проекттарҙы бойомға ашырыу йәһәтенән дә бик көнүҙәк заман һөнәрҙәренең береһе. Интернет селтәрендә башҡорт телендә, башҡорт халҡы тураһында һөйләгән контент әлегә етерлек түгел - мин был хаҡта "Ҙур тәнәфес" конкурсының беренсе һайлап алыу этабында иншамда ла яҙғайным. Башҡорт телендә дөрөҫ яҙылған, дөрөҫ мәғлүмәт тупланған ышаныслы сығанаҡтар, балаларға уйын ҡушымталары кеүек заманса программалар эшләргә кәрәк.

Ә бына яулаған бүләк-аҡсаны нимәгә тотонорға тигәндә, йәй буйы шул турала уйландым, әммә әлегә аныҡ ҡына фекергә килмәнем. Шулай ҙа ул аҡсаны тиҙ генә сарыф итеп бөткөм килмәй, уны берәй килем килтерә торған эшкә йүнәлтергә кәрәк, тип уйлайым.

**➔ "Ҙур тәнәфестә" ҡатнашыуҙың һинең өсөн төп фәһеме ниндәй булды?**

- Был конкурста быйыл ғына ҡатнаша ала инем, һуңғы мөмкинлек менән файҙаланып ҡалдым. Шуға мотаҡ еңергә тейешмен, тигән маҡсат ҡуйғайным алдыма һәм шуны аңланым: ҡуйған маҡсаттарыңа бер ниҙән дә ҡурҡмай ынтылһаң, үҙ-үҙеңә ышанһаң - барыһы ла килеп сыға икән. Башҡаларға үҙеңдең көсһөҙлөгөңдө күрһәтмәҫкә, заман саҡырыуҙарына асыҡ һәм әҙер булырға кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ҙур тәнәфес" Бөтә Рәсәй конкурсында 1-сенән алып 10-сы класҡа тиклемге уҡыусылар һәм урта һөнәри уҡыу йорттарының 1-2-се курс студенттары ҡатнаша ала. Башҡортостандан 50 уҡыусы конкурстың финалына үтеп, "Артек"та ял итеп ҡайтты һәм араларында лауреаттар ҙа бар. Бына шундай алдынғы ҡарашлы, аҡыллы, илһөйәр һәм алсаҡ балаларыбыҙға һәм уларға белем тауҙарына үрләргә ярҙам иткән уҡытыусыларына киләсәктә тағы ла яңы үрҙәр теләйбеҙ. "Беҙ донъяны үҙгәртәбеҙ", тигән девиздары бар икән, тик яҡшылыҡҡа, яҡтылыҡҡа әйҙәгән лидерҙар булып буй еткерһен киләсәгебеҙ!**

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

*"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ*

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## АБДРАХМАНОВ ИЛДУС БАРЫЙ УЛЫ

И.Б. Абдрахманов - химия өлкәһендә танылыу алған билдәле башҡорт ғалимы. Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы академигы. Ул 1942 йылдың 2 ғинуарында Башҡорт АССР-ның Учалы районы Ҡотой ауылында тыуған. Уның атаһы - билдәле дәүләт һәм партия эшмәкәре Барый Абдрахман улы Абдрахманов, улы донъяға килгәндә Бөйөк Ватан һуғышында немец фашистарына ҡаршы танк ғәскәрендә яуҙарҙа йөрөй. Һуғыштан һуң, КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты ҡарамағындағы партия мәктәбен тамамлаған атаһын тәүҙә Салауат районына, һуңынан Стәрлебаш районына КПСС райкомдарының беренсе секретары вазифаһына эшкә ебәрәләр.

Илдус Барый улы мәктәп йылдарынан уҡ Башҡортостан тормошо менән яҡындан танышып үҫә, мәктәпте уңышлы тамамлай. 1959 - 1964 йылдарҙа Октябрҙең 40 йыллығы исемендәге Башҡорт дәүләт университетының химия факультетында уҡый. 1965 - 1968 йылдарҙа - аспирант. Юғары уҡыу йортон тамамлағас, фән юлын һайлай. Шул уҡ ваҡытта бала сағынан хисле малай инде ғалим булып киткәс тә шиғриәт менән мауыға, әҙәби ижад менән дә шөғөлләнергә ваҡыт таба. Уның бер нисә шиғри йыйынтығы донъя күргән.

1968 - 1972 йылдарҙа - Башҡорт дәүләт университетының органик химия кафедраһында ассистент, өлкән уҡытыусы вазифаларында эшләй. 1972 - 2003 йылдарҙа - Башҡорт дәүләт аграр университетының дөйөм химия кафедраһы мөдире. 1984 - 1989 йылдарҙа - Башҡорт дәүләт аграр университетының уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса проректоры.

1989 - 1993 йылдарҙа - Башҡорт дәүләт аграр университетының фәнни эштәр буйынса проректоры. 1993 - 2003 йылдарҙа - Органик химия институтында (РФА-ның Өфө ғилми үҙәге) фәнни эштәр буйынса директор урынбаҫары, нуклеозидтар синтезы лабораторияһы мөдире. 2003 йылдан хәҙергә тиклем - фармакофор ысулдары лабораторияһының баш фәнни хеҙмәткәре.

Химик-органик, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр Академияһы академигы, химик фәндәр докторы, профессор, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре.

2003 - 2013 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһы Фәндәр Академияһының Химик технология фәндәре бүлегенең академик-секретары. Фәнни эшмәкәрлеге Кляйзен ысулы буйынса ароматик аминдарҙың яңыса төркөмләнеүен комплекслы өйрәнеүгә һәм уның нигеҙендә фунгицид һәм гербицид активлыҡҡа эйә төрлө гетероцикликтарҙы, үҫемлектәрҙең үҫешен тиҙләтеүселәрҙе, антиоксиданттарҙы етештереүгә, коррозия ингибиторҙары алыуҙың яңы препаратив ысулдарын уйлап табыуға бәйле. 250 нән ашыу фәнни хеҙмәт һәм 35 уйлап табыу авторы. 1971 йылда кандидатлыҡ диссертацияһы, 1989 йылда докторлыҡ диссертацияһын яҡлаған. Башҡортостан Республикаһы Фәндәр Академияһының Президиум ағзаһы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре (1990). 20 фән кандидаты һәм 2 фән докторы әҙерләгән.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Мәтрүшкә

❖ Холецистит - үт ҡыуығының шешеүенән ҡара көҙҙә һәм ҡыш башында үт ҡыуыусы үләндәр эсергә кәңәш ителә. Дауаны мәтрүшкә, шифалы шалфей, мелисса, күгүлән (спорыш), һары мәтрүшкә, ваҡланған гөлйемештән әҙерләйҙәр. Әҙерләмәнең 30 грамына 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 2-3 сәғәт төнәтергә һәм ашарҙан алда 1/2 - 3/4 стаканына 1 ҡалаҡ бал ҡушып, йылы көйөнсә эсергә.

❖ Ангинанан 2 балғалаҡ ваҡланған мәтрүшкәгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 20 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм шуның менән тамаҡты мөмкин тиклем йышыраҡ сайҡарға.

❖ Тынысһыҙлыҡтан мәтрүшкә үләнен марля муҡсаһына төрөргә һәм һыу шуның аша ағырлыҡ итеп, ванналағы кранға элергә. 37 градустан да эҫе булмаған һыу йыйҙырып, 10 минут ванна инергә.

❖ Баш ауырыһа, 2 балғалаҡ ваҡланған мәтрүшкә үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Туҡыма киҫәген төнәтмәлә сылатып, маңлайға һалырға.

❖ Тире ҡысыһа, холангит, холецистит ауырыуҙарынан 50 грамм мәтрүшкәгә 10 литр ҡайнар һыу ҡойоп, бүлмә температураһына тиклем һыуытырға һәм һөҙөргә. Шул һыуға аяҡ-ҡулды тығып ултырырға, сайынырға.

❖ Ҡаталаҡ тотҡанда 3 ҡалаҡ ваҡланған мәтрүшкәгә 0,5 литр үҫемлек майы ҡойоп, 8 сәғәт төнәтергә. Ашарҙан алда 5 тамсы май эсергә.

❖ Аналыҡтан ҡан килгәндә мәтрүшкә сәйе яһап, көнөнә 3 тапҡыр эҫе генә көйөнсә 1-әр стакан эсергә.

❖ Метеоризмдан 2 балғалаҡ мәтрүшкә үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә һәм йылы төнәтмәне ашарҙан алда эсергә.

❖ Аяҡтар талғанда, шешенгәндә мәтрүшкә бешерелгән һыуға тығып ултырып ҡарағыҙ. Бының өсөн 2 ҡалаҡ мәтрүшкәгә ҡайнар һыу ҡойоп, 40 минут төнәтергә һәм шуны бүлмә температураһындағы һыуға өҫтәп, аяҡтарҙа еңеллек тойғансы тығып ултырырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Сыбар көйөлдө
(Авдотка)



Көйөлдәләр төркөмөнә ҡараған ҡош. Күгәрсендән ҙурыраҡ. Күҙәһенең өҫкө яғы сыбар һары. Ҡанатында ҡара һәм аҡ һыҙаттары бар. Күҙҙәре ҙур, һары төҫтә. Ата сыбар көйөлдөнөң ҡанаты инә ҡоштоҡона ҡарағанда сағыуыраҡ. Йәш ҡоштарҙың төҫө һарғылт.

"Иррхи" йәки "буррхи", хәүеф тыуғанда "улии", "курлии", "улии" тип ҡысҡыра. Осҡанда тауышһыҙ оса.

Даланы ярата. Башҡортостандың Ырымбур менән сиктәш райондарында осрай. Африка, Аравия ярымутрауында ҡышлай. Сыбар көйөлдө Рәсәйҙең Ҡыҙыл китабына индерелгән.

## Тулес



Аяҡтары ҡыҫҡа, тупаҡ суҡышлы ваҡ һәм уртаса ҙурлыҡтағы ҡоштар төркөмө сәпсәүҙәр һымаҡтарға Башҡортостанда 11 төр инә. Тулес шуларҙың береһе. Барҡылдаҡтан бәләкәйерәк, күгәрсендән ҙурыраҡ. Муйыны, муйынының, күҙәһенең аҫкы яғы алъяпҡыс таҡҡан кеүек ҡап-ҡара. Өҫкө яғы сыбар, маңлайы, ҡабырғаһы - аҡ. Инә ҡоштоң алъяпҡысы йә юҡ, булһа ла ата ҡоштоҡо кеүек ялтырауыҡ ҡара түгел. Шулай уҡ башында ла аҡ тап юҡ. Аяҡтары ҡара йә көл төҫөндә. Йәш ҡоштарҙың муйыны, түше сыбар, ҡорһағы аҡ, күҙәһенең өҫкө яғы ҡыҙғылт. Сәпсәүҙән алтынһыу-һары ҡауырһындары юҡлығы менән айырылып тора.

Тауышы матур, "тюлиии", "тивлиии", "тиули" тип флейтаға тиң һыҙғырыуы осҡанында ишетелә.

Евразия, Төньяҡ Америка тундраларында йәшәй. Европала Атлантика ярҙарында, Африкала ҡышлай.

Башҡортостанда осоп китеп барышлай туҡтап китә. 1897, 1901 йылда ғалимдар уны Асылыкүлдә осрата. Шулай уҡ Кама йылғаһында, Ҡарағайлы күлендә үҙебеҙгә тап итергә тура килде.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

АЛДАЙҘАР!

# МИН ДӘ АЛДАНА ЯҘҘЫМ...



**Кесаҙна көндө телеграм-каналдағы аккаунтынан Мәскәүҙәге бер ҙур вазифалы танышым, Рим Рәмил улы тип алайыҡ, сәләм бирҙе. Сәләменә "Шөкөр" тип яуапланым да, башҡаса был каналға инмәнем.**

Икенсе көнөнә был танышым "Һеҙ минең смс-ты уҡынығыҙмы ул?" тигән сәләм ебәрҙе. Ул кисәгеһен тағы "Һөйләшеп алырға ине", тип яҙып ҡуйған булған икән. "Мин был каналға бик инмәйем шул, шуға һеҙҙең хәбәрҙе күрмәгәнмен", тип яуап бирҙем.

Танышым артабан яҙа: "Ошо көндәрҙә шәхси йомош менән Мәскәүҙәге Федераль именлек хеҙмәтендә (ФСБ) булдым. Беҙҙең Башҡортостандағы йәмәғәт ойошмалары ағзаларына, шулай уҡ һеҙгә лә һорауҙары бар. Саҡыртып һөйләшәсәктәр, тинеләр. Зинһар, етди ҡарағыҙ был хәлгә. Ошо көндәрҙә һеҙгә шылтыратырҙар".

Тағы ниҙәрҙер яҙыштыҡ. Мин - башҡортса, танышым русса яҙа. Ул саҡта гел башҡортса аралашҡан танышымдың русса смс-ына иғтибар ҙа итмәгәнмен. "Телефон аша һөйләшмәйек, яҙышырбыҙ", тигән һүҙе булғас, шылтыратырға уйламаным да хатта...

Шулай итеп, шәмбе көндө мин руль артында ауылға китеп барам. Һәр ваҡыттағыса, сит-ят номерҙарҙан шылтыратыусыларға яуап бирмәйем. Ауылға ҡайтып етеп, шылтыратыуҙарҙы ҡарап ултырғанда ғына иғтибар итә ҡуйҙым: телеграм-каналдан Максим Холод тигән кеше бик күп тапҡырҙар шылтыратҡан. Исем-шәрифе алдында Федераль именлек хеҙмәтенең ҡып-ҡыҙыл гербы ла тора.

Ул арала булманы, был номерҙан тағы шылтыраталар. Мин телефонды ала һалам. Ир-егет тауышы.

- Һеҙгә Мәскәүҙән Федераль именлек хеҙмәтенән шылтыраталар. Һеҙгә Рим Рәмил улы (баяғы танышымдың исемен әйтә) минең шылтыратыу тураһында әйткәйнеме?

- Эйе, смс ебәргәйне. Ниҙәр булып китте?

- Бына Рим Рәмил улы беҙгә мөрәжәғәт итте. Украинаның махсус хеҙмәттәре ошондай юғары вазифалы кешеләрҙе, үҙҙәренең яғына ауҙарырға теләп, көнтөн эҙәрлекләйҙәр, Рим Рәмил улы тураһында ла төрлө уйҙырмалар тараталар. Быны шуға ла беҙ унын әйләнә-тирәһендәге, ул аралашҡан кешеләрҙе, йәмәғәт ойошмалары ағзаларын тикшерәбеҙ. Һеҙ Рим Рәмил улы менән ниндәй мөнәсәбәттә? Уны кем эҙәрлекләргә мөмкин тип уйлайһығыҙ?

- Һәйбәт мөнәсәбәттә. Ғөмүмән, уны эҙәрлекләүселәрҙе беҙҙең башҡорт йәмәғәтселеге араһынан эҙләү дөрөҫ түгелдер ул. Беҙҙең халыҡ араһында Украина менән хеҙмәттәшлек итеүселәр булыуы мөмкин түгел! Унда беҙҙең балалар үлә...

- Уныһы шулай. Ләкин беҙ тикшерергә, асыҡларға тейеш. Унан һуң, һеҙҙең үҙегеҙгә лә беҙҙең һорауҙар бар. Һеҙҙең счетығыҙҙан Украина милләтсеһе Богдановҡа аҡса күсерелгән, тигән мәғлүмәт бар беҙҙә.

Мин ҡысҡырып уҡ ебәрәм:

- Нимәәә?

- Эйе, бына документтар минең алдымда ята. Уларҙы һеҙҙең үҙегеҙгә ебәрермен. Танышып сығығыҙ. Һеҙ ундай кешене беләһегеҙме?

- Белмәйем, әлбиттә! Бер кемгә лә бер ниндәй ҙә аҡса ла күсермәнем! - тинем ҡәтғи итеп. - Бына һеҙ аңлатығыҙ әле, кешенең счетына инеп, нисек аҡса күсереп була һуң ул?

- Быны банк хеҙмәткәрҙәре эшләй ала. Бына әле беҙ банктарҙағы Украина милләтселәре менән бәйләнештә булған кешеләрҙе асыҡлайбыҙ. Һеҙҙең счет буйынса ла тикшеренеү бара. Беҙ ул кешеләрҙе тотасаҡбыҙ.

Мин асыуымдан ни эшләргә белмәй, мутлашыусыларҙы әрләйем. Йәнәһе, ниңә улар беҙҙең һымаҡ бюджетниктарҙы, пенсионерҙарҙы талай? Федераль именлек хеҙмәте хеҙмәткәре нимәләрҙер аңлата. Һәм төп һорауға күсә.

- Ә һеҙ ниндәй банктар менән файҙаланаһығыҙ?

- Эш хаҡын Һаҡлыҡ банкы, пенсияны Уралсиб аша алам.

- Эйе, был банктарҙа ла Украинаға эшләүсе хеҙмәткәрҙәр булыуы ихтимал. Тикшерәбеҙ, эҙҙәренә төшөргә тейешбеҙ.

- Банктар беҙҙең һымаҡтарҙың нимәһен таларға тейеш һуң инде! Беҙ эш хаҡынан эш хаҡына йәшәгән бюджет хеҙмәткәрҙәре. Эш хаҡы алабыҙ ҙа, йәшәү ихтыяждарына тотоноп бөтөп, икенсе эш хаҡын көтәбеҙ...

- Ә бына Уралсибтағы счетығыҙҙа хәҙер һеҙҙең 2 миллион һум аҡса ята.

- Нимәәәә?- тип тағы ҡысҡырып ебәрәм.

- Ул һеҙҙең аҡсағыҙ түгелме? Уны ла бына Украинаға күсерергә йыйыналар. Беҙгә тиҙ генә был счетҡа арест һалырға кәрәк. Ул 2 миллион һум аҡса эсендә һеҙҙеке нисә һум?

- 300 мең самаһы барҙыр...

- Һеҙҙең ошо 300 мең һум аҡсаны ҡалдырып, ҡалғанына арест һалабыҙ. Был турала һеҙгә Өфөләге Федераль именлек хеҙмәтенән аңлатырҙар, шылтыратырҙар... - шулай тине Максим Холод атлы егет һәм һүҙен "Честь имею!" тип тамамланы...

Мин ауылда бер-ике сәғәт булдым да, Өфөгә юлға сыҡтым. Стәрлегә етер алдынан минә тағы ҡыҙыл гербле Федераль именлек хеҙмәтенән Роман Чернов шылтырата. Быныһы видеобәйләнешкә сыҡты. Папкалар өйөлөп ятҡан ҙур өҫтәл артында ултырған йәш кешенең артында ҙур ҡыҙыл герб һүрәте эленгән. Роман мине лә видеоны тоҡандырырға саҡырҙы, беҙҙең һөйләшеү яҙыласаҡ, тип иҫкәртте. Быныһы оҙон-оҙаҡ һөйләшеп торманы, һүҙен ҡыҫҡа тотто.

- Максим әйткәндәр инде. Һеҙгә тиҙ генә, бөгөн уҡ, Уралсибтағы аҡсағыҙҙы алырға кәрәк.

- Мин юлда. Банк ябылғансы, Өфөгә ҡайтып етеп өлгөрмәйем, - тим.

- Әле һеҙ ниндәй урында?

- Стәрлетамаҡҡа инәм.

- Стәрлетамаҡтағы Уралсиб Совет урамында урынлашҡан. Хәҙер һеҙ шунда барығыҙ.

- Мин Стәрлетамаҡта бөтөнләй йөрөй белмәйем.

- Навигаторығыҙҙы тоҡандырығыҙ.

- Навигатор менән ҡулланмайым. Мин өлкән кеше бит инде.

- Улайһа, мин һеҙҙе үҙем алып барам. Әйҙәгеҙ. - Ул телефон аша урамдарҙы атай, мин ул әйткән юлдан барам, боролам, тағы боролам. Үҙем һөйләшеүҙе дауам итәм:

- Беҙ бит өлгөрмәйбеҙ, банктың ябылыуына ярты сәғәт кенә ваҡыт ҡалды.

- Бер минут ҡалһа ла, улар һеҙҙе хеҙмәтләндерергә тейеш. Тик унда бер кемгә бер нәмә лә аңлатмағыҙ. Аҙаҡ һеҙҙең аҡсаны хәүефһеҙ иҫәпкә һалырбыҙ.

- Ә мин уны башҡаса банкҡа һалмайым...

- Һалмаһағыҙ, ул талау булып иҫәпләнәсәк.

- Бәй, нисек талау булып иҫәпләнә ул? Минең аҡсалар ҙа һаба улар!

Шул саҡ күңелдә ниндәйҙер шик барлыҡҡа килгәндәй була һәм мин:

- Ҡара әле, Роман, һеҙ мутлашыусылар һымаҡ ҡыланаһығыҙ, банктан аҡсаны алыуҙы тиҙләтәһегеҙ. Һеҙ мутлашыусы түгелме?

- Һеҙ мине бик ныҡ мыҫҡыл иттегеҙ, - тип үпкәләүен белдерә был. Ә мин үҙемдә Федераль именлек хеҙмәте кешеһен мыҫҡыллап ултырам һымаҡ итеп тойоп, унан ғәфү үтенәм...

Шулай итеп, банк ябылыуға 10 минут ҡалғанда мин Уралсиб банкы алдына барып туҡтайым. Роман тағы ла берәү менән дә һөйләшмәҫкә, аралашмаҫҡа ҡушып, һуңыраҡ бәйләнешкә сығырбыҙ тип, трубканы һалып ҡуя. Ул мәлгә мин банкҡа инмәҫкә, аҡсаны алмаҫҡа, ә был егеттәргә "Өлгөрмәнем" тип әйтергә ниәтләгәйнем инде. Шул саҡ ҡылт итеп башыма банкта эшләгән ейәнсәремә шылтыратырға тигән уй килде. Минең хәбәрҙе ишеткән ейәнсәрем ҡысҡырып уҡ ебәрҙе хатта:

- Олатай, былар мутлашыусылар бит! Кисекмәҫтән машинаңды бор ҙа, юлыңды дауам ит!

- Һуң улар Федераль именлек хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре бит! Улар хаҡында Рим Рәмил улы иҫкәртте бит!

- Ә һин Рим Рәмил улына шылтыраттыңмы? Шылтырат тиҙ генә!

Үҙем машинамды Өфө яғына борам, үҙем Рим Рәмил улының телефон номерҙарын йыям. Ул яуап бирмәй. Ике ауыҙ һүҙ менән хәлде аңлатып, смс ебәрәм. Шул арала теге Федераль именлек хеҙмәте егеттәре алмашлап, туҡтауһыҙ минең телефонды ҡыҙарта. Мин телефонды алмайым. Һүндереп тә ҡуймайым. Рим Рәмил улынан шылтыратыу көтәм. Телефон шылтыратыуы аҫтында ярты сәғәттәй юл үткәс, ниһайәт, Рим Рәмил улынан шылтыратыу.

- Сабир ағай, һин дә ҡаптыңмы ни мутлашыусылар ҡулына? Ялған аккаунттан минең исемдән ебәрелгән смстарға күптәр эләгә яҙҙы. Ярай әле улар ваҡытында миңә шылтыратты? Аҡсағыҙҙы ебәреп өлгөрмәнегеҙме?

- Аллаға шөкөр, юҡ!

- Уларҙың телефондарын тиҙ генә юйып ташлағыҙ. Бәйләнешкә инмәгеҙ!..

...Бына шундай хәл булды минең менән дә. Шул көндө, улар башлыса шәмбе, йәкшәмбе көндәрендә әүҙемләшәләр икән, Башҡортостан кешеләре 29 миллион аҡсаһын мутлашыусыларға күсергән, тигән мәғлүмәт булды. Йәнәһе, Федераль именлек хеҙмәтенән, йә Эске эштәр министрлығынан шылтыраталар, һинең счетың ярҙамында кредит алалар, йә һинең счетың ярҙамында Украинаға аҡса күсерәләр, тигәнерк мәғлүмәт әйтеп, кешене бик тиҙ албырғаталар. Был мутлашыусыларҙың бик оҫта алдаҡсылар, талантлы арбауселар икәнен бына шулай үҙемдең миҫалымда белдем. Алданыуы бик тиҙ икәнен хәҙер беләм. Шуға ла аныҡлап яҙҙым. Алданмағыҙ!

**Сабир ХӘКИМЙӘНОВ.**

✔ **Үҙебеҙҙең Өфөлә лә Башҡорт урамы бар. Ул Алексеевка ҡасабаһында урынлашҡан һәм Әкиәт урамынан алып Тоғролоҡ урамына тиклем һуҙыла. Шулай уҡ Алексеевкала Башҡорт тыҡрығы барлығын да онотorға ярамай.**



ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Граф В.А. Перовский**

**(1833-1842 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған).**

Йәмәғәт ерҙәрен һөрөп эшкәртеү тәүҙә удел крәҫтиәндәре ауылдарында индерелә һәм, һис шикһеҙ, унан алынып, Ырымбур казактарына күсерелә. Удел имениеларында ашлыҡты нисек итеп һәм ниндәй күләмдә сәскәндәр, билдәһеҙ; быны индереү өсөн ҡаралған ҡағиҙәләр баҫылмаған; удел ведомствоһы һәр яҡтан өлгөлө тип һаналғас, башҡорттарҙы уның идаралығына буйһондороу тәҡдим ителә. Генерал Перовскийҙың энеһе, Лев Алексеевич, һарай һәм уделдар министрының иптәше (товарищ) вазифаһында хеҙмәт итә, тейешле күрһәтмәләр унан алынған булыуы ихтимал.

Бынан Ырымбур хәрби губернаторының яңыса эш тәртиптәренең ҡайһы береһен казактарға ҡарата ҡулланырға теләүе хаҡында һығымта эшләргә була, һәм ул ер һөрөп эшкәртеүҙең казактар өсөн һис шикһеҙ файҙалы булыуына ныҡ ышана.

Проектты капитан Агапьев төҙөй һәм ул батша ғали йәнәптәре тарафынан хуплана; проектҡа ярашлы, йыл һайын һәр казаҡҡа берәр бот иген сәсеү һәм ошоға ҡағылған барса эштәрҙе - ер һөрөү, сәсеү, урыу һәм һәм ашлыҡ һуғыуҙы казактар башҡарырға тейеш була. Урылған ашлыҡ билдәле бер күләмдә йот килгән йылдарҙа казактарҙың запасы булһын өсөн алып ҡалынған, ә ҡалған өлөшө ғәскәрҙе ашатыу өсөн билдәле бер даими хаҡҡа, ботона 25 йә иһә 26 тингә ҡаҙна провиант магазиндарына ебәрелергә тейеш була.

Йыйылған аҡса билдәле бер процентларҙа запас аҙыҡ-түлек капиталына, урындарҙа эш барышын күҙәтеүселәргә һәм губернатор канцелярияһы ҡарамағындағы, әммә уның дөйөм составына индерелмәгән ер эшкәртеү буйынса айырым үҙәк идаралыҡ хеҙмәткәрҙәренә бүленә. Был бүлек етәкселәрен ышаныслы тип иҫәпләнгән кешеләрҙән хәрби губернатор үҙе тәғәйенләй; ҡалған хеҙмәткәрҙәр казак урядниктары писарҙарынан тора. Ҡуйылған маҡсаттан - йот йылдарҙа казак халҡын аҙыҡ менән тәьмин итеүҙән башҡа, ул ваҡытта булмаған тиерлек, әммә ғәскәрҙе үҙгәртеп ҡороу өсөн кәрәкле ғәскәри казак капиталын ҙурайтыу күҙаллана.

Ашлыҡты ҡырғыҙҙарға түбәнерәк хаҡҡа һатырға уйлайҙар: уларҙың үҙҙәрендәге ашлыҡ сәсеүгә ҡамасаулыҡ итергә теләйҙәр, сөнки был яҡын киләсәктә казактарҙың ер эшкәртеүе өсөн һәм сәйәси яҡтан да хәүефле була; ашлыҡ сәсеүгә тотонған ҡырғыҙҙар, рустарҙан бойондороҡһоҙ булған халәттә, уларға диндәш Хива һәм Бохара менән тығыҙыраҡ бәйләнешкә инерҙәр ине.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

БЕЛӘ ИНЕГЕҘМЕ?

# ЭФИОПИЯЛА - ӨФӨ ҠАЛАҺЫ...

## Иранда - Салауат ауылы

**Урам исемдәренең төрлөлөгөнә иҫ китерлек. Ниндәйҙер ваҡиғаға бәйле булғаны ла, билдәле кеше исемен йөрөткәне лә һанап бөткөһөҙ. Шулай уҡ төрлө илдәрҙә башҡа төбәктәрҙең йәки ҡалаларҙың исемен үҙ иткәндәре лә йыш осрай. Ундайҙар исемлегенә Башҡорт атамалы урамдарҙы, тыҡрыҡтарҙы ла индереп була.**




Бындай исемдә йөрөткән урамды эҙләп алыҫ йөрөйһә түгел. Үҙебеҙҙең Өфөлә лә Башҡорт урамы бар. Ул Алексеевка ҡасабаһында урынлашҡан һәм Әкиәт урамынан алып Тоғролоҡ урамына тиклем һуҙыла. Шулай уҡ Алексеевкала Башҡорт тыҡрығы барлығын да онотorға ярамай. Стәрлетамаҡ ҡалаһында ла Башҡорт урамы буйлап үтергә мөмкин. Әлбиттә, был исемлек тулы түгелдер һәм республика исемен йөрөтөүсе урындар һаны күберәктер. Шулай уҡ Башҡортостанда бындай исемле урам һәм тыҡрыҡтарҙың булыуына аптырарға түгел, ә бына Рәсәйҙә һәм хатта сит илдә башҡорт атамаһын йөрөткән урындарҙы күреү ҡыҙыҡ күренеш. Мәҫәлән, Рәсәйҙең Ростовтағы Дон, Пермь, Волгоград, Ҡаҙан ҡалаларында нәҡ ошондай исем йөрөткән урамдар бар икән. Шулай уҡ Ҡаҙағстандың Алматы, Украинаның Харьков, Донецк, Краматорск һәм Днепропетровск ҡалаларында ла урамдарына Башҡорт исемен биргәндәр, рәхмәт яуғырҙары.

Элекке СССР киңлектәрен ҡалдырып, сит илдәргә лә күҙ һалайыҡ, сөнки алыҫ ҡитғаларҙа ла беҙҙең республика исемен йөрөтеүсе урындар байтаҡ. Мәҫәлән, әгәр ҙә кемгәлер Американың Калифорния штатында урынлашҡан Эльк-Гроув ҡалаһына барырға тура килһә, мотлаҡ рәүештә Башҡорт урамын күрмәйенсә китмәгеҙ! Шулай уҡ ошо уҡ штаттың Корона ҡалаһында һәм Американың иң ҙур ҡалаларының береһе - Лос-Анджелеста ла Башҡорт урамы, ә Төньяҡ Каролина штатындағы Браунс Саммит ҡалаһында Башҡорт тыҡрығы бар.

Әйтергә кәрәк, Башҡорт атамаһын Америка ғына түгел, ә алыҫ Англия ла үҙ итә. Был илдең картаһында ла Башҡортостандың бәләкәй генә өлөшөн табырға була. Мәҫәлән, Вестбери ҡалаһында Башҡорт шоссеһы буйлап машинала елдерергә мөмкин. Шәп бит!

Ә эҫе Эфиопияла йәки алыҫ Иранда башҡорт йә Башҡортостанды иҫләткән берәй урынды табып булырына ышанаһығыҙмы? Ышанырға тура килер, сөнки Эфиопияла Өфө ҡалаһы, ә Иранда Салауат ауылы бар. Салауат атамаһын хатта Ерҙә генә түгел, ә сикһеҙ-ҡырыйһыҙ йыһан киңлегендә лә осратырға мөмкин. Мәҫәлән, Марс һәм Юпитер планеталары араһында 1979 йылда Бельгия астрономы тарафынан асылған Салауат астероиды әйләнә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Алыҫ илдәрҙә төрлө телдә беҙҙең күңелдәргә яҡын һәм ҡәҙерле "башҡорт", "Башҡортостан", "Өфө", "Салауат" һүҙҙәренең яңғырауы шатландыра. Тик ошо урында Башҡортостан ғына түгел, хатта Рәсәй хаҡында аҙ хәбәрҙар булған сит ил вәкилдәренең беҙҙең республикабыҙ, баш ҡалабыҙ һәм милли батырыбыҙ исемен йөрөткән атамаларҙы ҡулланылышҡа индереүе нисек килеп сыҡты икән тигән һорауҙың тыуыуы тәбиғи. Был ҙур тикшереү талап иткән ҡыҙыҡлы тема һәм ҡасан да булһа уны өйрәнеүсе һәм аныҡлаусы табылыр, тип ышанғы килә.**

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Көнсығыш Померания һөжүм итеү операцияһында

II дәрәжә Ватан һуғышы орденына лайыҡ булыусылар: 58-се гвардия атлы полкының ҡылыссылар взводы командиры, гв. лейтенанты Хода Константин Васильевич, Винницк өлкәһендә тыуып үҫкән. 11 февралдә Кларпуль ауылы өсөн алышта дошманды ауылды ташлап китергә мәжбүр итә, немецтарҙың 15 һалдатын сафтан сығара. Алыш барышында үҙен тәүәккәл һәм ҡыйыу командир итеп тота; 58-се гвардия атлы полкының ҡылыссылар взводы командиры, гв. лейтенанты Муханов Камил Сабирьян улы, Яңауыл районының Йөгәмеш ауылынан. 16 февралдә Браллентин ауылы өсөн алышта Муханов үҙенең взводы менән дошмандың 3 контратакаһын кире ҡаға.

Корпус командиры бойороғо менән II дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән бүләкләнеүселәр: 58-се гвардия атлы полкының танкҡа ҡаршы истребитель батареяһы командиры, гв. өлкән лейтенанты Федосеев Анатолий Григорьевич, Өфө районының Березовка ауылынан. Таммин ауылы янындағы бәрелештә батарея немецтарҙың 7 пулеметын һәм бер взводҡа яҡын пехотаһын юҡ итә, Браллентин янында ҡаршы яҡтың ауыр танкыһын, 12 һалдатын сафтан сығара; 148-се гв. артминполкының 5-се батареяһы разведчигы, гв. сержанты Әхмәтйәнов Мөхтәр Сафа улы, элегерәк Ҡыҙыл Йондоҙ ордены һәм "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнгән. Әбйәлил районының Аскар ауылынан; корпустың Ҡыҙыл Йондоҙ орденлы 7-се айырым бәйләнеш дивизионының линия күҙәтеүсеһе, гв. ҡыҙылармеецы Фаттахов Ғәли Зиннәт улы, элегерәк Ҡыҙыл Йондоҙ ордены һәм "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнгән. Миәкә районының Елдәр ауылынан. Был награда уға дошман уты аҫтында бәйләнеш линияһын тиҙ арала тоташтыра алғаны һәм яуҙарҙа күрһәткән батырлығы өсөн бирелә.

Дивизия һәм полк командирҙары бойороҡтары менән йөҙәрләгән батыр яугирҙар - офицерҙар, сержанттар һәм рядовойҙар Ҡыҙыл Йондоҙ, III дәрәжә Дан ордендары, "Батырлыҡ өсөн" һәм "Боевой хеҙмәттәре өсөн" миҙалдары менән бүләкләнә. Мәҫәлән, 60-сы гв. атлы полкы яугирҙарынан наградалар алыусылар: ҡылыссылар взводы командиры, гв. лейтенанты Суворов Василий Иванович; 4-се эскадрондың ҡул пулеметы пулеметсыһы Әхмәтйәнов Мәғзанур Тимерхан улы; бәйләнеш взводы отделениеһы командиры, гв. өлкән сержанты Кузьменко Иван Арсентьевич; сапер взводы командиры, гв. өлкән лейтенанты Ғәзиев Мозаһит Ғабдрахман улы; 2-се эскадрондың ҡылыссылар отделениеһы командиры, гв. өлкән сержанты Ғатауллин Шафиҡ; 62-се гв. атлы полкынан: гв. ефрейторы, артиллерист Сәләмов Фәиз Сәләм улы; 45-миллиметрлы батарея бәйләнешсеһе, гв. сержанты Калачев Илья Михайлович; гв. ефрейторы, станковый пулемет расчеты номеры Хәбибуллин Ғәзизйән Хәбибулла улы; гв. рядовойы Хәкимов Мәсғүт Ханнан улы һәм башҡалар.

2-се һәм1-се Белорус фронттары частарының уңышлы хәрби хәрәкәттәре Көнсығыш Померания һөжүм итеү операцияһы барышында бик мөһим хәрби-сәйәси роль уйнай. Уның һөҙөмтәһендә поляк халҡына ҙур ҡалалары һәм мөһим порттары булған Балтик диңгеҙенең яр буйы территориялары ҡайтарыла. Дошман ҙур юғалтыуҙарға дусар ителә, ул Көнсығыш Померания плацдармын юғалта һәм Балтик диңгеҙе яры буйындаға байтаҡ ҡына ерҙәрҙә ҡалдырып китергә мәжбүр була. Немец-фашист командованиеһының Одер ярҙарына килеп еткән совет ғәскәрҙәре флангыһына һөжүм итеп, уларҙы тар-мар итеү планы бойомға ашмай. Уңышлы операция тамамланыуға беҙҙең ғәскәрҙәребеҙҙең 11 армияһы, шул иҫәптән ике танк армияһы Берлин операцияһында ҡатнашыу мөмкинлегенә эйә була.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Бөгөн балаларға өләсәй-олатайҙар мәктәбенең йылыһы етеңкерәмәй кеүек. Яңы тыуған сабыйҙы нисек итеп имләү, йоҡлатыу, ниндәй доға-сүрәләр уҡып сайындырыу кеүек боронғо тәрбиәләү алымдарын йәштәр белмәй ҙә, тиерлек.*

**Уның тормошо билдәле бер рәссамдың картинаһындағы кеүек. Үҙе сая ла, ҡыйыу ҙа, бер үк ваҡытта башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына хас нәзәкәтлек тә һаҡлай. Халыҡ ижады ынйыларын өйрәнеп кенә ҡалмай, донъяуи кимәлгә сығарыуға ла өлгәшкән ул. Гәзит уҡыусыларға республика төбәктәрендәге бик күп фестиваль-конкурстарҙың проекттары авторы һәм кураторы, фольклорсы-этнограф, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Гөлгөнә Вәлит ҡыҙы БАЙМЫРҘИНА менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

**Халыҡ ижадына ҡыҙыҡһыныу ғаиләнән килеүе мәғлүм. Һеҙҙең миҫалығыҙҙа фольклорға һөйөүҙе кем уятты?**

- Өләйем, тип уйлайым. Өс йәшемдән мин Әбйәлил районы Үтәгән ауылында әсәйемдең ата-әсәһе Хафиза һәм Сәлмән Гәлләмовтар ғаиләһендә тәрбиәләндем. Олатайым да, өләсәйем дә бай тормош мәктәбен үткән кешеләр ине. Өләсәй сәсән телле, олатай бейеүгә, мағанын һәр кемебеҙ белә ине. Төндә һыуға барырға тура килгәндә һыу эйәһенең ризалығын алыу өсөн "Күкбуҙ атлы ҡунаҡ килгән, шуға тәһәрәтлек һыу алам, бисмилләһир-рәхмәнир-рахим", тип әйтергә ҡушыр ине өләсәйем. Шулай уҡ төрлө имтомдарҙы - ауыртҡан урындарҙы һылап-һыйпарға, быуын ултыртырға, сабыйҙың эсе ауыртҡанда бүсәр имләргә һәм башҡа халыҡ дауаһы серҙәренә лә өләсәйҙәр эргәһендә йөрөп, белеп алдынан йөрөргә ярамай һуң? Сөнки ир кеше - ул ғаиләлә төп кеше, уның абруйын һаҡларға, уның алдынан бармаҫҡа, унан алда һүҙ һөйләмәҫкә тейешһен. Юлға сыҡҡанда ла алдан ирҙәр барырға тейеш, сәфәргә сыҡҡанда хатта: "Тәүҙә ир кеше осраһа ярар ине", - тип юрайҙар.

Бала сағымдан бер күренеш күҙ алдында: ҡышҡы һыуыҡ көн, эре суҡлы шәлдәрен кәзәкейҙәре өҫтөнән баш аша ябынып алған ҡупшы өләсәйҙәр,

- Башҡорттар араһында шәл һуғыу, бәйләү кәсебенең киң таралыуы тураһында бик күп ғалимдар, сәйәхәтселәр яҙып ҡалдырған. Мәҫәлән, Италия этнографы, профессор Стефано Сомье XIX быуатта Әбйәлил районы Ташбулат ауылынан үткәндә һуғылған шәлдә ике һумға һатып ала. Ҡаты буранлы Урал һыуығынан шуның ярҙамында һаҡланыуы хаҡында ла яҙа. Өләсәйемдең дә ҡәҙерләп кенә ҡунаҡҡа ябына торған аҡ дебет шәле булды: "ҡунаҡ шәле" ти ине, ә көндәлектә һорорағын ябынды. Шәл һуғыу өсөн генә тотҡан кәзәләре лә булды.

Эйе, башлыса дебет шәлде бәйләгәндәр. Һуҡҡандар ҙа, әлбиттә. Әммә шәл һуғыу технологияһы ныҡлы өйрәнелмәгән. ҡул эше менән булышҡан кешенең күңеле ипле, уйҙары тәртиптә була. Ҡатын-ҡыҙҙар күберәк шөғөлләнһен ине шундай үҙебеҙҙең боронғо ҡул эштәре менән. Проектыбыҙға ир-егеттәрҙе лә йәлеп итә алыуыбыҙға һөйөндөк. Бөгөн был эште дәүләт кимәлендә күтәреп алып, етештереүҙе яйға һалһаҡ ине, тип хыялланам.

**Гөлгөнә Вәлит ҡыҙы, һуңғы йылдарҙа республика район-ҡалаларында төрлө брендлы саралар үткәрелә, бер нисәүһе һеҙҙең етәкселектә ойошторолдо. Урындағы халыҡ был эштәрҙе күтәреп алдымы?**

- Бөгөн һәр районның йөҙөн билдәләгән брендлы саралар

# АҪАБА ХАЛЫҠТЫҢ...

## мәҙәни кодына тоғролоҡ һаҡлайыҡ



юморға оҫта булды. Йор һүҙлелеге иҫтә ҡалған: гел шаяртып, мәрәкәләп һөйләште. Өләсәй йырларға ла бик яратты. Таҡмаҡлап тора ла, өйрәләп бейеп китә. Уның менән бергә балаҫ һуға инек, йыш ҡына балаҫҡа йөндәрҙе лә миңә буярға ҡуша торғайны. Фольклор менән ҡыҙыҡһынып китеүемә лә нәҡ улар сәбәпсе булғандыр, тим.

Сәнғәткә, мәҙәниәткә ынтылыуымды заманында Әхмәт ағай Лотфуллин да шәйләгән булған. Ул олатайҙың яҡын туғаны ине. Йәйҙәрен беҙгә йыш килде, ҡайҙа ғына барһа ла, ҡулынан буяуҙары төшмәне. Картиналарында төп геройҙар билдәле: ябай халыҡ, беҙҙең ауыл кешеләре бик күп. Хатта Үтәгәндә туй барышын да һүрәткә төшөргәйне.

Бер ваҡыт Өфөнән музыкаль һәләтте тикшереп йөрөүселәр килде. Мине һайланылар, баш ҡалаға уҡырға барырға кәрәк, тинеләр. Өләсәйем ебәрмәне. Шулай итеп, ауылда үҫтем, нығындым. Өләсәйем мине халыҡ педагогикаһына таянып тәрбиәләне, юҡҡа ғына сәсән телле булмағандыр инде, тип ҡуям бөгөн. Һәм олатай-өләсәй тәрбиәһендә үҫеүемә сикһеҙ ҡыуанам.

**Тимәк, өләсәй мәктәбе тормошоғоҙға ныҡ йоғонто яһаған. Ә хәҙерге йәшәйештә һаҡланғанмы бындай мәктәп?**

- "Заман башҡа, заң башҡа", тигәндәй, бөгөн өләсәйҙәр ҡаҡлы ялға сыҡһалар ҙа эшләргә мәжбүрҙәр шул. Ҡала ерендәгеләр мотлаҡ эшләүҙе дауам итә. Ауылдарҙа ла ейән-ейәнсәрҙәр өләсәй-олатайҙарын һирәк күрә. Ә бит заманында оло йәштәгеләр хәҙерге балалар баҡсаһын алыштырған. Йәштәр эштә саҡта олатай менән өләсәй бала ҡарашҡан. Иҫләйем, өләсәйем, балаҡ әхирәттәре менән бергәләп, ауыл балаларын "Ҡарға бутҡаһы"на алып сыға торғайны. Әкиәт, урындағы риүәйәт-легендаларҙы һөйләй торғайнылар. Ошо аралашыуҙан беҙ, мәҫәлән, һыу менән бәйле күп төрлө тыйыуҙарҙы белеп үҫтек: ҡояш байығас, һыуға барырға ярамай... үҫтек. Мейе үлсәргә лә өйрәндек, һөлөк тә һала торғайныҡ. Ауыл халҡы йыш ҡына һөлөк һалдырырға өләсәйемә килә ине. Өләсәйем балалар халыҡ дауаһы алымдарын күреп-белеп үҫһен, тип, бар ошо процедураларҙы беҙгә күрһәтеп эшләй, шул рәүешле үҙ тәжрибәһе менән уртаҡлаша торғайны...

Бөгөн балаларға өләсәй-олатайҙар мәктәбенең йылыһы етеңкерәмәй кеүек. Яңы тыуған сабыйҙы нисек итеп имләү, йоҡлатыу, ниндәй доға-сүрәләр уҡып сайындырыу кеүек боронғо тәрбиәләү алымдарын йәштәр белмәй ҙә, тиерлек. Ҡулда йөрөгән бала тиҙ үҫә, формалаша, тиҙәр. Шуны башҡорттар электән белгән, бала бик үк сәңгелдәктә ятмаған: башын тота башлағандан алып ҡулда, йә аяҡта һикерткәндәр. Ололар фекеренсә, ошо рәүешле быуын нығытылған. Һикерткәндә, гәҙәттә, таҡмаҡ әйтәләр, был иһә музыкаль яҡтан тәрбиәләй. Туған мондо ҡолаҡтары ишетә, ҡанына һеңдерә, бала ритмға ла баҫырға өйрәнә. Ошо һәм башҡа тәрбиә алымдарын беҙгә тергеҙергә кәрәк. Өләсәйҙәрҙең эше күп булһа ла, быуындар бәйләнешен һаҡлайыҡ, ваҡыт табып, ейән-ейәнсәрҙәрҙе барырға, улар менән күберәк ваҡыт уҙғарырға кәрәк, тип әйтмәксемен.

**Ярай, ярамай, тип тыйыу ҙа ниндәйҙер хөрәфәт түгел, ә әхлаҡ ҡанундарының береһеләр, моғайын?**

- Эйе, тап шулай. Сөнки егеттәргә, йә "Тубығыңды тартып ултырма, ҡырҡ көнһеҙ иманың ҡайтмай", тигән һымағыраҡ ҡыҙҙарға ғына тәғәйен тыйыуҙар бар. Хәҙер ҡарайһың да, ҡыҙҙарҙың тубыҡ тартмау түгел, аяҡтарын да йыймай ултырыуы ғәҙәти күренешкә әйләнеп бара. Ә бына "Ир-егет алдынан йөрөмә, юлын ҡыйма", тигән тыйыу йәшәй әле беҙҙең йәмғиәттә. Ул да ниндәйҙер хөрәфәт ышаныуҙарҙан ғына килмәй, бер тәрбиә алымы. Ни өсөн ир-егеттең

инәйҙәр ҡунаҡҡа китеп бара. Атлағанда шәлдәренең остары үксәләренә етеп, ергә һөйрәлә. Улар бер нисә аҙымға олатайҙарҙан артҡа ҡалып, эйәреп китеп бара. Ҡултыҡлашып бергә йөрөү тигән нәмә булмаған. Бындай күренеш беҙҙең яҡҡа ғына хас булғанмы-юҡмы, әйтә алмайым. Әммә хәҙер шуны йылмайып иҫкә төшөрөргә генә ҡалды.

**Әйткәндәй, һеҙ мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһендә дөйөм милли әһәмиәтле ижади проекттарға булышлыҡ иткән өсөн Рәсәй Президенты грантын яулап, һуғылған шәл буйынса тиҫтәнән ашыу оҫталыҡ дәрестәре лә үткәрҙегеҙ. Бөгөн был эштең һөҙөмтәһе, киләсәге бармы? Заманында башҡорттар Ырымбур өлкәһендә шәл менән сауҙа итеп, ырымбурҙарҙы брендлы иткән кеүек, һуҡма шәл дә сит ҡулдарға китмәҫме?**

Шуға былтыр грантҡа лайыҡ булғас, ныҡлап уның технологияһын өйрәнә, һуғыу өсөн кәрәкле дебет әҙләй башланыҡ. Ейәнсура, Баймаҡ райондарынан алған дебет шәл һуғыуға эшкинмәй булып сыҡты. Баҡтиһәң, һыйыр мөгөҙөн һындырып сатлама һыуыҡтарҙа аҫралған кәзәләрҙең генә дебете ныҡлы була икән. Ырымбурҙа аҫралған кәзәләрҙең дебете менән эшләргә тура килде. Ғөмүмән, проектыбыҙҙы бойомға ашырғанда башҡорт шәленә ҡағылышлы бик күп серҙәрҙе астыҡ.

Аллаға шөкөр, оҫталарыбыҙ бар, шуларҙың береһе ауылдашым Ғәшүрә Әүбәкирова. Ул беҙгә шәл һуғыу оҫталығын төшөндөрҙө. Уның ярҙамында беҙ йөҙҙән ашыу кешегә оҫталыҡ дәресе үткәрҙек. Республиканан тыш, илдең төрлө төбәктәренән килеп өйрәнеүселәр ҙә булды. Тукыу станогында эшләү күңелдә бер ритмға көйләй, шуға

бар. Мәҫәлән, Октябрский ҡалаһында "Ҡурай байрамы", Сибайҙа "Ирәндек моңдары", Салауат районында "Салауат йыйыны". Һуңғыһы быйыл үҙенең 20 йыллығын билдәләне, шөкөр. Бына ошондай сараларҙың һәр районда үтеүе яҡшы күренеш, ғөмүмән, халыҡ ижадына иғтибар тик беҙҙең республикала ғына шулай юғары.

Ошо брендлы сараларҙы ойоштороуға үҙем ярҙам иткән төбәктәр бар. Әйтәйек, Шаран районы халҡы туй йолаһы сараһын күтәреп алып, гөрләтеп эшләп алып киттеләр. Илештә "Ауаз" исемле күп жанрҙарҙы үҙ эсенә һыйҙырған этник фестиваль проекты унышлы ғына эшләй. Балтаста дүртенсе тапҡыр ойошторолған "Йәш килен" этник фестивале халыҡ-ара кимәлгә сыҡты. Конкурсҡа яңы ғына төшкән йәш килендәр кейәү яғындағы йолаларҙы, ашһыуҙарҙы ғына түгел, ғаилә тарихын, шәжәрәләрен өйрәнеп килә. Минең өсөн йәш килендәрҙең үҙен иренең затын дауам итеүсе, уның тоҡомон арттырып, илгә батырҙар, матур ҡыҙҙар тәрбиәләүсе булараҡ ҡабул итеүен күреү шатлыҡлы.

Һуңғы ике йылда Ҡариҙел һәм Асҡын районлары өсөн матур проекттар эшләнек. Ошо ике төбәктең кейемдәрен айырып әйтергә кәрәк. Улар кейем-һалымы, аш-һыуы, хатта һөйләштәре менән төньяҡ-көнбайыш һәм төньяҡ-көнсығыш башҡорттарынан айырылып тора. Бына шундай күп төрлөлөгөбөҙҙө, матур йолаларыбыҙҙы тергеҙгән районларыбыҙ бихисап һәм уларға был енел булмаған эштәрендә булышлыҡ иткән проекттарым да күп. Быны маҡтанғандан әйтмәйем, тик үҙемдең эшмәкәрлегемдән һөҙөмтәһен күреп, ҡыуанысым менән бүлешергә генә теләп телгә алам.

Әбйәлилдә Урал арьяғы башҡорттарының киң билдәле "Ҡомарткы" этник мәҙәни форумы сиктәрендә "Быуындар сылбыры" исемле конкурс үткәрелә. Унда ҡатнашыусылар шәжәрәләре, кәсептәре тураһында һөйләй. Был форумда шулай уҡ лаҡап һөйләүселәр араһында

ойошторолған ярыш бик ҡыҙыҡлы үтә, сөнки Әбйәлилдә сәсәнлек традициялары әле һаман һаҡлана. Ғөмүмән, билдәле сәсәндәребеҙ төйәге булған Учалы, Бөрйән, Белорет, Ейәнсура, Йылайыр райондарында әле лә йор һүҙле кешеләр йәшәй. Урындағы һөйләште, диалектты һаҡлап ҡалыу өсөн шул "Лаҡап тирмәһе" исемле конкурс бик ҡулайлы. Уның жюри рәйесе Башҡортостандың халыҡ артисы Вәхит Хыҙыров үҙе лә бит тел бисҭәһе. Был конкурста кешенең телгә, ата-бабаларына булған хөрмәте күренә, төрлө онотолған һүҙҙәр килеп сыға. Бындай бәйгеләр туған телебеҙҙең байлығын һаҡлау өсөн дә әһәмиәтле.

**Күптән түгел күркәм юбилейығыҙҙы билдәләнегеҙ, эшмәкәрлегегеҙгә бер ни тиклем һығымта ла яһап, киләсәккә пландар ҙа ҡороп әйткәндә, халыҡ ижады гәүһәрҙәрен һаҡлап ҡалыу, киләһе быуынға тапшырыу ниәтендә тағы ниндәй эштәр атҡараһы бар?**

- Бөтә проекттарым башҡорт халыҡ ижадын, тарихын өйрәнеүгә һәм шуны һаҡлауға бәйле булғас, милләттәштәр ошо хазиналарыбыҙҙы онотмаһын ине, тип теләйем. Халыҡ ижадын бер ниндәй аҡса менән дә алмаштырып та, баһалап та булмай. Был - беҙҙең бай һәм баһалап бөткөһөҙ ҡомартҡыларыбыҙ, һәм беҙ уны һаҡларға тейешбеҙ. Әгәр ҙә кемдер йыр-моңдарын күҙ ҡараһылай һаҡлай икән, балаларына ҡала, шулай был белем артабан быуындан-быуынға дауам итә. Халыҡ шулай йәшәй. Һәр милләттең үҙенең генетик коды бар. Шул уҡ башҡорт халҡы ла үҙ йөҙөн, йәшәйешен, тәрән фәлсәфәһен булдырған. Башҡа бер ниндәй ҙә донъя халыҡтарында булмаған үҙенсәлектәребеҙ бар.

Мин һәр ваҡыт кемгәләр нимәлер өйрәтер алдынан үҙемдән башларға күнеккәнмен. 2014 йылда беренсе тапҡыр Юлай Ғәлиуллин менән Рафаэль ағай Амантаевтың уҡ атҡандарын күрҙем һәм шул саҡта: "Ә нишләп быны тотош Башҡортостанға таратмаҫҡа?" - тигән уй килде. Ҡатын-ҡыҙҙарҙан үҙем башлап уҡ аттым. Шунан Ҡырғыҙстанға барҙыҡ һәм унда бөркөт менән һунар итеүселәрҙе күреп ҡайттым һәм: "Ни өсөн был бәйгелә башҡорттар ҡатнашмай?" - тинем. Ә бит беҙ ҡош сөйөү, ҡош менән һунар итеү буйынса тотош донъяла дан алған халыҡ булғанбыҙ. Сәмләнеп, ир-егеттәр ҡатнашҡан конкурсҡа үҙем сығып, шөкөр, икенсе урын алдым. Бына ошо башланған эште лә дауам итеүселәр табылһа ине: этноспорт үҫешергә тейеш беҙҙә.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Халыҡ ижадын һаҡлау, уны киләһе быуындарға тапшырыу һәр кемдең мөҡәддәс бурысы. Әгәр Гөлгөнә Вәлит ҡыҙы Баймырҙина кеүек замандаштарыбыҙ фольклор ынйыларының сер асҡысын тапҡан икән, артабан беҙгә был эште дауам итергә генә ҡәрәк.**

Азат ҒӘЛИУЛЛИН
әңгәмәләште.

ҒАИЛӘ МӘКТӘБЕ

# ЫСЫН МӨХӘББӘТ БАРМЫ,

## әллә уны мауығыу тип кенә атарғамы?



**"Кисә генә һауаларҙан сүпләп,
Һөйгәндәргә йондоҙ тараттыҡ,
Ал кәрәкһә, алдарын да таптыҡ,
Гөл кәрәкһә, гөлдәрен дә таптыҡ,
"Йәнкиҫәктәр" тиеп йән аттыҡ..."
Күренекле әҙибебеҙ Әнғәм Атнабаевтың "Ҡайҙа икән беҙҙең егетлек?" тип аталған шиғыры бына шулай башланып китә.**

Бала сағымдан яратыу, тәүге һөйөү, саф мөхәббәт тигән төшөнсәләрҙе ишетә киләм. Ун өс-ун дүрт йәштәрҙә мәктәбебеҙҙә күрше ауылдан килеп уҡыған ҡуңыр сәсле бер ҡыҙға күҙем төшкәс, шундай хис ысынлап та барҙыр тигән ҡарарға килгәнем иҫемдә. Мөхәббәт мәңгелек булалыр тигәнгә лә ышандым. Тәпәшерәк буйлы, бер аҙ ғына тулыраҡ кәүҙәле Зиләне (исемдәр үҙгәртелде) уйлап, төн йоҡоларымды йоҡламаған мәлдәрем дә булманы түгел...

Күптәрҙең шундай осоро була торғандыр инде. Үҫмер саҡтарынан уҡ дуҫлашып, тора-бара бер-берейһен өҙөлөп яратып йөрөгән Артур менән Гөлнур исемле синыфташтарым да бар ине. Мин әлеге ҡыҙға ауыҙ асып бер һүҙ әйтергә ҡыймай йөрөһәм, былар асыҡтан-асыҡ һөйләшеп, хатта етәкләшеп тә йөрөй...

Улар өсөн ихлас күңелдән һөйөнә инем. Мәктәпте тамамлап, күп тә тормай, өйләнештеләр. Шундай тәрән мөхәббәт нигеҙендә төҙөлгән был ғаиләнең ныҡлы буласағына шикләнмәнем дә. Әммә, бер нисә йылдан уларҙың ғаиләһенең тарҡалыуын ишеткәс, ғәжәпләнеүемдең сиге булманы. Улар өсөн нисек борсолғаныңмды белһәгеҙ ине! Икеһенең дә фәҡәт ынғай яҡтарын ғына хәтерләйем. Ҡыҙ - уҡыу алдынғыһы, өлгөлө тәртипле ине. Башҡалар менән дә мөләйем мөнәсәбәттә, ярҙамсыл, тәҫкә лә һылыу ғына. Ғөмүмән, яҡшы ҡыҙ. Егет тә алдынғы спортсы, тыныс холоҡло. Бер һүҙ менән әйткәндә, бынамын тигән! "Алтын егет" тип тә атайҙар ундайҙарҙы. Тик, үкенескә, уртаҡ балалары ла булыуына ҡарамаҫтан, бөгөнгө көндә улар айырым.

Кемдәрҙер, был парҙың араһына атаәсәһе, башҡа яҡындары килеп ҡыҫылғандыр, тип фаразлар. Төрлө ауылдарҙан килеп, ҡала мәктәбендә уҡыған әлеге Гөлнур ҙа, Артур ҙа бер-берейһенең атаәсәһен бөтөнләйгә белмәй ине. ЗАГС-ҡа барырҙан бер нисә көн элек кенә таныштырҙы улар ата-әсәләрен. Ике яҡтың да ата-әсәһе - яғымлы ҡайны-ҡәйнәләр, егеткә лә, ҡыҙға ла тәү күреүҙән оҡшаны.

Буласаҡ кейәү менән килен дә ата-әсәләрҙең күңеленә хуш килде.

Ир хәмер менән мауығып киткәндер, йә эшләмәй өйҙә ятҡандыр, шул сәбәпле айырылышҡандарҙыр, тип әйтеп тә булмай. Әрме хеҙмәтен тамамлап, мыҡты егет булып ҡайтҡан Артурҙың да, кәләшенең дә эшһөйәрҙәр икәнлеген беләм. Сит өлкәгә китеп, үҙҙәренә ҡулайлы эш табып, ярайһы ғына яҡшы аҡса эшләп, хатта тиҙ арала фатир ҙа алып, яңы тормош башланы улар. Балалары ла тыуҙы.

"Бәлки ир "һулға" йөрөштөргәндер ҙә, ҡатыны уны ҡыҙғанғандыр?" тип тә уйларлыҡ түгел. Сөнки был хаҡта бер ни ҙә ишетелмәне. Электән белеүемсә, Артур ифрат етди егеттәрҙән ине...

Бына шулай: тормошобоҙҙа был - ғәҙәти күренеш. Был хаҡта уҡыған һәр кеше ошоға оҡшаш бихисап миҫал килтерә аласаҡ. Ә ни өсөн шулай "ғәҙәти" икән бындай хәл?

Шундай яҡташтарыбыҙға ҡарап, алдан бер-берейһен бөтөнләйгә тиерлек белмәгән-күрмәгән көйө ғаилә ҡорған боронғо ата-бабаларыбыҙ, олатай-өләсәйҙәребеҙҙең ғүмер итеше тураһында уйлана башлайһың ҡайсаҡ. Башлыса башҡалар димләүе буйынса ғына танышып, никах кисендә генә осрашҡан егет менән ҡыҙ ирле-ҡатынлы булып, ҡартайғансы, хатта гүргәсә бергә булғандар бит. Айырылышыу осраҡтары ла булмаған тиерлек! Әллә күпме бала-сағa ла тәрбиәләп үҫтергәндәр. Бер-берейһенә "атаһы", "әсәһе" тип хөрмәтләп өндәшкән бындай парҙарҙың күпселегенең уйына никах емереү тигән нәмә инеп тә сыҡмаған. Әсәйем һөйләүе буйынса, әүәле ҡатын-ҡыҙҙың ирҙән айырылып, атай йортона кире ҡайтҡан осраҡтары булмаған да тиерлек. Булһа булғандыр ҙа инде, әммә, әлеге әйтмешләй, был ғәҙәти хәлгә әйләнмәгән! Ҡыҙына "таш булып бат", тип теләк теләп оҙатҡан ата-әсәһе. Кейәүҙән айырылып ҡайтыу ғәйәт ҙур хурлыҡҡа һаналған. Ҡыҙҙар - килендәр ҙа был хаҡта бик яҡшы белгән. Ошондай рух бәләкәйҙән өләсәйҙәребеҙҙең "ҡанына һеңгән", күрәһең. Тағы кемдер "Был бит бик боронғо замандарҙа ғына булған" тиер. Әммә, бөгөнгө көндә лә, хатта минең яҡын таныштарым араһында, берберейһен элек бөтөнләйгә белмәгән ҡыҙҙарҙы - килен, егеттәрҙе кейәү итеп алып төҙөлгән ғаиләләр күп кенә. Әллә нисәшәр бала үҫтереп, уларҙы уҡытып, бынамын тигән итеп тәрбиәләп, бик күптәргә өлгө булып, теттерем донъя көтөп ята улар...

Ысынлап та сәйер бит: белмәгәнкүрмәгән кешең менән тиҙ генә таныша һалып, нисек итеп ғүмер буйы бергә йәшәмәк кәрәк? Ә мөхәббәт?.. Йырсыларыбыҙ данлап йырлаған, шағирҙарыбыҙ бәйәктәргә сөйгән "һөйөү" тигән хис ҡайҙа булған? Ғөмүмән, ундай нәмә донъяла бармы? Булған хәлдә, "мөхәббәтле" никах төҙөп ҡауышҡандарҙың яртыһынан күбеһе ни өсөн ҡабаттан айырылыша һуң?.. Ысын мөхәббәт, бәлки, ғаилә ҡорғас ҡына тыуалыр? Улай булһа, һигеҙенсе синыфта уҡыған ҡарпыш ҡолаҡлы малай менән бумала баш ҡыҙыҡай араһындағы бер-берейһенә булған йылы мөнәсәбәтте нисек атарға? Үҫеп етеп, бәлегендә һәм башҡа урындарында көс ташып тороуын тойған егет менән бешкән сейәләй матур йөҙлө, зифа буйлы ҡыҙ араһындағы бер-берейһенә ылығыуҙы мөхәббәт тип атап буламы? Шундай "ҡайнар" тойғо кисереүселәр "Мөхәббәт бераҙ генә була", бәгзеләре хатта "Ул - мәңгелек" тип тә ебәрә. Әгәр улай икән, ни өсөн сикһеҙ һөйөү менән "янған" парҙар, ҡауышҡандан һуң, берберейһен яратмай, хатта күралмай башлай? Бер-берейһенә: "Мин һине бүтәнсә яратмайым", - тигән һүҙҙәр әйтешеп, инде "атай, әсәй", тип тәтелдәп торған алтындай балаларын сыр-сыу илатып, айырылышыу яғын яйлай, ысын мөхәббәттең бөтөнләйгә булмауы хаҡында гәп һата. Башта телгә алынған шиғырҙа әйтелгәнсә, "Йәнкиҫәктәр"ҙе беҙ әйләндерҙек Йән ҡыйыусы усал ҡатынға. Алдарыбыҙ инде ал түгелдәр, Гөлдәребеҙ шинде һалҡынға..."

Ә был мәлдә... Бәлки, ҡасандыр яҡындары ғына таныштырған, әлеге әйткәндәй, "димләп ҡауыштырылған" икенсе пар иң беренсе нәүбәттә балаларын хәстәрләп, шул гәзиздәренә һөйөнөп, көңгөр-ҡаңғыр итеп, артабан донъя көтә. Үҙҙәре төҙөгән ҙур, матур ғына йорттары ла балҡып тора. Танышҡан, ҡауышҡан саҡта "һөйөм" тигән һүҙҙе лә әйтешмәгән был ир менән ҡатын араһында татыулыҡ, тыныслыҡ хөкөм һөрә...

**Инаныуымса, бала саҡтан туғандары, ата-әсәһе, башҡа кешеләр менән яҡшы мөнәсәбәттә, матур тәрбиә өлгөһөндә үҫкән егет һәм ҡыҙ, ҡауышҡандан һуң, үҙҙәрен ана шундай тормошҡа көйләй. "Өйләнештең икән, хәләл ефетеңдең һәр бер яҡшы яғын ыңғай баһалап, кире яғын күрмәҫкә тырышып, уға мөмкин тиклем ярарға ынтылып йәшәргә кәрәк", тигән инаныуға булған был пар ғүмер буйы бергә йәшәйәсәк!**

"Мөхәббәтле" никах ҡораһыңмы, әллә димләү буйынса өйләнешәһеңме - барыбыҙ ҙа (егет тә, ҡыҙ ҙа) "тоҡ эсендәге бесәй"ҙе алған кеше хәлендәбеҙ инде. Халыҡ әйтмешләй, "кешенең эсен ярып ҡарап булмай". Тик үҙең, балаларың бәхетле булһын тиһәң, ғаилә ҡорғас та бер-берендә енеп алыу, үҙ һүҙеңдә өҫкә сығарыу тигән уй бер ҡасан да башыңа килергә тейеш түгел. Ир - үҙенең, ә ҡатын кеше үҙ урынын белеп, тыныс ҡына йәшәп алып китһен ул. Бер-берең алдында булырға тейешле яуаплылыҡ тойғоһо иң тәүге планға сығырға тейеш. Берейһе үҙ бурысын икенсеһенә йөкмәтергә тырышмай, бер-берейһенә ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер булған саҡта ғына ғаилә именлерә ғүмергә һаҡлана.

"Мөхәббәт"ләләр һәм "димләнгән"дәрҙең ғаилә хәлдәре, әлбиттә, мин яҙғанса ғына түгел. Тегеләрҙең дә, быларҙың да, өсөнсөләрҙең дә тормошо бихисап күп төрлө... Тик бәгзе берәүҙәрҙең "Бер-берендә һөйөп-һөйөлөп төҙөлгән ғаиләләр ныҒыраҡ була", тигәнерәк фекеренең төптән хаталы булыу ихтималлығына ишара өсөн генә килтерҙем бындай сағыштырыуҙы.

Әйткәндәй, ҡасандыр "Ромео менән Джульетта"лар, "Таһир менән Зөһрә"ләр, "Отелло - Дездемона"лар, "Хәлил-Ғәлиәбаныу"ҙар, шулай уҡ һәр дәүерҙәге йәш егет һәм ҡыҙҙарыбыҙ тойған "мөхәббәт" тип аталған хисте, бер-берейһенә әсәрләнеп өндәшкән "һөйөм" һүҙен мин шәхсән "мауығыу" тип кенә атар инем. Ысын мөхәббәт, ысын һөйөүҙең, башлыса, иленә, теленә, диненә, халҡына, ата-әсәңә, балана, ейән-ейәнсәрҙәреңә, яҡын туғандарыңа ҡарата булыуы - дөрөҫөрәктер. Ә инде оҙаҡ йылдар бергә татыу йәшәгән хәләл ефетеңә - балаларыңдың әсәһенә (атаһына) ҡарата булған хискә, мөнәсәбәткә ҡарата "тәрән ихтирам", "оло хөрмәт" тигән һүҙ ҡулланыу күпкә дөрөҫөрәк, минеңсә. Бәлки, кемдер башҡа фекерҙәлер?

...Шулай ҙа, башта иҫкә алған Артур менән Гөлнурға матур йәшәү өсөн нимә етешмәгәнен үҙем дә аныҡ ҡына итеп әйтә алмайым. Тормош юлдары - ифрат та ҡатмарлы...

Айытбай ВӘЛИЕВ.

*✓ Ошо асырғаныулы уй тәнемә көс-ҡеүәт өҫтәгәндәй итте, тәнемә һылашҡан, төймәләре эленмәгән һырмамды ауырлыҡ менән һыпырып ырғытып, тыңламаған, һенағастай ҡатҡан ҡулдарымды мәжбүр итеп, йөҙөргә тотондом.*






Тиҙҙән Беренсе май, шунан Еңеү көнө, урамға, теге, әлегә самалап ҡарамаған еңһеҙ аҡ күлдәгемде, һылыулыҡҡа ғына тотонған сөм ҡара сатин ыштанымды, ҡыҙыл сандалийҙарымды кейеп сығырмын, уң яҡ кеҫәмә оло ҡуш ус ҡурылған ҡурмас, һулаҡай яғына әсәйем байрамдарҙа ғына сығарған биш-алты бөртөк өрөк-йөҙөмдө һалырмын, ҡурмасты үҙем кетерҙәтермен, ожмах емештәре - Лидаға, ул бит тәмле тамаҡ. Таня апай ҙа, моғайын, ҡулыбыҙҙы ҡоро итмәҫ, әллә һуңғы арала кейәү һүҙен оноҡҡас мине күрмәҫме? Бына мин ҙурайып өйләнһәм, бер ҡасан да балаларымды ташламам, яттар ҡулына ҡалдырмам, нисек инде, теге тоҡом айғырына атланып, артына атылған ҡуяндай, балаларыңдан ҡасмаҡ, боҫмаҡ кәрәк! Әсәйем көлһә лә минең тормош та еңелдән түгел бит, тел менән дә, яман күҙ менән дә ситнәтелеп йәшәлә...

Хәҙер инеп, түшәгемдә бөгәрләнһәм дә йоҡо алмаясаҡ, ятырмын шулай күренмәгән түбә таҡтаһына төбәлеп, әрһеҙ синерткәнең шыҡһыҙ йырын тыңлап. "Әллә атайҙы барып күрергәме, Сталинга биргеһеҙ, оҫта һыбайлы ниндәйерәк буй-һында икән?" Башыма килгән шул көтөлмәгән теләктән тертләгәндәй һиҫкәнеп киттем. Улай тиһәң, әсәйем, юлдар өҙөлгән ваҡыт, тине бит әле. Өҙөлһә ни, алыҫ ара түгел, өҙөлгәндә ялғап барыр ҙа боролормон, тимерҙе ҡыҙыуында һуғыуың хәйерле. Ә унда минең кәрәгем бармы, атайым танырмы, ҡабул итерме? Ғәзиз балаһын танымаған атайҙар юҡтыр ул донъяла, күҙҙәре менән күрмәһәләр ҙә еҫенән танырға, алыҫтағы шәүләһен булһа ла сырамытырға бурыслылар. Шуның өсөн дә ул атай түгелме? Атайым да мине һис һүҙһеҙ танар, сөнки ҡиәфәтең менән һин уға оҡшағанһың, ти әсәйем.

Кәртәбеҙҙәге ҡарт әтәс таң яҡынлауын һиҙҙереп, ҡарлыҡҡан тамағын артыҡлап ярмай ғына тауыш бирҙе, тимәк, тағы ла ике-өс сәғәт тирәһенән яҡтыра башлаясаҡ. Бөгөн йома, класс етәксеһе Хәнифә апай көн һәйбәт торһа, Һаҡмар йылғаһына экскурсияға барып әйләнербеҙ, тип вәғәҙәләгәйне, шулай булғас, уҡымауыбыҙ ҙа бик ихтимал, уҡымайбыҙ икән, дәрескә килмәүселәргә лә артыҡлап ҡатырғана алмаясаҡ, сөнки уҡытыусыбыҙ һүҙһеҙ ҙә белә. Мәсәлән нимәгә миңә Һаҡмарҙы күрергә, былай ҙа тиҫтер малайҙар менән энер төшкәнсе шул яҡтан ҡайтып инмәйбеҙ. Йәнә, күмәкләп, эйәртенешеп йөрөүҙе яратып бөтмәйем, яңғыҙың булғанда тирә-яғына иғтибар менән, текәлеберәк бағаһың, шул саҡта ошоғаса күренмәгән нәмә күҙгә әләгә, бер үҙеңә фекерләүе, ҡылғаныңа баһа биреп һығымта яһауы ла еңел, ҡамасаулаусы юҡ. Ә тегендә, теләйһеңме быны, әллә юҡмы, Һәйлә менән йәнәш баҫып торорға тура киләсәк, ә өнәмәгән кеше менән юлдаш булыуы - күҙгә дегәнәк төшөп этләнеүгә тиң. Әгәр хәҙерҙән ҡуҙғалһам Ҡәнзәфәр тиғән ауыла төш ауғансы уҡ барып етермен, атайыма текәлеп ҡарау ярты сәғәтте алһын икән ти, кире боролһаң, ҡараңғы төшкәнсе уҡ ҡайтып етә алам.

Ә әсәйемде кисәтмәй сығып китеү килешерме? Билдәле, килешмәҫ, әммә атайымды барып күрергә теләйем, тип үтенһәң, һис ҡасан риза булмаясаҡ, уның яғына йыл әйләнәһенә юлдар өҙәләсәк, уныһы көн кеүек асыҡ. Мин хәҙер ҙурайҙым бит инде, дүртенсе класты ослаһам, үсмер йәшенә индем, тигән һүҙ, ә үсмер менән бергә уның буй-һынынан тыш, уйҙары, теләктәре, хәүеф-борсолоуҙары ла үҫә. Тағы, оҙаҡҡа түгел бит, күп тигәндә ярты көнгә китәм, юлым уңа, юлдашҡа ылау осрай ҡалһа, унан да иртәрәк боролорға мөмкин.

Холҡома ярашлы ҡулымдағы күҙгә күренмәҫ ҡылыс менән ҡырҡа һелтәндем: "Хәл ителде!" Шулайтып ныҡлы ҡарарға килеп, кире өйгә индем дә шыпырт ҡына һәрмәнеп йөрөп йыйына башланым: сатин ыштан урынына ҡалыныраҡ бумазый салбар, сылғаулап кирза итектәр, пинжәккә тартым еңһеҙ һырма, башыма кепка кейеп алдым, ни тиһәң дә ҡараңғыла сығам бит, шуға күрә тартмаға һалып ҡуйған алты асмалы бәкене, көлдөксәлә ятҡан бер ҡап шырпыны кеҫәмә тыҡтым. Өй эсендә тынлыҡ, ниҙер һиҙенгән синерткә лә тыңғандай шымтайып тынып ҡалған, Аҡбикә исемле бесәйебеҙ ҙә барыһын да күҙ яҙлыҡтырмай күҙәтеп ултырыуын һиҙҙереп, диван яғынан ут күҙҙәрен ялтлатты. "Ярай, көтөгөҙ, оҙаҡ йөрөмәм, көтөгөҙ!" тип, бер кемгә лә тәғәйенләнмәгән уйымды бышылданым. Һаҡ ҡына ишекте асып-ябып тупһаға сығып баҫтым, күңелемдән үҙемә-үҙем хәйерле юл теләп, бисмилламды әйтеп, биттәремде һыпырҙым. Тупһа ауыҙында көткән Алғыр, бергә барайыҡ, әҙермен, тигәндәй, ҡойроғон болғап ҡуйҙы. "Һиңә унда ярамай, мында ҡалып ҡына көт, йәме?" Этемдең муйынынан тотоп алып барып, кәртә эргәһендәге сыныбырына эләктерҙем. Ул илағандай сыйнап ебәрҙе. "Үпкәләмә, өй тирәһенә лә күҙ-ҡолаҡ кәрәк!" Шулай тинем дә ҡыҙыу атлап урамға сыҡтым.

Ауыл осондағы таныш юлға төшкәс, ылғый барып йөрөгән Шәмсетдингә тиҙ арала барып еттем. Ҡыйыҡ ай тирә-йүнде нурҙарында ҡойондормаһа ла һәммәһен асыҡ төҫмөрләтә. Һаман да яҡтырмаған әле, Шәмсетдиндәр ҙә иҫ-оҫ белмәй йоҡлайҙар, урамдан үткәндә бер эт кенә төнгө юлаусыны абайлап ләңкелдәгәндәй итте лә тынып ҡалды, шулай итеп, имен-аман беренсе ауылды ла аша үттем. Бындай тиҙлектә барһам, һә тигәнсе барып етәм инде ул. Ауылдың теге осонан уҡ шырлыҡ башлана икән дә баһа, хәйерһеҙ, юл биленә һуҡҡан йыландай, уңға-һулға ташланып, борғаланырға тотондо, аяҡ аҫтындағы юл да ҡайҙалыр юғалғандай булды, хәҙер нисек тә яҙлыҡмай барыуың хәйерле. Баш осомдан ҡанаттарынан ағылған ел тауышын ныҙғыртып-ишеттереп, төнгө ҡош оҙатып бара башланы, өкөмө был, әллә ябалаҡмы - белмәҫһең. Ҡарурманда ҡоралһыҙ йөрөргә ярамағанлыҡтан, берҙән-бер һаҡланыу ҡоралымды - кеҫәмдәге бәкемде ҡапшап-ҡапшап алам, бәләһенән баш-аяҡ, һәр минутта әҙер булыу кәрәккәс, бәкенең ҙур асмаһын асып, ҡулыма тотоп алдым. Һабыр менән Шәмсетдин араһы таулы юл булғас, беленмәһә, бында бер ни тиклем ваҡыттан аяҡтарыма мәте йәбешә, көсөргәнеп атлауҙан арҡа буйым дымланды. Үҙ-үҙемде дәртләндереү маҡсатында яратҡан йырымды мөңрәп алдым:

*Юлдар, юлдар, инде нисә йылдар,*
*Айырыла алмам һеҙҙән мин...*

Ярай әле бер ни тиклем ваҡыттан юл тау түбәненә ҡарай китте, тағы ла бер сәғәт тирәһенән көн яҡтыра төшкәс, ҡаршымда бейек ҡарағайҙарҙың юғарылағы киртләстәре күҙемә салынды, йылға шауын ишеттем, әһә, был Бараҡал йылғаһы, малайҙарҙың һөйләүенә ҡарағанда ул Һаҡмарға ҡарағанда киңлеге күпкә бәләкәй һәм ҡеүәте ҡайтыш, ярҙары беҙҙәгеләй ҡабра ла, текә лә түгел икән, шулай булғас, яҡты-күҙҙә йылғаны аша сығыуы артыҡ мәшәҡәт тыуҙырмаҫ. Яҡынланым да, күргәнемдән юғалыңҡырап ҡалдым, бәләкәй йылға тигәндәре ныҡ ташып китеп, эргәһендәге асыҡлыҡтарҙы, болондарҙы күмеп йәйрәгәйне. Бына бәлә, бынан аша сығыуы мөмкин булмаған эш, эҫе мәлендә кире боролорға ғына ҡала. Аптырауға ҡалып, яр ситенә барып ултырҙым. Ныҡ иртә булһа ла, бәлки, кисеү тапҡырына берәй тәгәрмәсле техника яҡынлар? Күпме генә һағайып тыңлаһам да мотор тауышы ишетелмәне, өңөлөп төбәлгән һүрәнке ҡарашымды фаралар яҡтыртманы.

Файҙаһыҙ һәм оҙаҡ ҡына көттөм. Аяғөҫтө баҫып, яр буйын кәлепләп йөрөп тә алдым. Әгәр кире боролһам - еңеләм, беренсе ҡыйынлыҡтан шөрләйем, ҡаршылыҡтан ҡасам. Ошондай хәлдә ҡалыуымды бер кемгә һөйләмәҫмен дә хатта, әммә бирешеп, бирелеп артҡа сигенеүем оҙаҡ хәтеремә уйыласаҡ, эсемде күмһетәсәк, йәнемде ағыулаясаҡ. Улай тиһәң, ниңә шул саҡлы төшөнкөлөккә бирелергә, теге яҡтағы яр үҙенә саҡырып, күренеп тора ла баһа, киң тигәндә лә ун биш, егерме метрлыҡ ара. Яртыһына еткәнсе тәрән дә түгелдер әле, һыу муйындан юғарыға үрләһә, биш-алты метр йөҙөп барһаң, аяҡтар тағы ла йылға төбөнә баҫыр.

Һалҡынлыҡты тойоп күнегер өсөн биттәремде ҡулдарымды сайып алдым. Боҙло һыу тәнемде бешерҙе. Ни булһа ла булыр, тәүәкәлләнем, кейемдәремде һалып та тормаҫтан, һыуға төшөп аҙ ғына алға киткәйнем, иреп бөтмәгән йылғаның төбө боҙ икән дә баһа, һеүән ташҡын минең аяҡтарымды салып йығып, юнысҡылай эләктереп алды ла күбекле ҡосағына ҡарманы. Бер ни тиклем ваҡыттан тәнемдең ҡорошоп өшөүен тойҙом, мамыҡлы һырмам һыу һеңдереп, ҡуңыстарына һыу тулған итектәрем ташлай ауырға әйләнеп, мине төпкә ҡарай тарта башланы. Бер нисә тапҡыр һыу йотоп сәсәп алдым, әммә нисек тә өҫтә ҡалырға тырышып, ҡоластарымды йәйеп йөҙөп маташам. Йылға мине юғары тиҙлекле ағымының уртаһына төшөрөп алып, аҫҡа ҡарай өҫтөрәне, бындай барыш менән барһа, тағы ла бер аҙҙан ағын ташҡы, ажарланып, ташлы ҡаяларға барып бәреләсәк, ул саҡта ҡотолор юл, арҡаланыр сара ҡалмаясаҡ.

Хәлем насарайғас, салҡан әйләнеп ятып, ҡул-аяҡтарымды тарбайттым, ошолай иткәндә бер аҙға ғына өҫтә ҡалып ҡырталашырға мөмкин. Күҙҙәрем бер аҙға ғына яңы офоҡтан күренгән ҡояшты күрҙе, уның түңәрәгендә әсәйемдең борсолоулы йөҙө сағылғандай итте. Әгәр мин ошонда батып үлһәм, ул ҡалайтыр, кемгә таяныр, кемгә ышаныр, кемгә ҡарап өмөтләнер? Ошо асырғаныулы уй тәнемә көс-ҡеүәт өҫтәгәндәй итте, тәнемә һылашҡан, төймәләре эленмәгән һырмамды ауырлыҡ менән һыпырып ырғытып, тыңламаған, һенағастай ҡатҡан ҡулдарымды мәжбүр итеп, аяҡтарымды мөмкинлектән сығып тыпырсытып йөҙөргә тотондом, һәм ҡулым көтмәгәндә һыуға эйелгән тал ботағын һәрмәне һәм уны арҡандай тартып, ярға ҡарай ынтылдым. Ауырлыҡ, көс-хәл менән шыуышып сыҡтым да, хәлһеҙләнеп, күҙҙәремде йомдом, хатта йоҡлағандай, мәрткә киткәндәй итеп ойота ла башланы, әйтерһең дә, йәнем тәнемдән айырылды. Ана бит, керһеҙ саф йәнем баш осонда мине ситтән күҙәтеп аҫылынып тора. Әллә ҡайҙан, аҡ томан эсенән Алғыр, Аҡбикә, әсәйем, тукал һыйырыбыҙ, биш баш кәзә-һарыҡтарыбыҙ эйәртенешеп килеп сыҡтылар ҙа мине йыуата башланылар: әсәйем йылы-йомшаҡ ҡулдары менән ыуа, ҡалғандар иһә, ҡытыҡты килтереп, ҡытыршы телдәре менән ялай. Шулай хәл-торошомдо ипкә килтерҙеләр ҙә теҙелешеп алып, минең тирәләй әйлән-бәйлән әйләнергә керештеләр. Бер аҙҙан, тегеләрҙең дәртле, күңелле тамашаһын күҙәтә торғас, юғарыла аҫылынған йәнем ҡабаттан тәнемә килеп ҡушылды, бына быныһы һәйбәт, ни тиһәң дә уларҙың бергә булыуҙары, бергә ҡалыуҙары, берегеүҙәре яҡшы.

Салҡан әйләнеп, муйынымдағы бетеүемде һәрмәнем. Урынында, тимәк ҡотом мине ташлап китмәгән, бәлки, ул мине-бәлә ҡазаға юлыҡтырмай, был яҡ ярға алып сыҡҡандыр ҙа әле, кем белә. Һалҡын һыу һырғалаған түбәмде, сикәләремде усым менән һыпырҙым. Кепкам әрәм булды, кейерлек ине әле. Ярай, бәлә түгел, иң мөһиме - кепка һаҡлаған башым урынында. Тәүге тапҡыр күргәндәй, иртәнге шәфәҡ ҡыҙғылт нурҙарға мансыған тау һырттарына, ағас баштарына, төпһөҙ күккә баҡтым.

Өҫтөмә ҡаҙандай түңкәрелгән зәңгәр сатыр ҡарашыма һыйғас, бәләкәй, һәм шул уҡ ваҡытта тотош Йыһанды, Айҙы, Ҡояшты үҙенең эсенә һыйҙырғас, иҫ китмәле ҙур ҙа, һәм ул - мәңгелек. Шул мәңгелек - зәңгәр күҙҙең иғтибарлы ҡарашына беҙ, төрлө яҙмышлы әҙәм балалары, һыйғанбыҙ. Кеше был донъяла яңғыҙы көн итә алмай, береһе икенсеһенә терәк һәм таяныс, кеше кешегә арҡалы. Теге саҡта әбейҙәрҙең әйткәне ҡолағымда яңынан яңғырап киткәндәй итте: "Атайлы бала - арҡалы бала..." Мине арҡаһыҙ, тип әйтергә иттеләрме икән? Арҡалымын ул, яҡындарым эргәлә, йәнә үҙемә -үҙем арҡалымын, шулай булмаһа, боҙло ташҡынды еңер инемме? Әле лә арҡам менән ер ҡыртышын, төпкөлдән килгән ер йылыһын тоям.

Күпмелер шулай онотолоп ятҡас, тәнемде һыу түгел, иртәнге ел өшөтөүен тойҙом. Ирекһеҙҙән түш кеҫәмдә ҡапшағандай иттем, ҡайҙа инде, бәкем дә, теге шырпым да ағып китте бит. Әкрен генә тороп ултырып, итектәремә тулған һыуҙы түктем, сылғауҙарымды, күлдәгемде, салбарымды һығып кейҙем. Тумбыҡҡан балтырҙарыма, биттәремә һуҡҡылап алдым, көүҙәмдәге ағзаларҙы теүәлләгәндәй итеп, түшемде ыуҙым, ҡул һыртым менән йөшле күҙҙәремде ҡороттом. Барыһы ла урынында һымаҡ. Былай тырпырарға ярамай, юғиһә, тере килеш ҡатып ҡалыуың бар. Ауырлыҡ менән ҡалҡынып, уңға-һулға болғанлап, йүгерә-атлай ҡаршылағы күренгән текә тау һуҡмағынан юғарыға ҡарай киттем. Тештәрем тешкә теймәй шаҡылдайҙар, быуындарым ҡалсылдай, башымда буталсыҡлы уйҙар сыуала: "Минең ошолай һине күрергә тип китеп барғанымды һиҙәһеңме икән, атай? Белмәйһеңдер, белһәң мин иҫ белмәҫ үк ят ояға йомортҡаһын һалып ҡасҡан моңһоҙ кәкүктәй ташлап сығып олаҡмаҫ инең... Мин кем һинең өсөн, ят бауыр бары!.. Бына бер килеп өйләнермен, әммә ғаиләмә, балаларыма һис ҡасан хыянат итмәм. Яҡындарыңа күрһәтелгән хыянат кисерелмәй ҙә, ғәфү ҙә ителмәй. Һиңә һуғышта батыр алышҡаның өсөн түшеңә орден ҡаҙағандар, ә тормош яланында ҡылғандарың өсөн ниндәй баһаға лайыҡ һин?.. Өндәшмәйһеңме?"

**(Дауамы. Башы 41-43-сө һандарҙа).**

АФАРИН!

**Әлеге мәлдә Сибай драма театры алдында өс афиша эленеп тора. Өсөһөнән дә сибайҙар өсөн үтә лә таныш йөҙ бага. Беренсеһенән, Флорид Бүләков пьесаһы буйынса ҡуйылған "Их, күгәрсенкәйҙәрем!" спектаклендәге Абдулла ҡарт ҡарай. Әкиәттәге принц кеүек, ҡарттар йортонда йәшәгән әбейҙәр араһынан үҙ Золушкаһын эҙләгән был бабай образын тамашасылар бик яратып ҡабул итте. Шулай булмай һуң, ул йәшәү йәмен юғалта барған әбейҙәргә йән өрә, быны күргән тамашасылар ҙа спектаклдән яңы көс алып ҡайталар. Икенсеһенән Туфан Миңнуллиндың "Әлдермештән Әлмәндәр" әҫәрендәге туҡһанды уҙһа ла йәшәүҙән туймаған Әлмәндәр бабай ҡарай. Өсөнсөһөндә тәүге ике образды тыуҙырыусы актер үҙе ҡарап тора. Сәстәре салланһа ла, йөҙө, ҡарашы һаман да йәштәрсә, ҡиәфәтендә рухи көс сағыла.**

# ЯҘМЫШ ТАМЫРҘАРЫ БИК ТӘРӘН



Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Риф Сәйфуллин үҙенең 75 йыллыҡ юбилейын билдәләй. Бағы афишалар ана шул тантананың тышҡы сағылышы ғына. Ситтән килгәндәр афишалағы рәсми мәғлүмәтте күрмәһә, ышанмаҫтар ҙа, сөнки паспорттағы йәш фотолағы дарманға һис тә тап килмәй. Кем белә инде, уйнаған персонаждары актерҙы йәшәртәме, әллә ул үҙе персонаждарына дарман өҫтәйме? Бәлки, был ике яҡ үҙ-ара килешеп йәшәйҙер, бик күптән йөҙәрләгән образдар аша халҡына хеҙмәт итәләр. Улар араһында геройҙары ла булған, драматик, трагик характерлыларҙы ла урап үтмәгән, шаяндары ауыҙ йырған, артистың оҫталығы арҡан, уйнау диапазоны киңәйгән.

Өсөнсө афишала нәҡ ана шул тәжрибәле актерҙы күрәбеҙ.

Уны күптәр белә, ярата, һоҡлана, Сибай ҡалаһының айырылғыһыҙ өлөшөндәй ҡабул итәләр. Ысынлап та, Риф Ғәле улы урам буйлап үтһә, уны һис кем менән дә бутап булмай. Был уның матур итеп кейенә белеүенән, һәрбиҙәрсә көҙҙәһен тура тотоп ышаныслы аҙымдар менән етеҙ атлап йөрөүенән генә лә килмәй. Бөтә ғиллә артистың күҙгә күренмәгән рухи көсөнән киләләр. Тәү ҡарамаҡҡа, ул ҡырыҫыраҡ, хатта уҫал һымағыраҡ та күренә. Был алдаҡ һынамыш уның үҙенә үтә ныҡ талапсан булыуынан, һәр эшкә яуаплы ҡарауынандыр. Риф ағайҙы яҡшы белгәндәр иһә, уның тәртипле, ихтирамлы, иғтибарлы интеллигент икәнен беләләр.

Рәсәй кимәлендә ҙур дәрәжәләргә өлгәшкән актер Архангел районы Муллаҡай ауылында тыуып үҫә. Бала сағынан сүкеш-балта, бысҡы-мажар ҡулынан төшмәй, ауылдағы ҡырылмаһа ҡырҡ эште энәһенән-ебенә тиклем белә. Башланғыс белемде тыуған ауылында ала. Уҡыуға ул алты йәше тулмаҫ элек бара һәм Абҙан мәктәбендә урта белем тураһында аттестат алғанда ул алтыһы ла тулмаған була. Кешене яҙмыш йөрөтә, тибеҙ, ашар ризығың ҡайҙа тәғәйен, һин уны нәҡ шул урында ашайһың. Үсмер йәшенә еткән Риф ағаһына эйәреп, Себер тарафтарына юллана. Бында ул токарь һөнәрен үҙләштерә, исеме лә булмаған, һан буйынса ғына атап йөрөтөлгән биклә ҡалала хеҙмәт юлын башлай. Эш хаҡы ауылдағы менән сағыштырғанда ике тапҡырға күберәк, магазиндар дефицит тауарҙар менән лыҡа тулы. Ошонда ул күңеле теләгәнсә матур итеп кейенергә өйрәнә. Үҙе әйтеүенсә, эш кейемдән булыуында түгел, теләһә ниндәй кейемде матур итеп кейергә була. Риф Ғәле улы бөгөнгәсә ана шул принцибынан ситләшмәй.

Бала саҡтан атаһы кеүек хәрби кеше булырға хыялланған Риф Томск ҡалаһына барып, Ленинградтағы юғары хәрби инженер училищеһына имтихандар тапшыра. Ләкин 39-сы йылда уҡ Хәсән күле янындағы һуғышта ҡатнашҡан, Бөйөк Ватан һуғышынан күп йәрәхәттәр алып ҡайтҡан атаһы улының теләгенә ҡәтғи рәүештә ҡаршы була. Рөхсәт һорап яҙған хатына атаһы яуап итеп, ҡыҫҡа ғына телеграмма ебәрә: "Ни в коем случае!". Нимә был? Яҙмыш ҡушыуымы, әллә атай кешенең улында башҡа һәләттәр барын алдан тойомлауымы? Риф бит бәләкәй сағында радиоалғыс эргәһенән китешмәй, радиоспектаклдәр тыңларға ярата. Күп балалы ғаиләлә берәүҙең дә спектаклдәргә иҫе китмәй, ә Рифте бәйләп ҡуйғанһыңмы ни, бер нәмәгә иғтибар итмәй, персонаждарҙың һәр һүҙен йотлоғоп тыңлай.

Шулай килеп сыға ла. Отпускаға ҡайтҡанында Өфөлә яңы ғына асылаҫаҡ сәнғәт институтына документтарын тапшыра. Әлегә ул әртис төшөнсәһен сәхнәлә йырлапбейеп йөрөүсе һымаҡ ҡына күҙаллай. Тәүге имтиханға иртә менән килә ул. Ғөмүмән, был Риф Ғәле улының төп һыҙаттарының береһе. Уҡыған ваҡытта ла, эшләгәндә лә, ғүмерҙә лә һуңлағаным булманы, ти ул. Ярай, килә ваҡытынан алда. Бәхетенә, уның кеүек тағы бер иртә йөрөүсе бар икән. Был егет Олег Ханов булып сыға. Танышалар. Танышлыҡтары ғүмерлек дуҫлыҡҡа әйләнә. Дүрт турҙы ла уңышлы үтеп, курсташтар булып китәләр. Ә бит ул ваҡытта яңы асылған институтҡа абитуриенттар бөтә СССР-ҙан йыйылған була.

Актер һөнәрен үҙләштергәс, Риф Ғәле улына Өфөлә ҡалыу мөмкинлеге була, әммә ул Сибай театрына эшкә килә, сөнки тормош иптәше Рәмилә бында эшләгән була. Театрға йыш килеп йөрөгәс, коллектив менән дә күптән таныш. Килеү менән администратор булып, гастролгә сыға, шунда уҡ актер булып төп ролдә уйнай башлай. Һәм шунан бирле ул Мөбәрәков исемендәге театрға тоғро хеҙмәт итә.

Нимә был? Яҙмышмы? Әллә актерҙың һәрбиҙәрсә коллективҡа тоғролоғомо? Үҙе әйтеүенсә, ул бер ваҡытта ла ролһеҙ булмаған, йөҙәп йөрөп уйнаған, үҫешкән, камиллашҡан. Ә камиллыҡтың сиге юҡ! Тимәк, алда халыҡ артисын яңы үрҙәр, асыштар көтә.

Ғаиләһенә килгәндә, улы Азамат та, ҡыҙҙары Айһылыу ҙа сәнғәт юлын һайлаған. Актер, режиссер һөнәрле улы Башҡортостан телевидениеһында эшләй. Айһылыу, Халыҡ-ара, Бөтә Рәсәй музыкаль конкурстары лауреаты, бөгөнгө көндә Санкт-Петербург филармонияһы симфоник оркестрында примаскрипкасы дәрәжәһенә еткән.

Был дәрәжәләрҙең, сәнғәткә булған һөйөүҙең инеше Архангел районы Муллаҡайҙан башлана түгелме? Юҡтыр. Күпкә төптәнерәктәндер, рухи тәрәнлектән, милли асылдан, Тыуған илгә һәрбиҙәрсә тоғролоҡтан, ҡандан башланалыр. Риф Ғәле улының атаһы башҡорт халыҡ йыры "Сибай"ҙы юғары тенор менән бик аһәңле башҡара торған булған. Яҙмышмы был? Яҙмыштыр. Сөнки яҙмыш тамырҙары бик тәрән. Халҡыбыҙҙың үткәндәре - мәңгелек, киләсәге лә...

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

## ҠОНШАҠ БАШҠОРТТАРЫ

**Ошо көндәрҙә Силәбелә "Ҡоншаҡ районының күренекле башҡорттары" китабының исем туйы уҙҙы. Был хаҡта Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә.**

Был - Көньяҡ Уралда билдәле журналист, яҙыусы һәм йәмәғәт эшмәкәре Мөхәмәт Хәбировтың Ҡоншаҡ районының данлыҡлы башҡорттары тураһында тәүге китабы. Автор бар ғүмерен башҡорт мәҙәниәтен, этнографияһын, фольклорын өйрәнеүгә арнаған. Силәбелә уҙған исем туйында тыуған яҡты өйрәнеүселәр, яҙыусылар, этнографтар: Әлфир Байымов, Варис Сиражетдинов, Михаил Воронов, Сәлиә Сафиуллина, Рәшит Хәкимов, Владислав Камалов ҡатнашты.

Китаптың инеш һүҙендә профессор Ханахмед Гюлов былай тип яҙа: "Башҡорттар мине үҙҙәренең ихласлығы һәм боронғо бай тарихы менән ғорурланыуы менән арбап алды. Ҡоншаҡ районы - Башҡорт ере... Рәсәйҙә генә түгел, унан ситтә лә билдәлелек яулаған эшмәкәрҙәр Әбделҡадир Инан, Ҡадир Даян, Ҡадир Тимерғәзин, Эмма Тимерғәзинаның тыуған ере ул. Барыһын да һанап бөтөп булмай. Ошондай бай мираҫтың районға ҙур ҡыҙыҡһыныу уятыуы ғәжәп түгел".

Китапҡа Ҡоншаҡ районының XX быуатта йәшәгән танылған шәхестәре хаҡында 20-нән ашыу очерк ингән.

## ҺЫЛЫУЛЫҠТА ЯРЫШАЛАР ҘА...



**Красноярскиҙа XVIII "Азия - Себер 2024" милләт-ара һәләт һәм матурлыҡ конкурсына йомғаҡ яһалды.**

М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультетынан Айзилә Буранова гүзәллек конкурсы еңеүсеһе тип танылды һәм "Азия - Себер һылыуҡайы 2024" исеменә лайыҡ булды. Айзилә конкурста башҡорт милли мәҙәниәте менән таныштырҙы. Сибәр ҡыҙ бала саҡтан йыр-бейеү, һүрәт төшөрөү һәм ҡул эштәре менән шөғөлләнә, башҡорт хоккейы көйәрмәне, 2022 йылда - Башҡорт дәүләт педагогия университетының беренсе вице-мисс, 2023 йылда иһә "Башҡортостан гүзәле"нең беренсе вице-мисс исемен яулаған.

Айзиләнең тормош кредоһы - "Үҙеңә ышан, һәм бар хыялдарың тормошҡа ашыр!" Айзилә әйтеүенсә, уның ғаилә традициялары - мөхәббәт, бер-береңде аңлау һәм бәхет. Балаларҙы яратыу, ололарҙы ихтирам итеү, ата-бабаларға хөрмәт - башҡорт мәҙәниәтенең һәм йолаларының нигеҙе булып тора. Ошондай конкурстарҙа ҡатнашыу үҙеңдең көсөңдө һынап ҡарарға һәм һәләтеңде күрһәтергә мөмкинлек бирә.

## ЯНЫБАЙ ХАММАТОВҠА...

**2025 йылда Башҡортостанда Яныбай Хамматовтың 100 йыллығы билдәләнә. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тейешле указға ҡул ҡуйҙы. Ойоштороу комитеты составын республика Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы Урал Килсенбаев етәкләй. Ойоштороу мәсьәләләре менән мәҙәниәт министрлығы, милли китапхана, милли музей, Яҙыусылар союзы һәм "Китап" нәшриәте вәкилдәре лә шөғөлләнә.**

Яныбай Хамматов 1925 йылдың 16 ғинуарында Белорет районының Исмаҡай ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Инйәр урта мәктәбендә уҡый, йәйге каникулдарҙа алтын йыуыу приисктарында эшләй, шунда старателдәрҙең ауыр тормошо менән таныша. Ата-әсәһенән һәм ауылдаштарынан Граждандар һуғышы осоронда Белорет ерендә булған фажиғәле хәл-ваҡиғалар тураһында күп ишетә. Ҡыҙыҡһыныусан егеттең ул саҡта уҡ ошо турала яҙырға теләге тыуа. 1942 йылдың авгусында Яныбай Хамматов Ҡыҙыл Армия сафына саҡырыла һәм Һарытау өлкәһенең Вольск ҡалаһына әҙерлек үтергә ебәрелә. 1942 йылдың аҙағында бомбаға тотоу ваҡытында ауыр контузия алғас, ярты йылға яҡын госпиталдәрҙә дауалана. Һуңынан Орскиҙа кесе авиация белгестәре мәктәбен тамамлай. Хәрби ҡаҙаныштары өсөн II дәрәжә Ватан һуғышы ордены һәм күп миҙалдар менән бүләкләнә. 1946 йылда яуҙан ҡайтҡас, Әүжән алтын приискыһында эшләй, район гәзитендә мәҡәләләрен һәм шиғырҙарын баҫтыра. Шунда уҡ уның старателдәр тормошо тураһында беренсе хикәйәһе донъя күрә.

Яныбай Хамматов - егермегә яҡын роман, тиҫтәләгән повесть һәм хикәйәләр авторы. РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. Яныбай Хамматов 2000 йылдың 28 сентябрендә донъя ҡуйған һәм Өфөлә ерләнгән.

✓ *Йәмғиәттә ирҙең буйы ҡатынының ына ҡарағанда бейегерәк булырға тейеш, тигән ҡанун йәшәй. Был айырма күпме булырға тейеш? Ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәре иҫәпләүенсә, ир-егет яҡынса 20 сантиметрға бейек булырға тейеш.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЯҘМЫШЫҢ... буйыңа ла бәйлеме?

■ Һәр ваҡыт нимәнелер онотаһығыҙмы? Улай булһа, һеҙгә розмарин кәрәк. Нортумбрия университеты психологтары розмариндың баш мейеһе эшмәкәрлегенә ыңғай тәьҫирен асыҡлаған. Һынауҙарҙа 66 кеше ҡатнашҡан. Уларҙың яртыһын розмарин еҫе аңҡып торған бүлмәгә, ҡалғандарын ябай бүлмәгә урынлаштырғандар. Бөтөн ҡатнашыусылар ҙа хәтер үҫенсәлектәрен өйрәнеүсе бер нисә тест яҙған. Һөҙөмтәлә, розмарин еҫен еҫкәүселәр тест һорауҙарын 60-75 процентҡа яҡшыраҡ үтәгән. Ғалимдар аңлатыуынса, розмаринда 1,8-цинеол тип аталған берләшмә бар. Ул хәтер нигеҙендә ятҡан химик системаға тәьҫир итә. Мәсьәләләрҙе тиҙерәк сискән кешеләрҙең ҡанында тап ошо берләшмәнең концентрацияһы күберәк булыуы асыҡланған да инде.

■ Йоҡоһоҙлоҡ менән нисек көрәшергә белмәйһегеҙме? Ғалимдар әйтеүенсә, тиҙ генә йоҡлап китергә бесәй үләне төнәтмәһе (настойка валерианы) ярҙам итәсәк. Быны ң өсөн уны эсергә түгел, ә еҫкәргә кәрәк. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, был осраҡта ул егерме тапҡырға тиҙерәк һәм яҡшыраҡ тәьҫир итә. Шулай итеп, әгәр ҙә йоҡлай алмайынса йонсоһағыҙ, йоҡларға ятыр алдынан бесәй үләне төнәтмәһе еҫкәгеҙ. Тын алыу тәрән түгел, әммә яй булһын. Артыҡ тырышып ташларға ла ярамай, был осраҡта башығыҙ ауыртасаҡ. Бындай терапияны 4 айға тиклем дауам итергә була. Бер айҙан һуң үҙегеҙҙә ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр тоясаҡһығыҙ, йоҡоғоҙ ғына түгел, йөрәк эшмәкәрлеге яҡшырасаҡ, ҡан баҫымы йәйләнәсәк.

■ Ҡыҙҙырылған майҙа әҙерләнгән ризыҡтарҙы, шул иҫәптән, фри картуфы, чипсы, ҡыҙҙырылған тауыҡты йыш ашау һәр кешенең, бигерәк тә ир-егеттәрҙең сәләмәтлегенә кире йоғонто яһай. The Prostate баҫмаһы яҙыуынса, аҙнаһына бер тапҡыр ғына бындай аҙыҡ ашаған ир-егеттәрҙә простата яман шеше хәүефе 30-37 процентҡа күтәрелә. Ғалимдар әйтеүенсә, ҡайнаған майҙа әҙерләнгән ризыҡ ашау һәм яман шеш барлыҡҡа килеү араһындағы бәйләнеш барлығын белдереүсе бер иренсе асыш. Тикшеренеүҙең етәксеһе доктор Джанет Стэнфорд аңлатыуынса, был бәйләнештең көсө майлы ризыҡ ҡулланыуҙың йышлығынан тора.

■ Йәмғиәттә ирҙең буйы ҡатынының ына ҡарағанда бейегерәк булырға тейеш, тигән ҡанун йәшәй. Был айырма күпме булырға тейеш - ғалимдар ошоно асыҡлап ҡараған. Ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәре иҫәпләүенсә, ир-егет яҡынса 20 сантиметрға бейек булырға тейеш. Ә көслө зат өсөн буйҙағы айырма 8 сантиметр булһа, шул еткән. 50 мең кешенән идеаль буй тураһында һорау алыу күрһәтеүенсә, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн иң ҡулайлы буй тип - 173, ирҙәр өсөн 188 сантиметр иҫәпләнә. Статистика күрһәтеүенсә, күпселек парҙарҙа ирҙәр ҡатындарынан бейегерәк - 92,5 процент. 4 процент парҙарҙа ҡатыны бейегерәк, ә 3,5 процент осраҡта ир менән ҡатындың буйы бер тигеҙ. Әйткәндәй, яныраҡ Гэллапа институты хеҙмәткәрҙәре асыҡлауынса, кешенең буйына ҡарап, уның яҙмышы нисек булыры ла билдәләнә. Уртаса буйҙан (ирҙәр өсөн - 177, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн 162,6 сантиметрҙан юғарыраҡ) бейегерәк булыусылар үҙҙәрен күпкә бәхетле, уңышлы һәм күңеллерәк тоя.

ХӘТЕРЛӘП...

**7 октябрҙә арҙаҡлы милләттәшебеҙ, күренекле йәмәғәт эшмәкәре, Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының халыҡҡа көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү буйынса атҡаҙанған хеҙмәткәре, хеҙмәт ветераны, "Ғәлиә" химик таҙартыу предприятиеһының элекке генераль директоры Фәсхетдинова Рәйлә Ғариф ҡыҙы оҙаҡ ауырыуҙан һуң 78 йәшендә арабыҙҙан китеп барҙы.**

**2014 йылда күренекле яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ғәлим Хисамов менән берлектә "Башҡортостандың аҫыл заттары" серияһында уның хаҡында "Рәйлә Фәсхетдинова" тигән документаль повесты китап итеп баҫтырғайныҡ. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында совет осоронда төҙөлгән барлыҡ предприятиелар замана һынауын күтәрә алмай ябылған, юҡҡа сыҡҡан саҡта "Ғәлиә" химик-таҙартыу предприятиеһы Италияның "Фирбиматик" фирмаһы технологияһы һәм ҡоролмалары нигеҙендә Халыҡ-ара ИСО 9001 - 2000 сифат менеджменты ала, "Башҡортостандың иң яҡшы тауарҙары", "Рәсәйҙең иң яҡшы 100 тауары" конкурстарында еңеүсе була. Тап ошо кимәлгә күтәрелеү генә уға Европаның химик таҙартыу ассоциацияһына инеү хоҡуғы бирә. "Ғәлиә" Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда халыҡҡа хеҙмәт итеүсе иң яҡшы предприятие булып китә. Рәйлә Ғариф ҡыҙының вафатына 40 көн уңайынан шул китаптан бер өлөш тәҡдим итәбеҙ.**

# УЛ ЙЫРЛАРҒА ЯРАТТЫ...



## Юл саттарында

Рәйлә Ғариф ҡыҙының тормош юлын күҙ алдынан үткәргәндә беҙ юл саттарына йыш барып төртөләбеҙ. Ғөмүмән, уның бәләкәйҙән атаһы менән әсәһе кеүек йырға, халыҡ ижадына булған һөйөүе ҙур сәнғәт юлына алып килеренә лә ишаралай. Әммә был йәһәттән ҡыҙ үсмер сағында уҡ һынылышлы аҙым яһай һәм шул йүнәлеш Рәйлә Фәсхетдинованы беҙ бөгөн белгән "Ғәлиә" химик таҙартыу предприятиеһы генераль директоры вазифаһына алып килә лә инде. Рәйлә Ғариф ҡыҙы тормошоноң был мәлдәре хаҡында түбәндәгесә хәтерләй:

- Атайыбыҙ бөтә кеше менән дә уртаҡ тел таба белгән. Ярҙамсыл булған, барыһына ла хәленән килгәнсе ҡул һуҙырға тырышҡан. Беҙ уның "Уҡырға!" тигән васыятына тоғро ҡалдыҡ. Әсәйебеҙ ҙә беҙҙән шуны талап итте. Беҙҙең Әптек ауылында дүрт кенә йыллыҡ башланғыс мәктәп булғас, абзыйым унынсыны 18 саҡрымдағы Әткол мәктәбенә йөрөп тамамланы. Апайым артабан Әхмәр урта мәктәбендә уҡыны. Мин етенсене Сәлих мәктәбендә тамамланым. Апайым етенсене бөткәс, һигеҙенсегә мине Өфөләге 1-се мәктәп-интернатҡа уҡырға ебәргәйне. Өйҙә иркәләнеп үҫкәс, ундағы шарттарға күнә алмай, бер йыл уҡыным да Өфөнө ташлап ҡайттым да киттем. Артабан класташтарым уҡыған Салауат профтехучилищеһының төҙөүселәр әҙерләй торған бүлегенә барып индем. Унда штукатур-маляр һөнәрен алғас, шул уҡ ҡалала төҙөүсе булып, хеҙмәт биографиямды башланым. Шулай итеп, мин үҙемдең яҙмышымды боҙҙом. Аҙаҡ Коканд ҡалаһындағы нефть техникумына барып индем...

Шуныһы ҡыҙыҡ, яҙмышының ошо һынылышлы мәлен иҫкә алғанда Рәйлә Ғариф ҡыҙы "яҙмышымды боҙҙом" ти, ә "борҙом" тимәй. Ә бит тормошта шулай ҙа була: ҡайны саҡтарҙа боҙоу - бороуға, бороу - боҙоуға тиң булыуы ла бар. Урынлы һорау тыуа: үҙебеҙҙә бөткәнме ни нефть техникумдары һәм институттары, ниңә ул фәҡәт Урта Азияға барып сыҡҡан һуң? Яуабы ябай ғына: еҙнәһен, нефть институтын тамамлағандан һуң, ул саҡта мәжбүри һаналған йүнәлтмә буйынса Урта Азияға ебәрәләр. Ул йылдарҙа бик күп башҡорт һәм татар Урта Азияны, бигерәк тә Ташкентты "икмәкле ҡала", "бәхет иле" тип атап, шул яҡтарға ағыла. Коканд ҡалаһына еҙнәһе менән апаһы артынан Рәйлә лә күсеп китә. Тик яңғыҙы түгел, ғаиләһе - ире һәм улы менән. Сөнки был ваҡиғаларҙан күпкә алдараҡ, Стәрлетамаҡта саҡта уҡ, Рәйләнең тормошонда тағы ла ҙурыраҡ үҙгәрештәр була. Ул белорус егете Иван Петрович Якута менән таныша һәм уға кейәүгә сыға.

Һуғыштан һуң тыуымдың аҙ сағы. Армияға һалдаттар ҙа етешмәй. Тап шул сәбәпле йәштәрҙе радиотелеграфист-радиотелефонист һөнәрҙәрен үҙләштерегә саҡырыуҙар йышая. Курсанттар офицер йорттарында йәшәй. Шул уҡыуҙарға һәм эшкә йөрөгән саҡта таныша йәштәр. Иван Рәйләгә бер күреүҙә ғашиҡ була. Ул ҡыҙ йәшәгән бүлмә янына килә лә, ишек янында баҫып тик тора. Белорус егете башҡорт ҡыҙын ябайлығы, кешегә һуңғы күлдәген һалып бирергә әҙер булған йомартлығы менән арбай.

Сәстәре-сәскә бәйләнгәс, белорус егете уны үҙенең тыуған яғына, Витебск ҡалаһына алып ҡайта. Ҡала янындағы ауылда йәшәүсе Ивандың ата-әсәләре уларҙы бик яҡшы ҡаршылай. Улар Витебскиҙа ҡуртымға алынған фатирҙа йәшәй башлай. Шунда өлкән улдары Эдик тыуа. Күпме генә тырышып, эҙләп ҡарамаһындар, был ҡалала тормоштарын артабан яйлау, фатир алыу, яҡшы эшкә урынлашыу мөмкинлеген тапмай улар.

Отпускыға тип Башҡортостанға ҡайтҡан сағында Урта Азиянан Рәйләнең апаһы менән еҙнәһе лә ялға ҡайтып төшәләр. Рәйлә Ғарифулла ҡыҙының Урта Азияға сығып китеүе фәҡәт Витебскиҙа тормош шарттарын яҡшыртыу өсөн перспективаның булмауынан килеп сыға. Бында ла, әлеге лә баяғы, "юл саты" принцибы. Урта Азияла йәшәгәндә Рәйлә Ғариф ҡыҙы Коканд нефть техникумына уҡырға инә. Апайҙары Башҡортостанға ҡайтып киткәнсе ул техникумдың ике курсын тамамлап өлгөрә.

Артабан, һау бул, Урта Азия, аҡ мамыҡтар һәм эҫе йәйҙәр иле! Һаумы, Салехард! Тик Салехардмы? Тәүҙә улар Салехардҡа барырға ниәтләнә, унда йәштәргә фатир ҙа вәғәҙә итәләр. Улар әйберҙәрен дә шунда оҙатып хатта һәм унда киткәнсе Белоруссияның Витебск өлкәһенә иренең тыуған ауылына ҡайтып килергә булалар. Тап шул мәлдә Ивандың Калининградта йәшәгән ағаһы ла ҡайтып төшә. Һүҙ артынан һүҙ сығып, ағаһы уларҙы Калининградҡа килергә өгөтләй һәм күндерә.

Йәштәр Салехардҡа ебәргән әйберҙәрен кире алдыртып, Калининградҡа юллана. Уларға был ҡала дөйөм ятаҡтан айырым бүлмә бирәләр. Шул бүлмәлә йәшәгәндә уларҙың ҡыҙҙары Лилиә тыуа.

Бәлки, Рәйлә Фәсхетдинованың тормошондағы ошондай әллә ни әһәмиәте булмаған бәләкәй деталдәргә иғтибар ҙа бирмәҫкә мөмкин булыр ине. Әммә бында уның артабанғы яҙмышы, әлеге лә баяғы - "юл саты" принцибы хәл итәлә. Юлдың бер сатында - Салехард, икенсеһендә - Калининград. Әммә барлыҡ юлдар ҙа тыуған яҡҡа илтә...

## Париждарҙы яулау еңелерәк...

1973 йылда Якуталар ғаиләһе Башҡортостанға ҡайта. Ҡайҙа ғына барһаң да, иң тәүҙә йәшәр урын, фатир талап итәлә бит инде. Был маҡсатҡа ирешер өсөн улар Советтар Союзының әллә нисәмә урынында булырға өлгөрә. Барыбер ҙә, ҡаҡһа ла, һуҡһа ла, тыуған яҡҡа ни етә! Әмәлгә ҡалғандай, Рәйләнең Дәүләт именлеге комитетында эшләгән ағаһы Наилды ғаиләһе менән биш йылға Германияға ебәрәләр. Үҙҙәренә фатир юллағансы, уларҙың фатирында ла йәшәп торорға була. Улар үҙ янына йәшәргә ауылдан Рәйләнең әсәһен дә алып киләләр. Шул арала Рәйлә Кокандтағы уҡыуын да дауам итә, сессияларға йөрөп, имтихандарын тапшырып, диплом алыуға өлгәшә.

Был ваҡытта инде ул аҙаҡ барлыҡ тормошоноң оло мәғәнәһенә әүерелер тармаҡта - химик таҙартыу предприятиеһында эшләй башлай. Предприятиеның генераль директоры уларға ике йылдан фатир бирергә вәғәҙәләй. Вәғәҙәгә бер, ике... биш йыл үтеп китә. Был ваҡытта инде Наил ағаһы Германиянан оҙайлы командировканан ҡайтып төшә, ә былар инде ике бала менән урам ҡыҙырырға мәжбүр.

Якуталар ғаиләһе билдәһеҙлек алдында ҡала. Билдәһеҙлек яңғыҙлыҡ кеүек үк ауыр халәт. Уны кисергән кеше генә аңлай, белә. Ире Рәйләгә Норильск ҡалаһына эшкә һәм йәшәргә китергә тәҡдим итә. Ишетеүенсә, унда фатирҙы ла шундуҡ бирәләр, эш хаҡы ла яҡшы икән. Ҡыҫҡаһы, улар ул мәлдә шул ҡалаға барһалар, йәнәһе, бер юлы барлыҡ мәсьәләләрен дә хәл итәләр булып сыға.

Тағы ла "юл саты"нда тороп ҡала Рәйлә Ғариф ҡыҙы. Билдәһеҙлеккә китергәме, әллә Өфөлә тороп ҡалырғамы? "Әллә Бохар китергә, әллә донъя көтөргә", тигән һымаҡ. Шул рәүешле күпме донъя ҡыҙырып йөрөргә була һуң?

Беҙҙең башҡорт кешеһенә донъялағы теләһә ниндәй ҡаланан да, теләһә ниндәй илдән дә ауырыраҡ шул Өфөнө яулауы. Париждарҙы яулау түгел шул Өфөнө

✓ ***Атай-олатайҙарыбыҙға Парижды яулауы күпкә еңелгә төшкәндер, бәлки? Уның ҡарауы, сит тарафтар башҡорттар тарафынан аңһатыраҡ яулана. Әллә сит яҡтың түрәләре башҡорт кире тыуған яғына ҡайта күрмәһен тип юрый эшләй.***



алыу. Атай-олатайҙарыбыҙға Парижды яулауы күпкә еңелгә төшкәндер, бәлки? Уның ҡарауы, сит тарафтар башҡорттар тарафынан аңһатыраҡ яулана. Әллә сит яҡтың түрәләре беҙҙең халыҡтың вәкиле кире тыуған яғына ҡайта күрмәһен тип юрый эшләй быны. Хәйер, был һорауға әле лә яуап табылмаҫтыр.

Рәйлә Ғариф ҡыҙы оҙаҡ уйлап та тормаҫтан, тыуған яғында тороп ҡалырға ҡарар итә. Берҙән, ул ире менән бергә китһә, биш йыл буйы бер урында эшләп, фатирға сиратта торған лимитын юғалтасаҡ, икенсенән, тыуған яғына тартыу көсө уның ҡанына ата-олаталарының аманаты булып яҙылған. Ҡыҫҡаһы, ҡатын Өфөлә тороп ҡалып, ике балаһы менән химик таҙартыу предприятиеһында ҡуна-ятып эшләй башлай. Ире иһә, фатир һатып алыр өсөн "оҙон аҡса" эшләргә тигән маҡсат менән бер үҙе Норильскиға юллана. Ул был ҡалала оҙаҡ та эшләй алмай, яман шеш сиренә тарый.

Файҙалы ҡаҙылмаларҙы өйрәнеү буйынса геолог һөнәре ала Рәйлә Фәсхетдинова. Ҡулына дипломын алғас та, ул фәнни-тикшеренеү институтына бара. Уны эшкә алырға булалар. Тик был эше командировкаларға, йәғни нефть яткылыҡтары урындарын өйрәнеүгә бәйле булып сыға. Эдуардҡа - биш, Лилиәгә ике йәш. Оҙайлы командировкаларҙа уларҙы ҡайҙа, кемгә ҡалдырырға һуң? Тимәк, бындай хеҙмәт шарты уның диплом буйынса һөнәрен башҡарып йәшәү мөмкинлеген юҡҡа сығара.

Химик таҙартыу предприятиеһында эшләһәң, балаларың менән бергә булырға мөмкин.

Тәүҙә ул Өфөнөң Пархоменко урамындағы химик таҙартыу предприятиеһына өлкән ҡабул итеүсе булып эшкә урынлаша. Ике айҙан һуң уны ҡаланың Ленин, Киров, Дим райондарын, Совет районының яртыһын хеҙмәтләндереүсе участкаға алалар. Аҙаҡ, төрлө конкурстарҙа ҡатнашып, үҙ һөнәренең оҫтаһына әүерелгәс, 1980 йылда әле эшләгән урынға күсә.

Ҡыҫҡаһы, ошондай шарттарҙа Рәйлә Ғариф ҡыҙы химик таҙартыу предприятиеһына килеп юлыға. Бер яҡтан ҡарағанда, был хәл осраҡлы ла кеүек, әммә һәр бер осраҡлылыҡтың нигеҙендә законлылыҡтың да булғанлығын оноторға ярамайҙыр. "Юл саты" Рәйлә Фәсхетдинованы ғүмере буйы оҙата килә, тап шул ике, өс мөмкинлелектең иң ҡулайын һайлауы һөҙөмтәһендә беҙ донъя кимәлендә "Йыл директоры" дәрәжәһен яулаған Рәйлә Ғариф ҡыҙын беләбеҙ ҙә инде.

## Ҡатын-ҡыҙ етәксе

"Ҡатын-ҡыҙ һәм етәксе. Һеҙ ошо ике мөһим вазифаны нисек итеп уңышлы яраштыра алаһығыҙ?" - тигән һорауға "Гәлиә" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттең генераль директоры Рәйлә Фәсхетдинова шулай яуап биргәйне:

- Был ике төшөнсәне бер нисек тә ҡапма-ҡаршы ҡуйырға кәрәкмәйҙер, минеңсә. Балалары менән татыу, үҙ-ара аңлашыу таптан ҡатын-ҡыҙ, етәксе булған хәлдә лә, эшен тотороҡло ғаиләһе нигеҙендә ҡора алалыр. Балаларын ҡарап үҫтерә алмаған, енел-елпе, ялҡау ҡатын-ҡыҙ за аҙ түгел был тормошта. Ә бит ундайҙар яҡшы етәксе була алмай. Яҡшы ғына түгел, ғөмүмән, етәксе була алмай...

Етәксе тигәндә, беҙ һәр ваҡыт ниндәйҙер ойошманың, предприятиеһын етәксеһен күҙ алдына килтереп өйрәнгәнбеҙ. Балаларын тәрбиәләүсе һәр әсә лә шулай уҡ етәксе. Шулай уҡ һәр бер уҡытыусы ла, директор йә директор урынбаҫары булмаһа ла, шундай уҡ етәксе статусына эйә. Сөнки ул да атай-әсәне мәктәптә ваҡытлыса алмаштырып тороусы тәрбиәсе. Бында уҡытыусы менән атай-әсәләрҙең бер-береһен аңлап эш итә белеүе тәрбиәнең һыңғай һөҙөмтәһенә килтерәсәк.

- Балаларым мәктәптә уҡыған ваҡытта ла төрлө хәлдәр булды: күреп торам, уҡытыусы дөрөҫ эшләмәй. Әммә, нисек кенә булмаһын, уҡытыусыға һүҙ тейҙермәйем, - тип хәтерләгәйне Рәйлә Фәсхетдинова. - Балаларыма уҡытыусы насар булыуы мөмкин түгел, тип иплəп кенә аңлатам. Әгәр ҙә мин дә уҡытыусыны, балаларға эйәреп, хурлау юлына баҫһам, минең балаларҙың да уҡыуға, мәктәпкә, ғөмүмән, белем алыуға мөнәсәбәте үҙгәреүе мөмкин. Был осраҡта инде баланың алдына ниндәй генә әҙерлекле һәм камил уҡытыусы сығып баҫмаһын, уның күнелендә формалашып өлгөргән уҡытыусының кире образы үҙ эшен эшләйәсәк. Йәғни, бала уҡытыусылар барыһы ла шулай була икән тип уйлаясаҡ. Был йәһәттән баланың төрлө яҡлап үҫешкән шәхес булып формалашыуында беренсе нәүбәттә ата-әсә яуаплы. Ә уҡытыусыға килгәндә инде, ул ата-әсә юҡ саҡта уларҙы алмаштырыусы ғына.

Әгәр ҡатын-ҡыҙ ғаиләһен, балаларын дөрөҫ юлдан алып бара белә икән, тимәк, етәксе булып та уңышлы эшләй аласаҡ, тигән һүҙ. Тәжрибә менән киләләр был: эш урынында ла тәртип булыуын яратам. Эшкә алған ваҡытта кемдең ниндәй хеҙмәткәр булырын алдан күреп-белеп торам. Үҙ эшен белеп, еренә еткереп эшләгән кешеләргә ҡырын бер һүҙ ҙә әйтеп булмай. Ә инде ғәйбәт һөйләп, кеше араларын бутап йөрөгәндәрҙе эштә тотмайым...

## Бер үҙе ун иргә торорлоҡ

"Эшем еңелдән түгел. Бәхетле ҡатын булып өйҙә ултырғым, ял иткем, балаларым, ейән-ейәнсәрҙәрем менән бергә булғым килә, тип, ҡул һелтәргә иткән мәлдәр ҙә күп булды. Әммә бер аҙ тынысланғас, эшемде ташлап китеп, тыныс ҡына өйҙә ята аламмы инде, тип, ауырып яткан ерҙән дә тороп эшкә юлланам..."

Тормош бер төрлө генә бармай. Көн менән төн алышыныып килгәндәй, бәхетле мәлдәр менән бәхетһеҙлектәр, ауыр минуттар менән еңелдәре сиратлап килә. Шулай булырға тейеш тә. Киреһенсә булған осраҡта, әҙәм балаһы бәхетле мәлдәренең ҡәҙерен белә алмаҫ ине. Тормошондағы иң ауыр саҡтарын Рәйлә Ғариф ҡыҙы шулай хәтерләне:

-Иң ауыр сағым - улым Эдиктың 1986 йылда Өфө авиация институтының икенсе курсын тамамлағас, әрмегә алыныуы булды. Бының өсөн имтихандарын махсус рәүештә алдан тапшырттырҙылар. Шул йылдың 9 февралендә атаһы баҡыйлыҡҡа күсте. Ул саҡта Афғанстанда һуғыш бара ине, Чернобылдә авария булғайны. Улымды Одесса өлкәһенең Чернобылдән алыҫ түгел урынлашҡан Балта ҡалаһына алып киттеләр.

Ҡыҙым Лилиә менән "Силәбе-Одесса" поезына ултырып, Эдиктың артынан эйәреп киттек. Хәрби часын барып таптыҡ, командирҙары менән осрашып, уны учебканан һуң тыуған яғына йә Мәскәү тирәһенә хеҙмәткә ебәреүҙәрен үтендек. Учебканан һуң уны бер нисә егет менән Иваново өлкәһенең Кинешма ҡалаһына ебәрҙеләр.

Шул ҡалаға киттем. Эдик хеҙмәт иткән рота химик һаҡланыу ротаһы ине. Ҡыҙыл мөйөштәренә барып инһәм, стеналары тулы фотолар йәбештерелгән. Фотоларҙың аҫтарында: "Чернобылдә шундай-шундай йортто химик яҡтан таҙарттыҡ", - тигән яҙыуҙары бар. Был минең өсөн көтөлмәгән хәл булды. Һуң, командирҙар уларҙы Чернобылгә ебәрмәйбеҙ, тигәйнеләр бит, тип уйлаған булам. Баҡһаң, әрмелә күҙ йәшенә, үтенескә, әхлаҡҡа урын бөтөнләй юҡ икән.

Эдиктың почерғы матур. Командирҙар менән тағы ла осрашып, уны роталарына писарь итергә өлгәшә алдым. Аҙаҡтан һалдаттарҙы Афғанстанға, Чернобылгә бөтөнләй ебәрмәй башланылар...

Эдигының әрмелә хеҙмәт итеүен, Чернобыль һәләкәтенән һуң шунда ебәреү ихтималлығын әсә кеше ауыр кисерә. Уйлап ҡараһаң, ире вафат булғандан һуң унан фатир ҙа, мөлкәт тә, аҡса ла - бер нәмә лә ҡалмай. Ҡыҙы Лилиә урта мәктәпте тамамлағас, медицина институтына уҡырға инә. Уға егерме өс йәшенә тиклем ҡарауһыҙ ҡалған өсөн айына 108 һум күләмендәге пенсия түләнеүен генә иҫәпләмәгәндә, тормошондағы барлыҡ ҡаршылыҡтарҙы ҡатынға бер үҙенә йырып сығып, барыһын да үҙ ҡулдары менән ҡорорға, йәшәүҙең сығанағы булған донъя малын табырға тура килә.

Өфөлә үҙ мөйөшөндә табыу, фатирлы булыу уны яулауға тиң ғәмәл булып иҫәпләнә. Хәҙерге заманда фатирҙар бушлай бирелмәнә лә, Өфөнө яулау күпкә еңеллəште. Ул сағында фатирҙы ипотекаға алыу ғына түгел, хатта ҡуртымға алып йәшәүе лә үтә ауыр мәсьәлә ине. Фатир алыуҙа Рәйлә Фәсхетдинова Гөлсирә апаһы менән Стәрлетамаҡ ҡалаһында бергә уҡыған дәүләт эшмәкәре Вазифа Хәмит ҡыҙы Байтуринаға рәхмәтле. Улар булмаһа, был мәсьәләне хәл итеүе бик ауырға төшәр ине. Сөнки йылдар буйына сиратта тороп алырға йөрөгән фатирҙы предприятие етәксеһенең икенсе берәүгә бирергә иткәнен белгәс, Рәйлә Ғариф ҡыҙы Вазифа Байтуринанан ярҙам һорай. Уның ярҙамы менән тиҙ арала ордер ҙа ала. Инорста баҡса тәҙергә ер алып, шунда йорт һала башлай...

Рәйлә Ғариф ҡыҙы шәхси тормошона ҡағылған барлыҡ ауырлыҡтарҙы бер үҙе йырып сыға алғаны өсөндөр инде, бер кеше уның хаҡында "Бер үҙе ун иргә торорлоҡ ҡатын!" тигәйне. Әммә шуныһы: Рәйлә Фәсхетдинова был ауырлыҡтарҙы ауырлыҡҡа иҫәпләмәне, оптимист була белде. "Гәлиә" химик-таҙартыу предприятиеһының генераль директоры булып эшләгән саҡта чиновниктар бюрократияһына ҡаршы көрәштә лә, хатта бер үҙе тотош ведомстволарға ҡаршы торғанда ла ул һәр саҡ үҙенең хаҡлы икәнлеген раҫлап, еңеп сыға алды. Әлеге мәлдә уның улы Эдуард Иван улы әсәһенең мираҫы булған предприятиены ел-ямғырҙан ҡурсалап, уңышлы етәкләп килә...

Рәйлә Ғариф ҡыҙы йырларға ярата. Ҡәҙимгесә итеп. Халыҡсан. Үҙебеҙсә. Ҡыланмай ғына. Рәхәтләнеп. Йыр юҡта йыр булһын тип түгел. Йырламайынса йәшәй алмағаны өсөн. Күңеле тулышҡанға. Моң эсендә йән тыныслығы табыр өсөн. Тапҡандыр...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Ун һигеҙенсе хат "Хаталаныу сәнғәте"

Мин телевизион тапшырыуҙар ҡарарға яратмайым. Әммә һәр ваҡыт ҡараған тапшырыуҙар булды: боҙҙа бейеү. Аҙаҡ мин уларҙан ялҡып, ҡарауҙан туҡтаным - даими рәүештә түгел, әлли ниҙә бер ҡарайым. Миңә иң ныҡы көсһеҙ тип иҫәпләнгәндәр йәки әлегә "танылғандар" араһына инмәгәндәрҙең уңышлы сығыш яһауы оҡшай. Уңышһыҙлыҡтарҙың уңышына ҡарағанда, башлап ҡына торғандарҙың йәки уңышһыҙҙарҙың уңышы олораҡ ҡәнәғәтлек тойғоһо килтерә.

Әммә эш бында түгел. Иң ныҡы миңә конькисының бейегән сағында үҙ хаталарын төҙәтеүе оҡшай. Ҡолай һәм аяғына баҫа, тиҙ генә бейеп китә һәм уны һис тә ҡоламаған кеүек дауам итә. Был сәнғәт, оло сәнғәт.

Ә бит тормошта хаталар боҙ яланындағына ҡарағанда күберәк була. Һәм хатандан арына белеү кәрәк: уларҙы тиҙ арала һәм... матур итеп төҙәтергә. Эйе, нәҡ матур итеп.

Кеше үҙ хаталарында ҡарышһа йәки артыҡ борсолһа, йәшәү бөттө, "барыһы ла улде" тип уйлаһа - был уның үҙе өсөн дә, эргәһендәгеләр өсөн дә көйөнөслө. Тирә-йүндәгеләр хатанан түгел, ә хаталанған кеше уны төҙәткәндә ниндәй белемһеҙлек күрһәтеүенән уңайһыҙлыҡ кисерә.

Үҙ алдыңда хатаңды таныу (ғәмгә белдереү мотлаҡ түгел: ул саҡта йә оят, йә ҡыланыу был) еңелдәрҙән түгел, тәжрибә кәрәк. Хата яһағандан һуң мөмкин тиклем тиҙерәк эшкә тотоноу, уны дауам итеү өсөн тәжрибә кәрәк. Һәм башҡаларға ла кешене хатаһын төҙәтергә мәжбүрләргә кәрәкмәй, ә уны төҙәтеү теләген уятырға кәрәк; бының өсөн ярыштарҙа ҡолаған һәм еңел генә үҙ хатаһын төҙәткән спортсыға тамашасылар уңайы сыҡкан саҡта ҡыуаныслы алҡыштар бүләк иткән кеүек булыуы шарт.

## Ун туғыҙынсы хат "Нисек һөйләшергә?"

Кейемдең бысраҡлығы - ул тәү сиратта һеҙҙе уратып алған кешеләргә ҡарата, үҙенә ҡарата ла инде, ихтирамһыҙлыҡ күрһәтеү. Эш үтә ҡупшы кейенеүҙә түгел. Ҡупшыларҙың кейемендә, бәлки, үҙенең элегантлығы хаҡында бигерәк арттырып кҙаллауы барҙыр, ҡупшы кеше көлкөлө менән сиктәш. Йәшегеҙгә ҡарап, үҙегеҙгә килешкән стилдә таҙа һәм бөхтә итеп кейенеү зарур. Спорт менән шөғөлләнмәгән ҡартты спорт кейеме спортсыға әүерелдермәйәсәк. "Профессор" эшләпәһе һәм ҡара костюмды пляжда йәки урманда бөшмәк йыйғанда кейеү мөмкин түгел.

Ә беҙ һөйләшкән телгә ҡарата мөнәсәбәтте нисек баһаларға? Тел кешенең зауығын, тирә-яғына, үҙенә ҡарата мөнәсәбәтен кейемгә ҡарағанда ла ныҡыраҡ сағылдыра.

Кешенең телендә төрлө бысраҡлыҡтар бар.

Әгәр кеше ҡаланан алыҫта тыуып йәшәй һәм үҙ диалектында һөйләшә икән, бында бер ниндәй ҙә бысраҡлыҡ юҡ. Башҡаларға нисектер, ә миңә урындағы диалекттар, ҡәтғи тотолған саҡта, оҡшай. Уларҙың моңо, урындағы һүҙҙәр, әйтемдәр оҡшай. Диалекттар йыш ҡына рус әҙәби телен байытҡан бөтмәҫ-төкәнмәҫ сығанаҡ булып тора. Бер мәл әңгәмә барышында яҙыусы Федор Александрович Абрамов былай тине: Рус Себеренән Петербургты төҙөү өсөн гранит ташын һәм һүҙ - былиналар, сеңләүҙәр, лирик йырҙарҙың таш блоктарындағы һүҙҙәрҙе ташығандар. Былиналарҙың телен "төҙәтеү" - рус әҙәби теле нормаларына ауҙарыу - уларҙы боҙоу ғына.

Кешенең ҡалала йәшәп, әҙәби тел нормаларын яҡшы белеп, үҙ ауылының рәүештәрен һәм һүҙҙәрен һаҡлауы - икенсе мәсьәлә. Был кешенең уларҙы матур тип иҫәпләүенән һәм шуның менән ғорурланыуынан килергә мөмкин. Был мине әсендермәй. Әйҙә ул "О"-лаштырып та һөйләһен һәм ғәҙәтләнгән моңон һаҡлаһын. Бында мин үҙ ватаны - үҙ ауылы менән ғорурланыуҙы күрәм. Был насар түгел һәм кешене һис кәмһетмәй. Был, хәҙер онотолған ҡыйыҡ ягалы күлдәк кеүек үк матур, тик уны бала сағынан кейгән һәм уға күнеккән кешелә генә шулай күренә ул. Әгәр ул уны ҡупшылаңыу өсөн генә, "ысын ауыл кешеһе" булыуын күрһәтеү өсөн генә кейһә, был көлкөлө лә, оятһыҙ ҙа: "Ҡарағыҙ мин ниндәй: ҡалала йәшәүемә төкөрҙөм мин. Һеҙҙең берегеҙгә лә оҡшарға теләмәйем!"

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



## 11 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 1.15, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.00 "Время покажет". [16+]
14.15, 16.00, 19.00, 22.50 Информационный канал. [16+]
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера сезона. "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Дело №10: Метроном". [16+]
0.15 Д/с Премьера. "БРИКС. Горизонты будущего: Эфиопия". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Овчарка". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]
11.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]
12.00 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]
12.15, 13.45, 17.45 Интервью. [12+]
12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Башҡорттар. [6+]
16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
16.45 Х/ф "Советник". [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 Защитники Отечества. [12+]
19.00, 4.30 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Д/ф "Параллельные миры". [16+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Көстәнәс. [12+]
23.30 Золотой фонд башкирского телевидения. [12+]
2.15 Спектакль "Вознесись мой, Тулпар!" [12+]

## 12 НОЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.50 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера сезона. "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Дело №10: Метроном". [16+]
0.15 Д/с Премьера. "БРИКС. Горизонты будущего: Египет". [12+]
1.15, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Овчарка". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]
11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 13.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Тайм-аут. [12+]
12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Городок АЮЯ. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Автограф. [12+]
17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Тольятти" (Самара). КХЛ.
23.00 Башкирские каникулы. [12+]
2.15 Спектакль "Молодые сердца". [12+]
4.15 Письма солдатам. [12+]
4.30 Телецентр. [12+]

## 13 НОЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.50 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера сезона. "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Дело №10: Метроном". [16+]
0.15, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Овчарка". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]
11.00 Дорога к храму. [6+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45 Криминальный спектр. [12+]
12.00 Дознание. [16+]
12.15, 13.45, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]
12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Физ-ра. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Автограф. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 Тормош. [12+]
19.00 Телецентр. [12+]
19.45 Ради добра. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Защитники Отечества. [12+]
21.00 Спроси у Дубовского.
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
2.30 Спектакль "Таланты и поклонники". [12+]
5.00 Тайм-аут. [12+]

## 14 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.50 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера сезона. "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Дело №10: Метроном". [16+]
0.15, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Овчарка". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]
11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 13.45 Интервью. [12+]
12.00 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]
12.15, 4.45 Письма солдатам. [12+]
12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Сулпылар-2024. [6+]
15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Дознание. [16+]
16.15 Патриот РФ. [12+]
16.45 Мегасело. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Йома. [6+]
19.00 Телецентр. [12+]
19.45 Мама. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
21.00 Простые истории. [12+]
22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
2.30 Спектакль "Вой волчицы". [12+]

## 15 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.35 "АнтиФейк". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.50 Спецпроект. "30 лет вместе". "Последний герой". [12+]
23.45 "Голос. Дети". Новый сезон. Прямой эфир. [0+]
1.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
0.15 "Истории Большой Страны". [12+]
1.15 Х/ф "Семья маньяка Беляева". [12+]
4.49 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00, 0.30 Т/с "Сломанные жизни". [16+]
11.00 Йома. [6+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45 Криминальный спектр. [12+]
12.00, 13.45, 17.45 Интервью. [12+]
12.15 Ҡурай даны. [12+]
12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 1.15 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Тирмәкәй. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Хазина. [6+]
16.45 Ради добра. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 Башҡорттар. [6+]
18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Барыс" (Астана). КХЛ.
22.00 СВОих не бросаем. [12+]
22.15, 4.45 Письма солдатам. [12+]
23.00 Ете егет. [12+]
0.00 Ҡурай-шоу. [12+]
2.45 Спектакль "Земляки". [12+]
5.00 Хазина. [12+]

## 16 НОЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Джуна. Дар как наказание". [12+]
11.05 "Играем свадьбу!" [12+]
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
12.20 Поехали! [12+]
13.15 "Наше всё". [12+]
14.05 "ПроУют". [0+]
15.15 Премьера. "Родня". Музыкальный детектив. [12+]
16.45 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
17.50 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
19.50 "Эксклюзив". [16+]
21.00 "Время".
21.35 Х/ф "Адмиралъ". [16+]
23.55 Х/ф "Утраченные иллюзии". Экранизация великого романа Оноре де Бальзака. [18+]
2.50 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "Доктор Мясников". [12+]
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Большой юбилейный концерт Игоря Крутого. [12+]
0.50 Х/ф "Прости за любовь". [12+]
4.25 Х/ф "Поцелуев мост". [12+]
6.13 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Доброе утро! [12+]
7.30, 17.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45 Мегасело. [12+]
8.30 Хазина. [6+]
9.00 Ҡурай даны. [12+]
9.15 Квадратные метры. [12+]
9.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]
9.45 СВОих не бросаем. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Этно-краса. [6+]
11.00 Гора новостей. [6+]
11.15 Ат уйнатып. [12+]
12.00, 18.00 Елкән. [6+]
12.30 Ете егет. [6+]
13.30 Башҡорттар. [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Лес - моя биография. [12+]
21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30, 2.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]
23.15 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
0.15 Караоке по-башкирски. [12+]
0.45 Концерт Айнура Аминева. [12+]
3.15 Спектакль "Жанна, завтра будет новый день". [12+]
5.30 Башҡорттар. [6+]

## 17 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.50 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.35 "Часовой". [12+]
8.05 "Здоровье". [16+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.20 Х/ф "Семнадцать мгновений весны". К 55-летию публикации романа". [16+]
15.30 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России 2024. Этап IV. [0+]
17.00 Д/ф "Джуна. Дар как наказание". Полная версия. [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Премьера. "Точь-в-Точь". [16+]
21.00 "Время".
23.00 Спецпроект. "30 лет вместе". "Что? Где? Когда?". [12+]

### РОССИЯ 1

6.40 М/ф "Смотрим мультфильмы".
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 Большие перемены.
12.30 "Истории Большой Страны". [12+]
13.25 Т/с "Фантазёр". [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.40 Д/ф "Адмирал Колчак. Жизнь и смерть за Россию". [12+]
3.32 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Доброе утро! [12+]
7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45 Тормош. [12+]
8.15 Ради добра. [12+]
8.30 Көстәнәс. [12+]
9.00 Ҡурай даны. [12+]
9.15 Мама. [12+]
9.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]
9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Тирмәкәй. [6+]
10.45 Городок АЮЯ. [6+]
11.00 Гора новостей. [6+]
11.15 Этно-краса. [6+]
11.30 Зерно. [6+]
12.00 Сулпылар-2024. [6+]
12.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]
13.15, 4.15 Башкирские каникулы. [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
14.45 Дорога к храму. [6+]
15.15 Честно говоря. [12+]
16.00 Башҡорт йыры-2023. [12+]
19.00 Мегасело. [12+]
20.00 Патриот РФ. [12+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Автограф. [12+]
21.00 Дознание. [16+]
21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]
22.30, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Концерт Лилии Биктимировой. [12+]
1.15 Спектакль "Дачники". [12+]
3.15 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]
5.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Ноябрь (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 11 (9) дүшәмбе | 6:55 | 8:41 | 13:30 | 15:30 | 17:17 | 19:04 |
| 12 (10) шишәмбе | 6:57 | 8:43 | 13:30 | 15:29 | 17:16 | 19:03 |
| 13 (11) шаршамбы | 6:59 | 8:45 | 13:30 | 15:27 | 17:14 | 19:01 |
| 14 (12) кесе йома | 7:01 | 8:47 | 13:30 | 15:26 | 17:12 | 19:00 |
| 15 (13) йома | 7:03 | 8:49 | 13:30 | 15:24 | 17:11 | 18:58 |
| 16 (14) шәмбе | 7:04 | 8:51 | 13:30 | 15:23 | 17:09 | 18:57 |
| 17 (15) йәкшәмбе | 7:06 | 8:53 | 13:30 | 15:21 | 17:08 | 18:56 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Бер минут эсендә ғүмереңде юғалтҡансы, бер минут ғүмереңде юғалтыу яҡшыраҡ.*

*(Уругвай мәҡәле).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 8 НОЯБРЬ - ХАЛЫҠ-АРА КВН КӨНӨ

**Был байрамды 2001 йылда Рәсәйҙә һәм ҡайһы бер БДБ илдәрендә башлап билдәләйҙәр. Ул саҡта КВН халыҡ-ара клубының президенты булып торған Александ Масляков ошо тәҡдим менән сыҡҡас, байрам датаһын Шаяндар һәм тапҡырҙар клубының тәүге уйыны үткән көн - 1961 йылдың 8 ноябренә тап килтереп һайлайҙар.**



Заманында КВН уйынын телевизорҙан күрһәтеүҙәре оло бер ваҡиға тип ҡабул ителә. Тәүҙә тапшырыу күңелле викторина рәүешендә үткәрелә, яйлап унда конкурстар ойоштоpола башлай. Бөгөн уның ҡағиҙәләре барыһына ла асыҡ билдәлә, һәр берене тапҡыр шаяртыуҙарға тулы. Был тапшырыуҙы оҙаҡ йылдар Александр Масляков алып барҙы, ҡыҙғаныска күрә, ул быйыл баҡыйлыҡҡа күсте. Бөгөн КВН унда уйнаусылар өсөн - икенсе эш урыны, бизнес, хатта яҙмыш. Ә тамашасыларға - сағыу шоу, күңелле итеп ваҡыт уҙғарыу. КВН уйынын һәр кем яратып ҡарай, тос шаяртыуҙарға көлә, уйлана ла.

Башҡортостан йәштәре өсөн дә был уйын, был һүҙ ят түгел. Сөнки мәктәп йылдарынан улар юмор донъяһына ылығып үҫә: бына инде ике тиҫтәнән ашыу ваҡыт мәктәп йәшендәгеләр араһында "Шаяниум" шаяндар һәм тапҡырҙар конкурсы, ә өлкәнерәктәргә "Башҡорт асыҡ КВН лигаһы"ның ярыш-уйындары ойошторола. Был уйындарҙа ҡатнашыусылар араһында йәмғиәтебеҙҙә билдәле генә кешеләр ҙә бар: йырсы Радик Юлъяҡшин, Тайфун Ҡоролтаевич ҡушаматлы Фидан Килмөхәмәтов, Урал Кәримов, Марсель Мөхәмәтйәнов һ.б. Башҡорт йәштәре Stand UP шоуҙар ҙа ойоштора. Былар барыһы ла башҡорт телен һәм юморын популярлаштырыу, үҫтереү маҡсатында эшләнә.

Был юлы "Башваҡкыста" Өфө ҡалаһында урынлашҡан белем усаҡтарының КВН-командалары атамаларын табып ҡарарға тәҡдим итәбеҙ.




*М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының командаһы*

*48-се Башҡорт лицейы командаһы*

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**43-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Йөрәк. Башҡорт. Төрөмбәт. Тулҡын. Серге. Көрт. Һалдат. Юрға. Өсмөйөш. Банк. Ат. Дағa. Алты. Аршын. Лакей. Килт. Рим. Йәшен. Ыҙан. Әрме.

**Вертикаль буйынса:** Саҡматаш. Терегөмөш. Есем. ДНК. Бөрө. Илайым. Мәке. Өршәк. Алтай. Юша. Әшнә. Татар. Клёш. Кәрлә. Ерем. Туҡһанбай. Өн. Ля. Батыр. Нефтекама.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**13 ноябрь "Амеля"** (Н. Крашенинников, А. Балғазина инсц.). 12+

**16 ноябрь "килен"** (З. Мусина, З. Бураҡаева инсц.), драма. 18.00 16+

**17 ноябрь Премьера! "Йырланмаған йырым һин..."** (В. Исхаҡов), музыкаль мелодрама. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**12 ноябрҙә** Салауат ҡалаһында:

**"Чиполлино"** (Дж. Родари) мажаралар. 10.00, 12.00 0+

**"Килә яуа, килә яуа"** (З. Хәким), комедия. 16+

**16 ноябрь "Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 18.00 12+

**17 ноябрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 12.00 6+

**"Униженные"** (З. Биишева), драма. 18.00 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**14 ноябрь "Шесть чувств"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский). 18.00 16+

**15 ноябрь "Кукольная кухня"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский). 18.00 0+

**16 ноябрь "Буратино"** (П. Васильев). 12.00, 15.00 0+

**17 ноябрь "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). 12.00, 15.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**12 ноябрь "Арфа джазда"** Камерный оркестр концерты. 6+

**14 ноябрь "Йырҙарымда йәшәү йәме!"** Радик Вәлмөхәмәтовтың концерты. 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**15 ноябрь "Тоғролоҡ"** (М. Ҡунафин), драма. 16+

**16 ноябрь "Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен), әкиәт. 13.00 0+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**11 ноябрҙә -** Мораҡ, **12 ноябрҙә** Иҫәнғол ауылдарында гастролдәрҙә:

**"День рождения кота Леопольда"** (А. Хайт, Б. Савельев), әкиәт-мюзикл. 11.00 0+

**"Как избежать зла"** (Д. Сидерос), мәктәп драмаһы. 13.00 12+

**"Беҙҙең байлыҡ"** (А. Сәсәнбаев), комедия. 12+

**13 ноябрь "Беҙҙең байлыҡ"** (А. Сәсәнбаев), комедияһы менән Асҡар ауылында. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**14 ноябрь "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), комедия. 12+

**16 ноябрь "Һөйәрҙәргә ҡапҡан"** (И. Йомағолов), комедия. 18.00 12+

**17 ноябрь "Пусть звучит курай Батыра"**, музыкаль әкиәт. 12.00 0+

**"Аҡ ҡалфаҡ"** (М. Фәйзи), драма. 18.00 12+

## БР Милли музейы

**14 ноябрь "Ярлыҡау"** фильмы күрһәтелә. 14.00 6+

**15 ноябрь** Ротангтан кашпо үреү буйынса оҫталыҡ дәресе. 14.00 12+

**16 ноябрь "Александр Васильевич Колчак. Ғалим һәм полководец"**, автор экскурсияһы. 15.00 12+

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# АЙРАТҠА - ҠОТЛАУҘАР!



**Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында театрҙың баш режиссеры, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Айрат Абушахмановтың юбилей аҙналығы үтә.**

Театр сәхнәһендә Айрат Әхтәм улының ин яҡшы һәм популяр спектаклдәре күрһәтелә, тип хәбәр иттеләр театрҙың матбуғат хеҙмәтенән. Юбилей аҙналығы Хәлисә Мөҙәрисованың повесы буйынса "Бәхет хаҡы" музыкаль мелодрамаһы (16+) менән асылды. Уның премьераһы 2012 йылдың 19 апрелендә булды. "Бәхет хаҡы" спектакле 12 йылдан ашыу ҙур уныш менән бара, ә 2024 йылдың 4 ноябрендә мелодрама 190-сы тапҡыр күрһәтелде. Шулай уҡ был аҙналыкта Мәжит Ғафуриҙың повесы буйынса "Кара йөҙҙәр" спектакле (16+), Зифа Ҡадированың повесы буйынса "Һинһеҙ килгән яҙҙар" мелодрамаһы (16+), ҡаҙаҡ драматургы Олжас Жанайдаровтың пьесаһы буйынса "Джут. Һуңғы йәйләү" спектакле ҡуйылды. Юбилей аҙналығының бишенсе көнөндә Айгөл Әхмәтгәлиеваның пьесаһы буйынса "Ул бит кисә ине" лирик комедияһы (12+) күрһәтелде. Айрат Әхтәм улы был пьесаны Мирхәйҙәр Фәйзи исемендәге Ырымбур дәүләт татар драма театрында ла сәхнәләштерҙе. Режиссерҙың юбилейы уңайынан Өфө һәм Ырымбур театрҙары ижади проект әҙерләне - Дилара ролен Ырымбур татар драма театры актрисаһы Әлиә Салпикова уйнай. 9 ноябрҙә Айрат Әхтәм улы Абушахманов үҙенең 50 йәшлек юбилейы айҡанлы ҡотлауҙар ҡабул итә. Аҙналыҡ Таңсулпан Ғариповaның роман-пенталогияһы буйынса "Бөйрәкәй" спектакле (16+) менән тамамлана.

# АУЫЛҒА ҠАЙТ ТА...

**Башҡортостанда мәҙәниәт һәм өҫтәмә белем биреү өлкәһе белгестәренә "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" программаһы буйынса 1 миллион һумлыҡ бер тапҡыр бирелә торған компенсация түләнә. Мәҙәниәт министрлығы конкурс буйынса һайлап алыу тураһында иғлан итте.**

Шарттарға ярашлы, белгестәр дәүләт һәм муниципаль мәҙәниәт учреждениеларында эшләргә һәм һөнәри белемле булырға, йә иһә мәҙәниәт өлкәһендә өҫтәмә белем биреү учреждениеларында (балалар сәнғәт мәктәптәрендә, балалар музыка мәктәптәрендә, балалар һынлы сәнғәт мәктәптәрендә, балалар хореография мәктәптәрендә) уҡытырға тейеш. Аҡсага 2021 йылдан ауыл еренә йәки 50 меңгә тиклем кеше йәшәгән ҡалаға эшкә килгән 35 йәшкә тиклемге белгестәр дәғүә итергә мөмкин. Маҡсатлы түләү белгестәрҙең торлаҡ шарттарын яҡшыртыуҙы, шулай уҡ шәхси автотранспорт һатып алыуҙы күҙ уңында тота. Конкурсҡа ғаризалар республиканың Мәҙәниәт министрлығына 6 ноябрҙән 13-нә тиклем ҡабул ителә.

# ФӘРЗӘНӘНЕҢ ЕҢЕҮЕ

**30 октябрҙә Краснодарҙа XX "Молодой киновек" халыҡ-ара һәүәҫкәр һәм профессиональ фильмдар кинофестивале еңеүселәре бүләкләнде. Фестивалдә бар донъянан 500-ҙән ашыу фильм ҡатнашты. Ойоштороусылар булып Краснодар крайының Мәҙәниәт министрлығы һәм губернаторы сығыш яһаны.**

Фестивалдә Гран-призы Фәрзәнә Утарбаеваның "Нигеҙ" фильмы яуланы. Төп бүләкте һәм статуэтканы уға Краснодар крайының мәҙәниәт министры Виктория Лапина тапшырҙы. "Фильмдың режиссеры ла, сценарий авторы ла үҙем, - ти Фәрзәнә Утарбаева. - Минең фильмды юғары баһалауҙары менән бик бәхетлемен, сөнки был эшкә күп көс һалдым. Һәр фильмымды тамашасыға төп мәғәнәне еткереү өсөн күнелемдә һалып һәм яратып төшөрәм. Бүләкләү тантанаһынан һуң минең фильмды күрһәттеләр, мин быны көтмәгәйнем. Тамашасылар яныма килеп ҡотланы, актерҙар тураһында һорашты. Шулай уҡ актер Риф Сәйфуллиндың эшен юғары баһаланылар. Ижади төркөмгә һәм актерҙарға оло рәхмәтемде белдерәм".

# "МИРАҪ" КОНКУРСЫНДА...

**Ошо көндәрҙә Ғ.Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернатында Ғаилә йылына бағышланған X "Мираҫ" Республика мәҙәни асыҡ конкурс-фестивале үтте.**

Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың мәҙәни мираҫын һаҡлау һәм үҫтереүҙе маҡсат иткән конкурста һәүәҫкәр һәм үҙешмәкәр коллективтар, айырым ҡатнашыусылар, 7 йәштән алып мәктәп уҡыусылары, урта профессиональ белем биреү ойошмалары студенттары "Инструменталь музыка", "Вокал башҡарыуы", "Тере һүҙ", һүрәттәр һәм проект эштәр номинацияларында үҙ көстәрен һынаны. Саранын тәүге көнөндә республикабыҙҙың төрлө төбәктәренән ҡатнашыусылар "Фортепиано" инструменталь музыка номинацияһында үҙ оҫталыҡтарын күрһәтте. Унда Өфө, Туймазы, Бөрө, Ишембай, Салауат, Стәрлетамаҡ, Ағиҙел ҡалаларынан, Өфө һәм Иглин районынан - барыһы ҡырҡ йәш һәүәҫкәр ҡатнашты. Шулай уҡ ҡатнашыусылар "Вокал-башҡарыу", "Рус халыҡ музыка ҡоралдары" (баян, аккардеон, думбыра), "Ҡыллы һыҙғыслы музыка ҡоралдары" (скрипка, альт, виолончель), "Башҡорт халыҡ музыка ҡоралдары" (думбыра, ҡурай, ҡылҡумыҙ), "Тынлы музыка ҡоралдары" (ағас/баҡыр), "Һуҡма музыка ҡоралдары" (ксилофон, барабан) номинацияларында ла үҙҙәрен һынатманы, сығыштары менән тамашасыларҙы таң ҡалдырҙы.

Ғаилә йылына бағышланған "Тере һүҙ" номинацияһында конкурсанттар төрлө әҙәби әҫәрҙәрҙе яттан һөйләне, "Һүрәттәр конкурсы"нда ижади һәләттәре менән уртаҡлашты, "Проект эштәр конкурсы"нда иһә үҙҙәренең видеоролик йәки презентацияларын яҡланы. Бер аҙнаға яҡын барған "Мираҫ" республика конкурс-фестивале ҡатнашыусыларҙа ла, баһалама комиссияһы ағзаларында ла тик яҡшы тәьҫораттар ҡалдырҙы. Йәш сәхнә йондоҙҙары киләһе йылда ла сағыу сығыштар менән шатландырырға һүҙ биреп таралышты.

**Гүзәл ХОҘАЙБИРҘИНА.**

ТЕЛЬӨЙӘР

# ҺАҠЫМ ЕТӘКСЕ

**Халыҡта элек-электән оло кешенең һаҡымын хөрмәтләйҙәр. Мәҫәлән, тәбиғи талантҡа һәм һаҡымға эйә Арыҫлан Мөбәрәков сәнғәттә иҫтә ҡалырлыҡ сағыу образдар һынландырҙы. "Һаҡым" һүҙенең мәғәнәһен юллап, "Башҡорт теленең академик һүҙлеге"н асайыҡ.**

**Һаҡым. 1.** Диалекттарҙа ҡулланылған һүҙ. Алда килтерелгән тәүге миҫалда "олпатлыҡ" тигәндә белдерә. Шундай уҡ миҫалдарға туҡталайыҡ: *Һаҡымын белгән ҡунаҡ. Һаҡым етәксе.* **2.** Икенсе осраҡта "һаҡым" - "мөһабәт төҫ-ҡиәфәт" тигәндең синонимы. Мәҫәлән: *Һөкланғыс һаҡым.*

**Химая.** Яҡлау, ҡурсалау тураһында һөйләгәндә "химая" тигән һүҙ ҙә бик урынлы. Зәйнәб Биишева әҫәренән миҫал: *Тайба әбей ... йәш киленен химаяға алды.*

**Химаясы.** "Химаясы" "авдокат" тигән һүҙҙе алыштыра ала. Миҫал өсөн: *Химаясы яллау. Тәжрибәле химаясы.*

**Һиммәт. 1.** Һиммәт ул - көслө ынтылыш, ялҡынлы дәрт; тырышлыҡ. Миҫалға: *Кош ҡанат менән, ир һиммәт менән оса (әйтем). Эште һиммәт менән атҡарыу.* **2.** Һиммәт тағы ла "намыҫ, дан" тигәнде лә аңлата. Мәҫәлән: *Үҙ һиммәтен һаҡлар аҫыл улдарын тыуҙыра, үҫтерә торор башҡорт халҡы (Ғайса Хөсәйенов).* **3.** "Игелек, йомартлыҡ, ярҙам", тип тә аңлатыла был һүҙ. Миҫал: *Һиммәт күрһәтеү. Һиммәткә рәхмәтле булыу.*

**Шулай итеп, туған телде химаяға алған һәр замандаш үҙ һиммәтен арттырыр.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БЕҘ ЭЛЕК ТЫУҒАН...

## хәҙергеләр белеп тыуған

Ҡар башына ҡар етер, бей башына бей етер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Битарафлыҡ - йәндең иң ауыр сире.

**(Алексис Токвель).**

Әгәр ҙә кемдер табандарыңды яларға итһә, тешләшә башламаҫ элек уны аяғың менән тибеп ебәр.

**(Поль Валери).**

Белгән нәмәне генә ятратырға мөмкин.

**(Леонардо да Винчи).**

Һәр яуызлыҡ көсһеҙлектән килеп сыға.

**(Жан-Жак Руссо).**

Дошманың менән үбешеүгә ҡарағанда дуҫың менән һуғышыуың артыҡ.

**(Шолом-Алейхем).**

Үҙен яҡшы тотҡан кешене нисек танырға? Яуызлыҡҡа түҙемле мөнәсәбәте аша.

**(Соломон ибн-Габирол).**

Бер минут эсендә ғүмереңде юғалтҡансы, бер минут ғүмереңде юғалтыу яҡшыраҡ.

**(Уругвай мәҡәле).**

Факттар фәнендә ялған булған нәмә тормош фәнендә хәҡиҡәт булыуы бар.

**(Сантаяна).**

Бер йән икенсе йәнгә тартылғанда һуҡыр һәм ҡурҡыуһыҙ була.

**(Лопе де Вега).**

Хоҙай һәр ҡошҡа үҙ аҙығын бирә, тик был аҙыҡты табыр өсөн ул осорға тейеш.

**(Аноним).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер күл өҫтөнән самолет осоп бара. Ундағы осоусыларҙың береһе икенсеһенә былай ти:**

**- Күрәһеңме, ниндәй матур күл! Ошо күлдән йыраҡ түгел минең тыуған ауылым урынлашҡан. Бала сағым шул ауылда үтте. Мин йыш ҡына ошо күлгә балыҡ ҡармаҡларға килә инем. Балыҡ ҡармаҡлау минең иң яратҡан шөғөлөм булды. Шул саҡта баш осонан гел генә самолеттар осоп уҙа ине. Мин һәр ваҡыт тиҙерәк үҫеп етергә һәм летчик булып, ошо күл, тыуған ауылым өҫтөнән самолетта осоп үтергә хыялландым. Был минең берҙән-бер хыялым ине. Хәҙер инде ул тормошҡа ашты. Хәҙер инде мин самолетта осоп барған килеш оло һағыш һәм һоҡланыу менән ошо күл өҫтөнә бағам һәм ҡартлығымды, ошонда ҡайтып төйәкләнеп, балыҡ тотоп үткәрергә хыялланам..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
7 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2750
Заказ - 1959